ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

1-7 апрель (алағарай) 2023

№ 12 (1054)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Коштарға ла ғәзиз тыуған ер**



2-3

**Атайым менән әсәйемдең яҡшылығы…**

ауылдаштарым араһында йәшәргә ярҙам итә



8-9

**Мөмкинлектәре сикләнмәгән Азат**



11

**Күмәкләп һағындыҡ бөрйәнде…**



12-13

*Ташламалы хаҡҡа яҙыл!*

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙға 10 апрелдән ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә ташламалы хаҡ менән 664 һум 66 тингә яҙыла алаcаҡһығыҙ, тип алдан уҡ хәбәр ебәрәбеҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# БЕЛЕМ БИРЕҮ ҺӘМ ТӘРБИӘ.

## Улар хәҙер йәнәш барасаҡ!



*"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2023" Гүзәл Ғайсина.*

**Ошо көндәрҙә баш ҡалабыҙҙа республиканың педагогик йәмәғәтселеге өсөн иң мәртәбәле, мөһим һөнәри ярыштарҙың береһе - "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" республика һәм "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурстарына йомғаҡ яһалды. Шулай уҡ беренсе тапҡыр республика кимәлендә уҙғарылған "Дистанцион белем биреү уҡытыусыһы" тигән конкурста ла иң-иңдәр тәбрикләнде. Һөнәри ярыштарҙа барлығы 300-гә яҡын уҡытыусы ҡатнашыуы билдәле булды.**

28-се тапҡыр ойошторолған "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсында ҡатнашыусылар "Медиавизитка" һәм "Педагогик эшмәкәрлекте күрһәтеү" һынауҙарын ситтән тороп үткән, ә бына "Дәрес", "Оҫталыҡ дәресе", "Тәрбиәүи сара" һәм "Матбуғат-конференция" тигәндәрендә Өфөгә килеп ҡатнашҡандар. Әйткәндәй, быйыл ярышҡа республиканың төрлө район-ҡалаларынан, Ханты-Манси автономиялы округы - Юграннан, Ҡурған һәм Силәбе өлкәләренең дөйөм белем биреү, һөнәри белем биреү учреждениеларынан 61 уҡытыусы килгән.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ОҘАЙТЫП ТОРМА




**Рәсәйҙә 2012 һәм 2013 йылдарҙа алынған водитель таныҡлыҡтарының ғәмәлдә булыу ваҡыты өс йылға оҙайтылды. Был хаҡта дүшәмбе Эске эштәр министрлығы башлығы Владимир Колокольцевҡа һылтанма менән "Известия" хәбәр итте.**

Ведомство коллегияһының киңәйтелгән ултырышында төп доклад менән сығыш яһағанда уның етәксеһе былдай водитель таныҡлыҡтарын оҙайтырға кәрәкмәүен белдерҙе. Документтың ғәмәлдә булыу ваҡыты автоматик рәүештә өс йылға оҙайтыла. 2022 йылдың 1 ғинуарынан 2023 йылдың 31 декабренә тиклемге осорҙа транспорт йөрөтөү таныҡлыҡтары ғәмәлдән сыҡҡан водителдәргә "Дәүләт хеҙмәттәре" аша документты алмаштырыуға ғариза бирергә һәм ЮХХДИ-ға барырға кәрәкмәй. Колокольцев һүҙҙәренсә, ҡарар Рәсәй Эске эштәр министрлығы органдарына йөкләмәне кәметеү һәм автомобиль хужаларына уңайлы булһын өсөн ҡабул ителгән.

*АФАРИН!*

# ЕГЕРМЕ БЕР ЙЫЛ РӘТТӘН..

## Өфө балалары "Шаяниум"да

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың белем усаҡтарынан иң шаян һәм тапҡыр уҡыусылар сираттағы "Шаяниум" конкурсының финал уйынында ҡатнашты. Егерме беренсе тапҡыр үткәрелгән ярыш һөҙөмтәләре буйынса Өфөнөң Ғәли Ибраһимов исемендәге 2-се Башҡорт лицейының "Тағы ла "2" командаһы (һүрәттә) еңеү яуланы.**



Быйылғы "Шаяниум"-дың район этабында 44 команда сығыш яһап, шуларҙың 23-ө ҡала кимәленә сыҡҡан һәм ни бары 14-е генә финал уйындарына барып еткән. Был иң шаяндар араһында уҡытыу башҡортса алып барылған 6 команда уйындың финалында призлы урындар өсөн көс һынашты ла инде. Балалар үҙ сығыштарын Рәсәйҙә "Уҡытыусы һәм остаз йылы", ә Башҡортостанда "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" йылына бағышларға тейеш булған һәм "Илле - илендә, ерле - ерендә" тигән дөйөм теманы күҙ уңында тотоп әҙерләнгән.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

12+

@KISKEUFA

**Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!**

смартфон камераһын төбә

### ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә туҡтандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҮҘЕҢДӘН БАШЛА!

***Фирҙәүсә ҒӘЗИЗОВА, БР Өфө ҡала округының "Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк" өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһының туған телдәр буйынса методисы:*** Минең тормош девизым шулай: бар нәмәне лә үҙеңдән башларға кәрәк. Үҙеңә талапсан булмайынса, башҡаларҙан ғына талап итеп ултырыусының абруйы булмай. Мәҫәлән, башҡорт мәктәбендә белем алып, ҙур вазифалар биләгән шәхестәрҙең, хатта ҡайһы бер атҡаҙанған исемдәр алған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының ғаиләләрендә үҫкән балаларҙың туған телендә һөйләшмәүе аптырата һәм уйландыра. Үҙемдең ике балам Өфө ҡалаһының Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында уҡыны. Ҡыҙымдың синыф етәксеһе башҡорт теле уҡытыусыһы Ләйсән Мәмбәтколова балаларҙы ниндәй генә театрҙарға, музейҙарға, экскурсияларға йөрөтмәне. Улымдың башҡорт теле уҡытыусыһы Фәриҙә Миһранова уҡыусыларға әсәй кеүек булды. "Бына Фәриҙә Ҡаҙыхан ҡыҙы шулай ти", - тип, һәр осраҡта уҡытыусыһының ғәмәлдәрен, һүҙҙәрен миҫал итеп килтерә ине. Бер йыл улымдың класс етәксеһе Дауыт Шамғунов булды. Малайҙар уны бигерәк тә үҙ итте, олаталары урынына күрҙеләр, унан күп нәмәгә өйрәнделәр. Ике өлкән балам да башҡортса яҡшы һөйләшә. Бәләкәй ҡыҙыма әле 3 йәш тә тулмаған. Өйҙә уның менән тик башҡортса ғына аралашабыҙ. "Аҡбуҙат" журналын алдырабыҙ. Уны буяп та, йыртып та бөтөрә, тик барыбер ул беҙҙең өйҙә үҙ туған телендә журнал барын белеп үҫә.

Эйе, ата-әсәләр балаларын әсә теленән мәхрүм итһә, әлбиттә, тел дә, мәҙәниәт тә бөтәсәк. Бынығы көн кеүек асыҡ. Ни өсөндөр беҙҙең халыҡ, белемдә 3-сө, 39-сы, 93-сө гимназияла бирәләр, ә башҡорт гимназиялары, лицейҙары, мәктәптәре белем бирмәй, тип уйлай. Төптә дөрөҫ түгел. Беҙҙең милли гимназия-лицейҙарыбыҙ белем менән бергә, милли тәрбиә лә бирә, шуны иҫтә тотһон ине милләттәштәр. Милли тәрбиә, тигәндәй. Өләсәйемдең алтын һүҙҙәре бар ине: мәктәптә уҡыусыларҙы тәрбиәләй башларҙан алда уларҙың ата-әсәһен тәрбиәләргә кәрәк. Ысынлап та, атай-әсәйҙәр үҙҙәре туған телде һанлаһа, балаларын бәләкәйҙән үк башҡорт концерттарына, спектаклдәргә, төрлө сараларға, осрашыуҙарға бергә алып йөрөһә, әлбиттә, балала туған мәҙәниәткә ҡыҙыҡһыныу ҙа, һөйөү ҙә уянасаҡ. Был йәһәттән мәктәп коллективының ғына тырышлығы етмәй, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта мәктәптең үҙендә лә балаларҙы туған мөхиткә ҡыҙыҡһындырыу саралары булырға тейеш. Мәҫәлән, ҡарағыҙ, Шайморатов класы уҡыусылары үҙ формаһын ҡалай ғорурлыҡ менән кейеп йөрөй, шуның кеүек, башҡорт балалары уҡыған мәктәптәргә башҡорт орнаментлы мәктәп формалары индереү ҙә шундай уҡ һөҙөмтә бирер ине. Ул йәһәттән ҡайһы бер өлгөләр бар ҙа шикелле. Малайҙарыбыҙҙың милли биҙәкле галстуктар тағып йөрөгәнен дә күрә башланыҡ.

Булғандар, өлгәшелгәндәр менән дөрөҫ итеп ҡулланырға өйрәнергә кәрәк беҙгә. Мәҫәлән, Өфөләге башҡорт гимназиялицейҙарында уҡырға теләгән уҡыусылар күпләп ағылһа, сират хасил итһә, ихтыяж барлығын белеп, ундай белем усаҡтарын тағы ла асырҙар ине. Халыҡ өҫтән ниндәйҙер фарман төшкәнде генә көтөргә ғәҙәтләнгән шул. Ә бөгөн кеше үҙе менән үҙе идара итергә, үҙ әҙмышын үҙ ҡулына алырға тейеш. Ошоно аңлаһаҡ, бер ниндәй заман һынауҙары ла һындыра алмаясаҡ беҙҙе.

**Зәмфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

### БЫЛ АЙҘА...

# ҠОШТАРҒА ЛА ҒӘЗИЗ ТЫУҒАН ЕР

**Үткән айҙарҙы кемдәрҙер оҙайлы ялдары йә байрам көндәре өсөн көтөп алһа, был айҙа - апрелдә - күңелде елкендереп торған күренекле көндәр ҙә юҡ һымаҡ. Элекке шаярыудияларҙы иҫләп, 1 апрель, тиер инек тә, бөгөн көлкө ҡайғыһы юҡ. Тәүге космонавт Юрий Гагарин 1961 йылдың 12 апрелендә юл һалған йыһан киңлектәре лә хәҙер ғәҙәти эш урынына әйләнде. 22 апрель һәм ошо көндә беҙҙең быуын балаларының тантаналы рәүештә тәүләп пионер галстугы тағыу ғәҙәтеме? Көлдөрмәгеҙ әле, бөгөн мәктәптәрҙә Ленинды - космонавт тип уйлаусы, ә пионерияны ишетеп тә белмәгән быуын уҡый.**



Әысынында иһә, эш байрам-кәйеф көтөүҙә түгел, әлбиттә. Йорт-ил - тыныс, үҙебеҙ имен-һау булып, күңелдәребеҙ яҙғы күк йөҙөндәй аяҙ, тормошобоҙҙоң етеш, тотороҡлого кәрәк. Һәр көн, һәр айыбыҙ байрам кеүек булһын ине. Быйылғы алағарай ысынында иһә тап ана шундай - башынан алып, ахырынаса тип әйтерлек һәр көнө-сәғәте байрам ай; марттың аҙаҡҡы аҙнаһында башланып киткән Рамаҙан - ураҙа айы - йән һәм тән таҙарыныу, Аллаһтың ризалығы, әжер-сауаптары хаҡына ураҙала булыу, күберәк ғибәҙәт ҡылыу, Ҡөрьән-Кәримде уҡыу, Ул биргән ниғмәттәргә шөкөр итә белергә өйрәнеү һәм инаныу айы, ә был башҡа теләһә ниндәй байрамдарына биргеһеҙ хазиналар айы.

Рамаҙан айының һуңғы ун төнө эсендәге бер кисендә ( Рамаҙан айының 27-се төҙлегендәге төн), тимәк, бөгөнгө календарҙа **17-нән 18 апрелгә** ҡараған төн тип фаразлана - Ҡөрьәндең тәүге әҙәктәре индерелә башлаған Ҡәҙер кисе (ләйләтү-әл ҡәҙер; Ҡәҙрәт төнө) көтөлә. Ҡәҙер кисе - йылдың иң мөһим кисе. Был хаҡта Аллаһы Тәғәлә айырып әйткән әлеге төнгә тиң башҡа бер генә ай ҙа, йыл да юҡ, тиелә изге Китапта. Был кисәлә доға ҡылыусыларҙың теләктәре ҡабул була, гонаһтары ғәфү ителә. Шулай итеп, Рамаҙан айы **21 апрель** Ураҙа байрамы менән тамамлана. Уның әһәмиәте, моғайын да, бөтөн донъя һәм Рәсәй кимәлендә Үҫеш һәм тыныслыҡ хаҡына спорттың халыҡ-ара көнгә **(6)** йөгөнто яңамай ҡалмаҫ, тип ышанғы килә.

Алағарай - ҡарҙар ереп, ағыу ташa, боҙ китә торған осор. Метеорологтар фаразлауынса, ташҡын кимәле, Ағиҙел менән Ҡариҙел йылғаларын ғына алып ҡарағанда ла, ғәҙәттәгенән 10-15 процентҡа түбәнерәк булыр тип күҙаллана, ләкин донъя хәлен кем белә: аныҡыраҡ прогноздар шулай ҙа һуңғараҡҡа табан кисектерелә. Йылы яҡтарҙан ҡоштар ҡайта - был яҙҙың иң матур, иң йәнле осоро. Тәүге яҙ хәбәрселәре - ҡара ҡарғалар. Улар апрелде көтөп сыҙамай, марттың 20-ләренә үк килеп етә. Март ахыры - апрель баштарында сыйырсыҡтар ҡайта. Алағарайҙың тәүге яртыһында бар̆ҡылдаҡтар, ҡыҙылтүш турғайҙар, аҡҡоштар, һабан турғайы; икенсе яртыһында ҡыр өйрәктәре, аҡсарлаҡтар, торналар, ҡыр ҡаҙҙары оҙон һауа юлдарын ярып, ҡанаттары талсығып ҡайтып төшәләр һәм Башҡортостан урмандары, йылға буйҙары, хатта дала киңлектәре лә ҡоштар йырына, сыр-сыуына күмелә. Ҡоштарға ла ғәзиз тыуған ер... Шуға күрәлер ҙә, айҙың тәүге көнө үк **(1)** Ҡоштар көнөнә бағышлана.

Әйткәндәй, ә нимәләр эшләнә һуң был көндә? Мәктәп алдындағы ағастарға тағараҡтар ҡыш көнө үк эленде. Ҡоштар, бигерәк тә, Башҡортостан ҡоштары хаҡында уҡыусы балалар ниҙәр белә? Балалар түгел, өлкәндәрҙең дә күбеһе исеме-атамаһы менән танып-белә, айыра алмай уларҙы, яңыраҡ ҡына үҙем шаһит булдым быға. Беҙ йәшәгән йорт янындағы мәктәп биләмәһендә, билдәле булыуынса, былтыр "Ҡоштар скверы" төҙөлгәйне. Балаларға ял итергә, спорт менән шөғөлләнергә бик шәп шарттар, заманса ҡоролмалар, күнекмә ҡоралдары, бәүелсәктәр - бөтәһе лә эшләнгән! Хатта ҡарт-ҡороға ултырып ял итергә уңайлы эскәмйәләр теҙелгән. Бер генә нәмә аңлашылмай: ниңә был урын "Ҡоштар скверы" тип аталған?

Миңә был һорауҙы сквер аша үтеп барғанымда ошонда уйнап йөрөгән ейәнен ҡарауыллап ултырыусы өлкән генә ҡатын бирә ҡуйҙы. "Ошо фигура өсөнмө икән?" тип ымланы үҙе һорауына үҙе яуап итеп, майҙан уртаһында ултырған ҡупырыҡ көҙәле, өкө тиһәң - өкөгә, турғай

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Туризм тармағы республика өсөн мөһим үҫеш нөктәһенә әүерелә, тине Радий Хәбиров Дәүләт Йыйылышы ултырышында. "Бөгөн беҙ Рәсәйгә, бар донъяға Башҡортостанды асабыҙ. Республика туристарҙы йәлеп итеү рейтингында алдынғы төбәктәр иҫәбенә инә. Былтыр Башҡортостанға 1,9 миллион турист килгән. Ошо күрһәткес буйынса округта тәүге өсәү иҫәбендәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең потенциал ярайһы уҡ юғары. Геологик, танып белеү, сәнәғәт туризмын тулы көсөкә үҫтерергә тейешбеҙ", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

✓"Шуныһы мөһим: республикала эшһеҙлек кимәле бик түбән - 3,4 процент (Рәсәй күрһәткестәренән түбәнерәк). Кадрҙар мәсьәләһен хәл итеү өсөн беҙ урта һөнәри белем биреү системаһын ныҡытыуҙа мөһим аҙымдар яһаныҡ. Күп йылдар эсендә тәүге тапҡыр урта һөнәри белем биреү учреждениеһы өсөн былтыр ярты миллиард һум аҡса бүлдек, 11 колледжды ремонтланыҡ. Быйыл - тағы 300 миллион һум. Киләсәк иҡтисады өсөн яуаплы белгестәр лайыҡлы шарттарҙа йәшәргә һәм уҡырға тейеш", - тине Башҡортостан Башлығы Дәүләт Йыйылышы ултырышында.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең указы менән махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яҡташтарыбыҙ - комендант батальонының хәрби-сәйәси эш буйынса икенсе комендант ротаһы командиры урынбаҫары Марат Зөлҡәрнәевты һәм ғәскәри часть полкы командиры урынбаҫары Айҙар Исмәғилевты билдәләне. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Марат Зөлҡәрнәев - Салауат Юлаев, Айҙар Исмәғилев генерал Шайморатов ордены менән бүләкләнде.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин "Ҡыйыулыҡ өсөн" миҙалын булдырыу ҡарарын ҡабул итте. Дәүләт башлығының тейешле указы 23 мартта рәсми порталда баҫылған. "Ҡыйыулыҡ өсөн" миҙалы менән Ватанды һәм Рәсәй Федерацияһының дәүләт мәнфәғәттәрен яҡлау, шулай уҡ халыҡ-ара тыныслыҡты һәм именлекте яҡлау йәки терегеҙеү буйынса хәрби һәм башҡа операцияларҙы башҡарғанда ҡыйыулыҡ, ҡаһарманлыҡ күрһәткән Рәсәй граждандары бүләкләнә", - тиелә миҙал тураһында положениела. Миҙал менән сит ил граждандары ла, граждандығы булмағандар ҙа бүләкләнергә мөмкин. Уның ике дәрәжәһе бар, I дәрәжә иң юғарыһы һанала.

**✓ Фәҡәт тик рухыбыҙға, милли булмышыбыҙға ғына үҙебеҙ хужа була алабыҙҙыр ул. Барлыҡ ҡоллоҡтарҙан азат булыуҙың берҙән-бер юлы - Аллаһ ҡоло булыу! Уның ҡолон бер кем дә, бер нәмә лә ҡол яһай алмай!**



тиһән, үтә лә ҙур һәм себеш баҫып ултырыусы тауыҡҡа тартым ҡош ишаратына ымлап. Ысынлап та, башҡаса бында ҡоштар тормошон хәтерләтеүсе бер ишара ла юҡ икән шул. Әлеге аңлайышһыҙ ҡош-һәйкәлде ҡыҙым йәлләп бер була: аяҡ терәгестәргә баҫып, был ҡошҡайҙың өҫтөнә балалар үрмәләй, иң юғарыға менеп етер өсөн бер-берен дөмбәҫләй, талаш-тартыш китә, бәлки, ҡолап төшөүселәр ҙә етерлектер.

Шул уҡ ваҡытта ҡантүш турғайҙы (снегирь) ҡыҙылтүштән (зяблик) айыра алмаусы бер уҡытыусы иҫемә төштө. Ә балалар ни белә һуң ҡоштар хаҡында? Әлеге скверҙа, исмаһам, төҫлө рәсемдәр менән ҡоштарҙың атамалары, оя ҡороуҙары, бала сығарыуҙары, ниндәй бөжәктәр менән туҡланыуы, уларҙың файҙаһы, ҡышлаусы һәм йылы яҡҡа китеүсе төрҙәре хаҡында белешмә стенд эшләп ҡуйылһа ла был ял урыны икеләтә файҙаға булыр ине. Әлегә, шөкөр, баш ҡалабыҙ Өфө яҙлы-көҙлө ҡоштар моңона ҡумелә, юғиһә, Рәсәйҙең Мәскәү һәм башҡа эре ҡалаларында ҡанатлы дуҫтарыбыҙҙың, бигерәк тә турғайҙарҙың һиҙелерлек кәмеүе хаҡында күптән инде борсолоп яҙыла бит. Урман-ҡырҙарыбыҙ, ауылдарыбыҙҙың ғына түгел, ҡалаларҙың да экология торошон сағылдырыусы тере "барометрҙар" тора-бара бөтөнләйгә юғалып бөтмәгәйе... Шул уҡ ваҡытта беҙ ҡоштарҙың хәүефле сир - ҡош киҙеүе сығанағы булыуы хаҡында ла белергә тейешбеҙ.

**Алағарай календары:**

**1 -** Көлкө көнө; **2 -** Балалар китабы көнө; **7 -** Һәләк булған һыу аҫты дингеҙселәрен иҫкә алыу, Бөтөн донъя һаулыҡ көндәре; **9 -** Һауа һөжүменә ҡаршы оборона көнө; 1**2 -** Авиация һәм космонавтика көнө; **15 -** Мәҙәниәт көнө; **16 -** Православныйҙарҙың Пасхаһы; **18 -** Халыҡ-ара һәйкәлдәрҙе һәм тарихи урындарҙы һаҡлау көнө; **19 -** Ырымбур ҡалаһыҡтмаһына нигеҙ һалыныуға - 280 йыл (1743); Рәсәй полиграфияһы, Умырзая көндәре; **21 -** Ураҙа байрамы, Башҡортостан халыҡтарының милли кейемдәре көнө; **22 -** Халыҡ-ара Ер көнө; **23 -** Бөтөн донъя китап һәм авторлыҡ хоҡуғы көнө; **24 -** Йәштәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө; **28 -** Тиҙ ярҙам хеҙмәткәрҙәре, Химия хәүефһеҙлеге, Хеҙмәтте һаҡлау көндәре; **29 -** Халыҡ-ара бейеү; **30 -** Янғын һағы көнө.

**Алағарайҙа тыуғандар:**

**10 -** күренекле әҙәбиәт белгесе, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, академик, филология фәндәре докторы, профессор, республиканың С.Юлаев исемендәге премияһы лауреаты, "Ватандаш" журналының тәүге баш мөхәррире **Ғәйсә Хөсәйеновтың тыуыуына - 95 йыл** (1928-2021).

**10 -** педагог, дирижер, үҙешмәкәр композитор, йырсы, Ишембай балалар сәнғәт мәктәбенең Маҡар филиалы мөдире, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Мәрйәм Солтановаға - 85 йәш** (1938).

**10 -** М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры артисы, Башҡортостандың - халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, БР Театр эшмәкәрҙәре берлегенең идара рәйесе, Салауат Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты **Әхтәм Абушахмановҡа - 75 йәш** (1948).

**20 -** йырсы, педагог, З.Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Фәрзәнә Сәғитоваға - 80 йәш** (1943).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*



# ДАНЫҢ АЛДАН ЙӨРӨЙ

**Әгәр ҙә бынан 10-15 йылдар элек өйҙә ултырып йәки Ер шарының ҡайһы урынында булып та эшләү мөмкинлеге тураһында һөйләһәләр, бер кем дә ышанмаҫ ине. Ә бөгөнгө көндә дистанцион эшләү бер кемде лә аптыратмай, киреһенсә, алдынғы компания хеҙмәткәрҙәренең күбеһе онлайн хеҙмәттә. Бынан һәр кем ота - компанияға әллә ниндәй ҙур биналар төҙөргә йәки ҡуртымға алырға түгел, етмәһә, хеҙмәткәргә юлға киткән ваҡытын, аҡсаһын файҙалы тотонорға мөмкинлек бирелә.**

Мин үҙем дә ошондай ситтән тороп эшләүселәр рәтендәмен - IT белгесемен. Һәм үҙемдең белемемдә төп хеҙмәт урынымда эш хаҡы алыуға ғына түгел, ә өҫтәмә килем килтереү өсөн дә ҡулланам. Интернет, компьютер һәм төрлө программалар менән дуҫ булыусы йәштәр күп хәҙер, уларға үҙ шөғөлөм тураһында һөйләп үткем килә.

Бөтә эшмәкәрлек компьютерға, виртуаль донъяға күсеп бөттө тиерлек. Шул иҫәптән фото төшөрөү өсөн дә элекке һымаҡ әллә ниндәй махсус аппарат кәрәкмәй - ҡулында смартфон булған һәр кем фотоһәүәҫкәр. Көнөнә унлаған, йөҙәрләгән фото эшләргә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта элекке ваҡыттарҙа төшөрөлгән һәм ҡағыҙ форматта һаҡланған фотолар ҙа һәр ғаилә өсөн ҡәҙерле ҡомарҡты. Ләкин ваҡыт үтеү менән улар төҫһеҙләнә, тоноҡлана, ситтәре йыртыла һәм башҡалар. Ошондай ваҡытта минең хеҙмәткә һорау тыуа ла инде. Мин элекке фотоһүрәттәрҙе төҙәкләндереү менән булам. Аҡ-ҡара, төҫлө фотолар, портрет йәки күмәк фото - барыһын да махсус компьютер программалары ярҙамында тәүге торошона ҡайтарырға була. Бының өсөн ни бары төрлө редакторҙарҙа эшләй белергә кәрәк. Артабан тырышлыҡ, бер аҙ ваҡыт ҡына кәрәк. Тәүҙә бер-ике кешегә фотоларын эшләп биргәндә артабан "сарафан радиоһы" үҙ эшен эшләй һәм клиенттар һаны күбәйә. Бары тик һан артынан ҡыуып, эштең сифатын боҙмаҫҡа кәрәк, сөнки яҡшы дан кеүек үк, насар дан да үҙеңдән алда йөрөй.

Эш башлау өсөн әллә ни ҙур сығымдар кәрәкмәй, ә шул уҡ ваҡытта бар күнелде һалып, яратып башҡарғанда был өлкәлә етерлек кенә килем алырға була. Мәҫәлән, мин бәләкәйерәк портрет фотоларҙы 300 һумға эшләйем, күмәк фотоларҙы төҙәкләндереү ҡиммәтерәк, ғөмүмән, һәр кем үҙенең эшенә хаҡты үҙе ҡуя ала. Клиенттар табыу өсөн тәүге фотоларҙы, реклама йәһәтенән, бушлай ҙа эшләп бирергә мөмкин.

Бөгөнгө көндә өҫтәмә килем алырҙай шөғөлдәр күп, мөмкинлектәр ҙә бар, барыһы ла кешенең теләгенән тора, бары тик заман технологияларын уңышлы һәм дөрөҫ ҡуллана белергә генә кәрәк. Беҙҙең эш менән булғанды балалар ҙа күреп, буш ваҡытты файҙалы һәм килемле итеп уҙғарып булыуын белеп үҫһендәр.

**Шайморат ҒӘЛИН.**

*ӨС ДӘЛИЛ: АБВ*

# АЛЛАҺ ҠОЛО БУЛАЙЫҠ




**Әҙәм балаһының тәбиғәте шундай: ул бар нәмәгә лә хужа булырға ынтыла. Тик ниндәй генә байлыҡты ҡулға төшөрһәк тә, беҙ, ысынлап та, уның хужаһымы икән? Мәсьәләгә өс күҙлектән ҡарайыҡ:**

А беҙ - әйбер ҡоло, хәҙерге замандың иң хәтәр ҡол биләүселәре - фатир, ер, автомобиль, кеҫә телефоны, интернет һ.б. Әммә фатир, ер, автомобиль өсөн - һалым, телефон, интернет менән файҙаланған өсөн хаҡ түләйбеҙ икән, беҙ быларға тулыһынса хужабыҙмы? Ярай ҙа ерҙе, машинаны, фатирҙы бер юлы аҡсаһын түләп һатып алһаҡ, ә инде ғүмер буйы кредит, ипотека түләргә тура килһә? Ҡыҫҡаһы, үҙебеҙ хужаһы, тип иҫәпләгән байлыҡтарыбыҙҙы баҡыйлыҡҡа алып китә алмаған, уларҙың барыһы ла вариҫтарыбыҙға тороп ҡалғас, уларҙан тағы ла вариҫтарға ҡалғас, беҙ, ысынлап та, хужабыҙмы икән?

Б Ризыҡты ла үҙ аҡсабыҙға һатып алғас, тәүҙә уға үҙебеҙ хужа. Әммә ризыҡ ҡорһағыбыҙға төшөп яткас, ул хужа: беҙгә энергия бирә, төрлө ғәмәлдәр башҡарта, сифатһыҙ булһа, ауырыуға



һабыштыра. Кеше артабан шул ризыҡтың ҡоло булып, ҡайҙалыр эшләргә, аҡса табырға, аҡсаһына тағы ла ризыҡ һатып алып, тағы ла тәрәнерәк ҡоллоҡҡа төшә. Ризыҡтар араһында иң зәһәр ҡол биләүсеһе - араҡы, ул кешенең эсенә ингәс, яман уйҙар уйлата, хатта енәйәт эшләтә.

Енәйәтсе закон ҡолона әүерелеп, төрмәгә барып эләгә. Донъяла төрмә иерархияһынан да яманыраҡ ҡоллоҡ юҡ, тиҙәр. Унда булып, иреккә сығыусылар ҙа ғүмере буйына уның йөғонтоһонан, төрмәлә ултырыусыларҙың мөнәсәбәт ҡоллоғонан ҡотола алмай, тиҙәр.

В беҙ хатта үҙебеҙҙең тәнебеҙгә лә, йәнебеҙгә лә хужа була алмайбыҙ. Тәнебеҙ ергә ашлама булып китә, йәнебеҙ Хоҙай хөкөмөндә ҡала. Фәҡәт тик рухыбыҙға, милли булмышыбыҙға ғына үҙебеҙ хужа була алабыҙҙыр ул. Барлыҡ ҡоллоҡтарҙан азат булыуҙың берҙән-бер юлы - Аллаһ ҡолo булыу! Уның ҡолон бер кем дә, бер нәмә лә ҡол яһай алмай, Унан ҡурҡҡан бәндә башҡа бер кемдән дә ҡурҡмай!

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика етәксеһе 10 апрелгә ҙур ҡалаларҙы тәртипкә килтерергә ҡушты. Ғәҙәттә был ваҡыт 1 майға тиклем тип билдәләнә ине, ләкин быйыл ҡар иртә ирей башланы, ҡалалар ҡыштан һуң ҡалған бысраҡ һәм сүп-сар менән тулған, тип билдәләне Радий Хәбиров. Контроль идаралығына 10 апрелдә эштең барышы, ҡалаларҙа таҙалыкты тикшереү йомғаҡтары тураһында мәғлүмәт еткерергә ҡушылды.

✓Благовещен психоневрология интернатында өлкән йәштәге граждандар өсөн 60 урынлыҡ яңы корпус төҙөү эштәре 2022 йылдың ғинуарында башланғайны. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Благовещен районы буйлап эш сәфәре барышында башҡарылған эштәр менән танышты. Благовещен интернаты тотош республиканан 400 кешене ҡабул итә ала. Яңы корпус төҙөлеше "Демография" милли проекты сиктәрендә алып барылған. Проекттың хаҡы 408 миллион һум тәшкил иткән, шуның 381 миллионы - федераль аҡса.

✓Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант үткәреү өсөн текстар конкурсының башланыуын иғлан итте. Тексты bashdiktant2023@mail.ru электрон почтаһына 3 апрелгә тиңгә сәғәт 11-гә тиклем ебәрергә кәрәк. Һәр йүнәлеш буйынса ойоштороу комитеты еңеүсене билдәләй, улар өсөн 5 мең һумлыҡ бүләктәр ҡаралған.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин ил Хөкүмәтенә алдағы ике йылда аҙ ҡатлы йорттар төҙөүгә 10 миллиард һум бүлергә ҡушты. Аҡса авария хәлендәге торлаҡтан күсергә мәжбүр булғандар өсөн тәғәйенләнә. Документтан күренеүенсә, 2023-2024 йылдарҙа аҙ ҡатлы биналар төҙөлөшөн финанслауға федераль бюджеттан йыл һайын 10 миллиард һумға тиклем аҡса бүлергә кәрәк. Улар ағастан һалына һәм граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡтан күсереү өсөн тәғәйенләнә.

✓Башҡортостанда мәктәп автобустары водителдәре араһында һөнәри оҫталыҡ конкурсы ойоштоpола, тип хәбәр итте республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин. Ведомство башлығы һүҙҙәренсә, бүләкләү тантанаһы август кәңәшмәһендә була. Коронавирус пандемияһына бәйле сара бер нисә йыл үткәрелмәне.

***✓ Республикала һауа температураһының "уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәргә яҡын" булыуы көтөлә. Августа норманан тайпылыштар булыуы ихтимал, тип белдерҙе синоптиктар.***



*ҠЫҪҠАСА*

# БАШ ҠАЛАҒА...

**Башҡортостан Башлығы Дәүләт Йыйылышы ултырышындағы сығышында Өфөнөң үҫеше тураһында айырым әйтеп үтте.** "Бөгөн беҙ бында финанслау күләмен арттырабыҙ, тип асыҡтан-асыҡ әйтәбеҙ. Был аңлашыла ла, сөнки юбилейға әҙерләнәбеҙ. Өфө - өфөләр йәшәгән ҡала ғына түгел, ә дүрт миллионлы республикабыҙҙың баш ҡалаһы. Бындағы уңайлыҡтар менән Башҡортостанда йәшәүселәрҙең һәммәһе лә файҙалана. Тап шуның өсөн дә беҙ өфөләрҙең яратҡан урындарына заманса төҫ бирәбеҙ. Йыл һайын төҙөкләндерелгән парктар, скверҙар бүләк итәбеҙ. Ҡала халҡы Өфө менән ғорурлана алһын, ә уның ҡунаҡтары яңынан килергә ынтылһын өсөн. Күп кенә парктарыбыҙ Рәсәйҙә иң яҡшылар статусына дәғүә итә. Быйыл беҙ Черниковка биҫтәһенә яңыртылған "Нефтехимик" паркын бүләк итәбеҙ. Шулай уҡ ихаталарҙы һәм подъездарҙы тәртипкә килтерербеҙ. Ғөмүмән, Өфө алдында үҙенең юбилейын лайыҡлы ҡаршылау өсөн ҙур эш башҡарыу бурысы тора", - тине Радий Хәбиров депутаттар алдындағы сығышында.

✓ **Өфөлә Рәсәйҙең Ҡораллы көстәренә контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу өсөн "Ультра" сауҙа-күңел асыу комплексында (Баҡалы урамы, 27) һәм "Уҙәк" сауҙа комплексы янында (Цюрупа урамы, 97, 4-се бүлмә, көньяҡ парковка) күсмә пункттар эшләй башланы, тип хәбәр иттеләр баш ҡала хакимиәтенән.** Оборона министрлығы менән килешеү төҙөргә теләгән граждандар үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар алырға мөмкин. Тиҙҙән республиканың башҡа муниципалитеттарында ла ошондай күсмә пункттар асылырға тейеш. Башҡортостанда йәшәүселәргә Республиканың ситуация үҙәгендә контракт хеҙмәте буйынса кәрәкле консультация ярҙамы күрһәтелә. Колл-үҙәк (347) 218-19-19, 122 (доб.1) һәм 117 телефондары буйынса көн һайын (тәнәфесһеҙ, ял көндәрһеҙ) иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә тиклем шылтыратыуҙар ҡабул итә. Һорауҙар менән түбәндәге адрес буйынса мөрәжәғәт итергә: 450078, Өфө, Революция урамы, 156. Бәйләнеш өсөн телефон: 8 (347) 218-19-19, 8 (347) 248-29-31, кеҫә телефонынан 122.

✓ **Башгидрометүҙәк белгестәре 2023 йылдың апрель-сентябренә һауа торошона фараз бирҙе.** Республикала һауа температураһының "уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәргә яҡын" булыуы көтөлә. Прогноз 65-70 процент дөрөҫкә сыға, тип иҫкәртә метеорологтар. Августа норманан тайпылыштар булыуы ихтимал, тип белдерҙе синоптиктар. Әйтәйек, республиканың төньяғында йәйҙең һуңғы айы ғәҙәттәгенән йылыраҡ булыуы көтөлә. Уртаса тәүлек һауа температураһы апрелдә - +3, +6°, майҙа - +11, +14°, июндә - +16, +19°, июлдә - +17, +21°, августа - +15, +19°, сентябрҙә +9, +12°. Яуым-төшөм буйынса июндә һәм августа норманан тайпылыштар булырға мөмкин. Был айҙарҙа республиканың көньяғында һәм көньяҡ-көнсығышында ямғырҙың күберәк яуыуы фаразлана.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ДЕПУТАТТАР ҠОРОНДА...

**БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары республика Хөкүмәтенең 2022 йылдағы эш йомғаҡтары тураһында отчетын тыңланы.**

"2022 йылдың башында яңы, тарихыбыҙҙа тиңе булмаған хәл килеп тыуҙы. Беҙгә быға тиклем күрелмәгән санкция баҫымы яһала. Беҙ бирешмәнек, яңы бәйләнештәр һәм логистика төҙөнөк. Махсус хәрби операция, өлөшләтә мобилизация, Рәсәйҙең яңы төбәктәренә ярҙам итеү йәһәтенән йөкмәтелгән бурыстарҙы бергәләп хәл иттек. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә социаль ярҙам күрһәтеү менән шөғөлләндек", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Дәүләт Йыйылышы ултырышындағы сығышында.

"Тәүге бурысыбыҙ иҡтисадты һаҡлап ҡалыу ине. Был республика үҫешенең, социаль йөкләмәләрҙе үтәүҙең нигеҙе. Сәнәғәт етештереүе индексы йыл йомғаҡтары буйынса 102,7 процент тәшкил итте, был илдәге уртаса күрһәткестән юғарыраҡ. Ике йыл рәттән республика сәнәғәт сәйәсәтен ғәмәлгә ашырыу һөҙөмтәлелеге рейтингында төбәктәр араһында иң яҡшыһы тип танылды. Беҙ Рәсәй Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығының пилот төбәге булараҡ кластер моделен уңышлы бойомға ашырабыҙ, кластерҙар һаны буйынса алдынғы урынға сыҡтыҡ. "Алга" махсус иҡтисади зонаһы икенсе тапҡыр рәттән илдә иң йылдам үҫешеүсе тип танылды.

Аграрийҙарыбыҙ рекордлы - 5 миллион тонна - ашлыҡ йыйып алды. Тулайым ауыл хужалығы продукцияһы күләме 28,1 процент артҡан.

Республикабыҙ торлаҡты сафҡа индереү буйынса тарихи максимумға өлгәште (3 миллион квадрат метр) һәм тәүге ун төбәк иҫәбенә инде (Рәсәйҙә 7-се урын)", - тине Радий Хәбиров.

Башҡортостан тышҡы иҡтисади секторҙы үҫтереү менән етди шөғөлләнде, тип билдәләне республика етәксеһе. 2022 йылды тулыһынса тиерлек сәфәрҙә үткәрҙек. Беҙҙең өсөн элекке һәм яңы партнерҙарыбыҙ менән хеҙмәттәшлекте нығытыу мөһим ине. Айырыуса Белоруссия, Төркиә, Ҡаҙағстан, Иран, Үзбәкстан менән. Ошондай сәфәрҙәр, әүҙем эш алып барыу һөҙөмтәһендә беҙҙең әлеге илдәр менән тышҡы сауҙа әйләнеше үҫә. Төркиә менән - 37,6 процентҡа, Ҡаҙағстан менән - 10,1 процент, Белоруссия менән - 12,3 процент, Үзбәкстан менән - 32,6 процент.

Махсус хәрби операция бурыстарын хәл итеү, унда ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам күрһәтеү бөтә кимәлдәрҙәге власть өсөн мөһим бурыс булып ҡала, Хөкүмәт ағзаларының, хакимиәт башлыҡтарының, депутаттарҙың эшен тап уларҙың махсус хәрби операцияға бәйле бурыстарҙы ни тиклем һөҙөмтәле хәл итеү кимәленә ҡарап баһаларбыҙ, тип билдәләне Радий Хәбиров.

# АҒЫУЛАНАЛАР

**Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы 2023 йылдың ғинуар-февралендә токсикологик мониторинг һөҙөмтәләрен иғлан итте.**

Отчетта күрһәтелгәнсә, тәүге ике айҙа республиканың 35 районында һәм ҡалаһында: Стәрлетамаҡта (76), Өфөлә (50), Нефтекамала (13), Белоретта (22), Октябрьскийҙа (6), Дүртөйлөлә, Туймазыла (2-шәр), Ағиҙелдә, Бәләбәйҙә, Ишембайҙа, Күмертауҙа (1-әр), Стәрлетамаҡ (8), Өфө (7), Белорет (4), Иглин, Туймазы (3-әр), Баймаҡ, Ҡырмыҫҡалы, Тәтешле (2-шәр), Бишбүләк, Благовар, Благовещен, Ғафури, Дыуан, Дүртөйлө, Йәрмәкәй, Ейәнсура, Ишембай, Ҡалтасы, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Нуриман, Салауат, Учалы, Яңауыл райондарында (1-әр) хәмер менән ағыулангандар. Һөҙөмтәлә 34 кеше яҡты донъя менән хушлашҡан.

Бынан тыш, ғинуар-февралдә республикала 45 кеше наркотик матдәләр менән ағыуланған, 22 осраҡ үлем менән тамамланған. Бындай хәлдәр Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Октябрьскийҙа, Белоретта, Салауатта, Благовещен, Дыуан, Иглин, Ҡырмыҫҡалы һәм Туймазы райондарында теркәлгән.

Республикала 53 кеше углерод оксиды ҡорбаны булған, уларҙың 34-е үлгән. Ғәҙәттә, бындай фажиғәләргә мунсала һәм шәхси йортта мейесте файҙаланыу ҡағиҙәләрен һанға һуҡмау сәбәпсе. Углерод оксиды менән ағыуланыусылар Өфө (7), Октябрьский (5), Стәрлетамаҡ (3), Ишембай (2), Бәләбәй, Белорет, Дүртөйлө, Күмертау, Туймазы (1-әр), Иглин, Миәкә (4-әр), Дыуан, Дүртөйлө (3-әр), Ишембай, Кушнаренко, Краснокама, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ (2-шәр), Ауырғазы, Бөрө, Бөрйән, Ғафури, Ҡалтасы, Ҡырмыҫҡалы, Туймазы райондарында (1-әр) теркәлгән.

Әйткәндәй, былтыр "Айыҡ ауыл" республика конкурсында еренсе урынды алған Бөрйән районында химик матдәләр менән ағыуланыу осраҡтары теркәлмәгән.

# МӘҒЛҮМӘТ ХӘҮЕФҺЕҘЛЕГЕ

**Ульяновскиҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров йәмғиәттең мәғлүмәти именлеге һәм традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлау мәсьәләләре буйынса округ кәңәшмәһендә сығыш яһаны. Уны Рәсәйҙең Хәүефһеҙлек советы секретары Николай Патрушев үткәрҙе.**

Фекер алышыуҙа ил Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров, федераль министрлыҡтар һәм ведомстволар вәкилдәре, шулай уҡ Волга буйы федераль округы төбәктәре башлыҡтары ҡатнашты. Көн тәртибендә - Рәсәй йәмғиәтенә тышҡы деструктив мәғлүмәти һәм идеологик тәьҫиргә ҡаршы тороу, тарихи хәтерҙе һәм рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлау, шулай уҡ мәғлүмәт киңлегендә Рәсәй суверенитетын нығытыу. "Волга буйы федераль округы һәм бөтә ил өсөн мәсьәләнең көнүҙәклеге ап-асыҡ. Бөгөн йәмғиәтебеҙҙә геосәйәси көсәргәнешлеккә, махсус хәрби операция үткәреүгә һәм интернеттың йоғонтоһо артыуға бәйле етди социаль, сәйәси һәм коммуникация үҙгәрештәре бара", - тип билдәләне Игорь Комаров.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар терроризмды һәм экстремизмды пропагандалауға юл ҡуймау, ялған мәғлүмәт таратыу буйынса саралары ҡараны. Халыҡтың хоҡуҡи белемен арттырыу мәсьәләһе тикшерелде. Башҡортостан Башлығы үҙ сығышында халыҡ менән үҙ-ара эш итеү механизмдары, халыҡтың министрлыҡтар һәм ведомстволар менән бәйләнеш булдырыуы, дөрөҫлөккә тап килмәгән мәғлүмәт менән көрәш тураһында һөйләне. Кәңәшмә йомғаҡтары буйынса республика етәксеһе журналистарға эштең асыҡлыҡ принциптары, халыҡты борсоған мәсьәләләр буйынса диалог төҙөү хаҡында һөйләне. "Мәғлүмәт киңлегендә йәштәрҙең аҡылы һәм йөрәге өсөн мәғлүмәт көрәше бара. Башҡа төбәктәр менән фейктарҙы таратыуға ҡаршы көрәш буйынса тупланған тәжрибәбеҙ менән уртаҡлаштыҡ, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Шул уҡ ваҡытта халыҡҡа дөрөҫ мәғлүмәттәрҙе еткерә белергә кәрәк. Беҙ уларҙың фекерҙәрен һәм борсоған һорауҙарҙы ишетергә, эшебеҙҙе аңлатырға тырышабыҙ. Уларға һәр ваҡыт дөрөҫ һәм көнүҙәк мәғлүмәт алыу мөмкинлеге булдырыу мөһим".

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө мэры Ратмир Мәүлиев "Берҙәм Рәсәй"ҙең урындағы бүлексәһе секретары итеп һайланды. Был хаҡта ҡала башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте һәм әлеге вазифаның уның өсөн ышаныс билдәһе булыуын әйтте: "Бөгөнгө көндә ҡала, партия алдында ҙур бурыстар тора. 450 йыллыҡҡа әҙерләнеү, инфраструктура объекттарын төҙөү, торлаҡ-коммуналь мәсьәләләр. Атҡараһы бурыстар байтаҡ. Беҙ - бер команда. Максатыбыҙ - Өфөнө һәр яҡлап үҙгәртеү", - тип яҙған Ратмир Мәүлиев.

✓Өфөнән Көнсығыш сығыу юлы 2023 йылдың аҙағында төҙөлөп бөтөүе ихтимал, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Республика етәксеһенең төбәктәр үҫеше буйынса Хөкүмәт комиссияһы президиумы ултырышында билдәләүенсә, бынаң федераль бюджеттан тиҙерәк берлектә финанслау шарттарында тормошҡа ашыуы мөмкин. Бынан алда "Башинформ" Салауат Юлаев проспектынан Көнсығыш сығыу юлының көнбайыш порталына тиклемге участканың 25 процентҡа тамамланыуын хәбәр иткәйне. Бынан тыш, ошо көндәрҙә уның тоннелендә өс йыл дауамында барған күләмле һәм технологик яҡтан ҡатмарлы этап - ҡаҙыу эштәре тамамланған.

✓Өфөлә Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаттары билдәләнде. Бүләкләү тантанаһы Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҙҙы. Быйыл лауреат исеменә танылған режиссер, "Йөрәк һүҙе" проекты авторы Наилә Сәфәрғолова, "Йәншишмә" гәзитенең баш мөхәррире, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре Мирсәйет Юнысов лайыҡ булды. Гимназистар араһынан лауреаттар: Зөлхизә Усманова, Илгизә Йәрмөхәмәтова, Илназ Исхаҡов, Айҙар Байсыуаҡов һәм Элина Фәтхелисламова.

✓Uzbekistan Airways авиакомпанияһы 26 марттан Өфөнән Ташкентҡа рейстарҙы аҙнаһына ике тапҡырға тиклем арттыра. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, йәкшәмбеләге осоштарға шишәмбе рейстары өҫтәлә. Был йүнәлештә 188 пассажирға иҫәпләнгән Airbus A320/A320-Neo самолёттары оса. Utair авиакомпанияһы Өфөнән Ташкентҡа аҙнаһына бер тапҡыр, кесаҙна, Boieng 737-800 самолётында рейстарҙы башҡарыуын дауам итә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЯУГИРҘАРҒА...

## тонна ярым башҡорт балы

**"Торатау" Конгресс-холында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте һәм Ауыл хужалығы министрлығы ярҙамында Ҡортсолоҡто үҫтереү форумы үтте. Уның эшендә Татарстандан, Силәбе, Ырымбур, Свердловск өлкәләренән, Пермь, Приморье крайынан, Кузбасстан меңгә яҡын кеше ҡатнашты.**

Баш ҡаланың йәш рәссамының нейросеть менән авторлыҡта эшләгән "Киләсәк ҡортсолоҡо" тип аталған күргәҙмәһе форумдың үҙенсәлекле бер мәле булды, сөнки сара һуңында картиналар махсус хәрби операцияла ҡатнашҡандарға ярҙам маҡсатынан ойошторолған хәйриә аукционында һатылды. Махсус "валюта" - Башҡортостан төбәктәрендә йыйылған бал иҫәпләшеү сараһына әйләнде. Йәғни, ҡатнашыусылар картиналарҙы бал түләп алды. Аукционды Өфө ҡала хакимиәте, "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт автономиялы учреждениеһы һәм "Башспирт" акционер йәмғиәте ойошторҙо. Унда республиканың 22 умартасыһы ҡатнашып, яугирҙарға оҙатыу өсөн барлығы 1500 килограмм бал тапшырҙы. Ошо көндәрҙә "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге" белгестәре балдарҙы махсус лабораторияла тикшереп, таҙартып һа-



уыттарға тултырыуҙы тамамланы. "Беҙ тәҡдимебеҙҙе ишеткән һәм уртаҡ маҡсатта берләшкән умартасыларға ҙур рәхмәтлебеҙ", - ти "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт автономиялы учреждениеһы директоры урынбаҫары Лилиә Сабитова.

Балдарҙы һауыттарға тултырыу барышында учреждениеға Әбйәлил районының "Красная Башкирия" ауылы умартасыһы Роман Малышев тағы ла бер ни тиклем бал килтерҙе һәм журналистар менән ихлас аралашты. Ул үҙенең һөнәрен ата-олаталарынан күскән кәсеп булыуы менән аңлата һәм йәне-тәне менән умартасылыҡҡа бирелгән кеше. Үҙен "күсмән умартасы" тип баһалай, сөнки миҙгел дауамында умарталарын бер нисә урынға күсереп йөрөтә. "Хәйриә сараһында картинаны бал түләп һатып алыу аукционында ҡатнашырға тәҡдим иткәс, бер һүҙһеҙ ризалаштым, - ти ул. - Махсус хәрби операцияла беҙҙең егеттәр илде һаҡлай, уларға рухи йәһәттән генә түгел, физик яҡтан да бик ауыр, һәм бал көс бирәсәк, иммунитеттарын нығытасаҡ. Беҙ ебәргән бал - ҡулыбыҙҙан килгән ярҙамдың бәләкәй генә бер өлөшө".

Башҡортостандың төрлө төбәгенән йыйылғанлыҡтан, яугирҙарға сәскә, ҡарабойҙай, акация, шул иҫәптән йүкә балы ла оҙатыласаҡ. Улар 4 килограмлыҡ биҙрәләргә тултырылып, һәр ҡайһыһына умартасының исем-фамилияһы, районы яҙылған этикетка йәбештерелә. Был - "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт автономиялы учреждениеһының махсус хәрби операцияла ҡатнашҡандарға шундай ҙур күләмдә оҙатҡан тәүге партия балы. Улар былдай аукциондарҙы артабан да ойошторорға ниәтләй.

Әйткәндәй, Башҡортостан умартасылары Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла яҡташтарын тәбиғи антибиотиктан өҙмәгән. Ә инде 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары өсөн хатта бер вагон бал оҙатҡандар.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# КОМАНДИРОВКА ӨСӨН...

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙа командировка өсөн бирелгән түләүҙе арттырыу башланғысы менән сығыш яһанылар. Республика депутаттары тейешле закон проектын Дәүләт Думаһына ебәрҙе, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан парламентының матбуғат хеҙмәтенән.**

Документ командировка ваҡытында ойошма хеҙмәткәрҙәренә иҫәпләнгән тәүлек өсөн түләү күләмен ҡайтанан ҡарауға һәм уларҙы индексациялау өсөн хоҡуҡи шарттар булдырыуға ҡағыла. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев әйтеүенсә, ғәмәлдәге ҡануниәттә бер тәүлек өсөн 100 һум түләү өсөн ҡарар 2002 йылда ҡабул ителгән. Шул ваҡыттан алып тауарҙарға һәм хеҙмәттәргә хаҡ байтаҡҡа артты, ә командировкаға түләү башҡаса бер тапҡыр ҙа яңынан ҡаралманы, тип билдәләне спикер. "Бөгөн был төшкө аш хаҡына ла етмәгән символик сумма. Уның күләмен минималь эш хаҡынан сығып иҫәпләү дөрөҫ булыр. Был осраҡта бер тәүлеккә түләү күләме минималь эш хаҡының 1/30 өлөшө тип билдәләнергә тейеш", - ти Константин Толкачев.

Уның билдәләүенсә, бөгөн күп кенә ойошмалар үҙҙәренең хеҙмәткәрҙәренә билдәләнгән 100 һумдан күберәк түләй. Был йәһәттән закон проекты ғәмәлдәге тәртипте үҙгәртмәй, эш биреүсе, теләһә, командировка өсөн күберәк түләй ала. Бөгөн Рәсәй Федерацияһында минималь эш хаҡы күләме 16,2 мең һум тәшкил итә. Рәсәй Федерацияһы Президенты 2024 йылдан минималь эш хаҡы күләмен яңынан индексациялау бурысын ҡуйҙы - 2024 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә минималь эш хаҡы күләме 18,5 процентҡа, йәғни 19,2 мең һумға тиклем артасаҡ. Әгәр закон проекты хупланһа, киләһе йылдан командировкалар осоронда хеҙмәткәрҙәргә көнөнә 642 һум түләнәсәк. "Башҡортостанда был сумма күберәк буласаҡ, сөнки минималь эш хаҡы район коэффициенты арттырыуҙы иҫәпкә алып хисаплана", - тип аңлатты Константин Толкачев.

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# ХЕҘМӘТТӘШЛЕК КИҢӘЙӘ



**Ҡытай Халыҡ Республикаһы Рәйесе Си Цзиньпин Рәсәйгә дәүләт визиты сиктәрендә Евразия фәнни-белем биреү үҙәге университеттары менән Ҡытай университеттары араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы.**

● Бөгөн Башҡорт дәүләт медицина университетының Ҡытайҙың 15 университеты менән хеҙмәттәшлеге тураһында килешеүе бар. Уҡыу йорто аспиранттары һәм профессор-уҡытыусылар составы партнер вуздарҙа PhD программаһы буйынса белем ала, йыл һайын йәйге мәктәптәр, стажировкалар, ҡытай телен өйрәнеү курстары ойошторола. Үҙ сиратында БДМУ Ҡытай студенттарын стажировкаға ҡабул итә. Берлектә ғилми проекттар, мәҡәләләр баҫтырыу эшмәкәрлеге алып барыла. Медицина университеты уҡытыусылары - Ҡытай, Ҡытай университеты уҡытыусылары БДМУ студенттарына лекциялар уҡый.

● Башҡорт дәүләт аграр университеты 2018 йылда Наньчан университеты менән меморандум төҙөй. Документҡа ярашлы, уҡытыусылар һәм студенттар менән алмашыу программаһы эшләй, "йәйге мәктәп" программаһы, берлектәге тикшеренеү проекттары тормошҡа ашырыла.

● Ҡытай Халыҡ Республикаһының 32 студенты М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында белем ала. Педвуз Чанчунь ҡалаһының Төньяҡ-көнсығыш педагогия университеты менән "педагогика" йүнәлеше буйынса ике дипломлы белем алыу программаһын, фәнни стажировкаларҙы тормошҡа ашыра. 2023-2024 йылғы уҡыу йылында Аҡмулла университеты партнерҙар өсөн 2 урын бүлгән һәм алда атап үтелгән килешеүҙе оҙайтыу документтарын әҙерләй. Башҡортостан педвузы шулай уҡ Ҡытайҙың Цзянсий фәнни-техник педагогия университеты, Цзянсий һәм Ланфан педагогия университеттары менән килешеү төҙөгән.

● Өфө Фән һәм технологиялар университетында Ҡытайҙан 19 студент белем ала. Бөгөн ҠХР-ҙың 14 вузы менән әүҙем хеҙмәттәшлек алып барыла, ә студенттар менән алмашыу программаһында 100-ҙән ашыу кеше ҡатнаша. Университет Ляонин, Цзилинь химик-технологик университеттары, Шэньян технологик институты менән берлектә "Иҡтисад", "Филология", "Химик технология", "Электромеханика һәм автоматлаштырыу" йүнәлештәре буйынса ике диплом алыу программаһын тормошҡа ашыра. Яҡын киләсәктә Ҡытай студенттары өсөн перспективалы материалдар һәм заманса технологиялар буйынса йәйге мәктәп ойоштороу, Ҡытайҙың вуз-партнерҙары менән студенттар алмашыуҙа ҡатнашыусылар һанын арттырыу, Нанкин технология университеты базаһында берлектәге институт асыу ҡуҙаллана.

● 1990 йылдан алып Өфө дәүләт нефть-техник университеты 225 Ҡытай студентын уҡытып сығара, вуз Ҡытайҙың 12 юғары уҡыу йорто менән хеҙмәттәшлек итә. 2020 йылдан Ҡытайҙың партнер вуздары менән берлектә "Электротехника һәм автоматлаштырыу", "Төҙөлөш технологияһы" һәм "Нефть химияһы процестары технологияһы" бакалавр программалары буйынса хеҙмәттәшлек алып барыла. Киләһе уҡыу йылына был программаларға 114 Ҡытай студентынан ғариза бар ҙа инде.

● 2021 йылда "Роснефть", Өфө дәүләт нефть-техник университеты һәм Цинхуа университеты араһында берлектә кадрҙар әҙерләү өлкәһендә килешеү төҙөлә, 2022 йылда ӨДНТУ уҡытыусыларын өс программа буйынса Цинхуа университеты белгестәре онлайн рәүештә уҡыта.

● Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге менән РФА Юғары пластик металдар проблемалары институты фәнни ҡоралмалдар базаһын яңыртыу сараларында әүҙем ҡатнаша. Өфө федераль тикшеренеү үҙәге булексәләре химик технологиялар, фармацевтика өлкәһендә фәнни ойошмалар һәм ғалимдар менән хеҙмәттәшлек итә, берлектә ғилми тикшеренеүҙәр уҙғара.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Тары

❖ Бәүелдә аҡһым табылғанда тарыны йыуып, ҡайнар һыу ҡойорға һәм бурыҙкланғансы болғатырға. Бер аҙ тонғанын көтөргә һәм стаканға ҡойоп алырға. Төнәтмәне көнөнә бер нисә тапҡыр тигеҙ миҡдарҙа эсергә. Хәл яҡшырғансы дауаланырға.

### Талаҡ

❖ Талаҡ эшмәкәрлеге боҙолған осраҡта 4-5 бөртөк гөлйемеш (йәки 1,5 ҡалаҡ вакланғанын), 1 ҡалаҡ вакланған укроп һабағы, 1,5 ҡалаҡ календула сәскәһе, 1 бөртөк ҡомалаҡ башы (йәки 0,5 балғалаҡ вакланғанын), 1 ҡалаҡ һары мәтрүшкәне эмалле һауытҡа һалырға, 2 стакан һыу ҡойорға, утҡа ҡуйып ҡайнар хәлгә еткерергә. Шунан ҡапҡас ябып, талғын утта тағы 5 минут торорға. Утын һүндереп, йылыға төрөргә һәм һыуынғансы төнәтергә ҡалдырырға, аҙаҡ һөҙөргә. Дауаны көнөнә 3 тапҡыр сирек стаканлап эсергә. Был рәүешле 2 аҙна эшләргә, шунан 5 көнгә туҡталып тороп, тағы ҡабатларға.

### Шәкәр диабеты

❖ 2 ҡалаҡ киптерелгән йүкә сәскәлегенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 20 минут төнәтеп һөҙөргә. Көн дауамында сәй йәки ҡәһүә урынына эсергә. Дауаланыу хәл яҡшырғанға тиклем.

### Сөгөлдөр

❖ Сөгөлдөр һутына яртылаш бал ҡушырға һәм көнөнә 7 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Был юғары ҡан баҫымынан яҡшы дауа.

❖ Лимфатик биҙҙәр туберкулезынан ярты стакан сөгөлдөр һутына 1 балғалаҡ бал ҡушып иртәнсәк ас ҡарынға эсергә.

### Кишер

❖ Миокард инфаркты булғас та көнөнә 2 тапҡыр яртышар стакан яңы әҙерләнгән кишер һутына 1 балғалаҡ үҫемлек майы ҡушып эсергә. Бер аҙҙан сәй урынына ҡуйы итмәй генә энәлек (боярышник) емеше төнәтмәһе эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✔ *Дәрестәрҙә заманса ҡорамалдар, интернет, төрлө платформалар ҡулланып эшләүгә бирелеп китеп, ҡайһы ваҡыт йәнле аралашыуға, балаларҙың телмәрен үҫтереүгә ваҡыт ҡалмай.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

### Мәрйен

Башҡорт ҡатын ҡыҙҙарының биҙәүестәрендә киң ҡулланылған материалдарҙың береһе - мәрйен (был һүҙ килеп сығышы йәһәтенән грек теленә барып тоташа). Мәрйен - диңгеҙҙәге полиптарҙың ҡалдыҡтарынан торған төрлө төҫтәге таш. Тап шуларҙы палеолит осоронда уҡ махсус рәүештә эшкәртеп биҙәүес булараҡ ҡулланғандар. Күп кенә халыҡтар ышаныуынса, ул афәттәрҙән, күҙ тейеүҙән һаҡлау һәләтенә эйә. Мәҫәлән, боронғо гректар алһыу төҫтәге мәрйенде күҙ тейеүҙән, ағыуланыуҙан һаҡлауына ышанған. Һиндостанда биш мең йыл элек үк мәрйендең дауалау өсөн файҙаланылыуы асыҡлана. Мәрйендәрҙең төрлө тарафтарҙа табылғанлығы билдәле булһа ла, иң яҡшыларын Урта диңгеҙгә ҡайтарып ҡалдыралар. Тап шул яҡтарҙан сауҙа юлы менән беҙҙең тарафтарға үтеп ингән дә инде улар. Үрҙә билдәләнеүенсә, Светлана Николаевна Шитова башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүестәрендә мәрйендең ҡулланыла башлауын урта быуаттарға, йәғни Көнсығыш илдәре менән сауҙа бәйләнештәре көсәйгән ваҡытҡа ҡайтарып ҡала. Башҡорттар шулай уҡ электән мәрйендең сихри көскә эйә булыуына ышанған һәм шуға күрә лә ул кейемдә, айырыуса биҙәүестәрҙә киң ҡулланылыш таба. Туй йолаһының бер өлөшө булып торған "Ҡарта ашы"на килгән ҡунаҡтар һаҡал, ҡашмау яһау өсөн көмөш тәңкәләр менән бергә шулай уҡ мәрйендәр ҙә алып килер булған. Халыҡ йырында әйтелеүенсә:

*Ай яҡтыһы бик яҡты*
*Ултырып мәрйен теҙергә.*
Һуңынан ҡыҙ әсәһенә өндәшеп сеңләгәндә:
*Селтәрҙәрем минең сей мәрйен,*
*Килешмәгән ерен һүтәйек.*
*Миңә тигән кейәү үҙе килер,*
*Бер-ике йыл, әсәй, көтәйек.* - тип тә әйтер булған.



Селтәр, яға һәм һаҡалдарҙың сағыу бер өлөшө булып торған "селтәр" тап мәрйендәрҙән теҙелә лә инде. Биҙәүестәргә селтәр теҙеү традицияһының сағылышын этнограф И.Г. Георгиҙың 1799 йылғы хеҙмәтендәге башҡорт ҡатын-ҡыҙы ҡиәфәтенән үк күрәбеҙ.

Автор мәрйендән һәм ҡабырсаҡтан теҙелгән арҡаны һәм күкрәкте ҡаплап торған биҙәүесте "дюлбега", тип атай. Һүрәттән күренеүенсә, мәрйендәр ромб формаһында теҙелгән. Хәҙерге көнгәсә килеп еткән селтәр, яға, һаҡалдарҙағы "селтәр" ҙә нигеҙҙә тап "ромб" рәүешендә. Әйтергә кәрәк, "ромб" донъялағы күп кенә халыҡтарҙың традицияһында сағылыш тапҡан. Был фигураның тарихы палеолит осорона уҡ барып тоташа. Ғалимдарҙың фекеренсә, ромб - ҡатын-ҡыҙ башланғысының символы. Шулай итеп, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары тағып йөрөгән биҙәнеү әйберҙәрендә мәрйендәрҙе ромб формаһында теҙеү - быуаттар аша килеп еткән традиция.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# БЕЛЕМ БИРЕҮ ҺӘМ ТӘРБИӘ.

## Улар хәҙер йәнәш барасаҡ!



*"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2023" конкурсы лауреаттары һәм еңеүсеһе.*

**(Башы 1-се биттә).**

Улар араһында баш ҡалабыҙ кимәлендә үткәрелгән конкурста юғары уңышҡа өлгәшкән педагогтарыбыҙ ҙа булды һәм бағланған өмөттәрҙе аҡланылар: "Башҡортостандың баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2023" конкурсы еңеүселәре 114-се Айырым предметтарҙы тәрәнәйтеп өйрәнеүсе белем биреү үҙәгенән Яҙгөл Сирбаева менән 2-се "Смарт" Республика полилингваль күп профилле гимназиянан Юлиә Әбүбәкирова төбәк-ара конкурс лауреаттары тип танылды, ә 9-сы мәктәптән йәш педагог Ильяс Сағынбәк "Педагогик перспектива" номинацияһында билдәләнде. Шулай уҡ Йылайыр районы Йомағужа урта мәктәбенән Зөлфирә Таһирова, Благовещен ҡалаһының 5-се мәктәбенән Зифа Байморатова ла лайыҡлы рәүештә лауреаттар рәтенә инде.

Абсолют еңеүсе титулын Нефтекама ҡалаһының Башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы Гүзәл Ғайсина яуланы. Егерме йыллыҡ хеҙмәт стажы булған тәжрибәле уҡытыусы һөнәри бәйгелә икенсе тапҡыр ҡатнаша һәм ун йыл арауыҡ эсендә һынауҙарҙың үҙгәрештәр кисереүе, ярыш һаман да юғары кимәлдә ойошторолоуы, тулҡынландырғыс һәм урыны менән ҡатмарлы булыуын билдәләне.

- Быйылғы конкурсты үткәндән һуң 2013 йылда тәжрибәм әҙерәк булыуын аңланым. Шулай ҙа мин ул ваҡытта ла финалға үтеп, "Юғары педагогик оҫталыҡ" номинацияһында билдәләнгәйнем. Был юлы минең өсөн "Дәрес" һәм "Тәрбиәүи сара" һынауҙары иң еңеле булып тойолдо, сөнки уларҙа уҡыусылар менән эшләйһең, баһалама ағзаларына иғтибар итмәйһең. Ә бына улар алдында сығыш яһауҙы күҙаллаған һынауҙарҙа үҙемде имтихан тотҡан кеүек хис иттем. Конкурс тураһында әйткәндә, коллегалар менән тәжрибә уртаҡлашыу йәһәтенән бигерәк тә әһәмиәтле булды. Мин эшемдә ҡайһы йүнәлештәргә күберәк һәм аҙыраҡ иғтибар бүлеү кәрәклеген самаланым. Сөнки заман үҙгәргән һайын яңы технологиялар ҙа күбәйә, йәшерәк хеҙмәттәштәр нәҡ шуның менән йыш файҙалана икән. Дәрестәрҙә заманса ҡорамалдар, интернет, төрлө платформалар ҡулланып эшләүгә бирелеп китеп, ҡайһы ваҡыт йәнле аралашыуға, балаларҙың телмәрен үҫтереүгә ваҡыт ҡалмай.

**Мин үҙем уҡыусылар менән күберәк һөйләшеүгә, фекер алышыуға өҫтөнлөк бирәм. Юғиһә, улар былай ҙа тормошта атай-әсәйҙәре менән дә, үҙ-ара ла һирәк аралаша, бергә йыйылып ултырған саҡтарында ла һәр кеме үҙ донъяһына - телефонына сума. Шуға һүҙ байлыҡтары кәмей, фекерҙәрен дөрөҫ әйтә белеү оҫталыҡтары етмәй. Бигерәк тә үҫмерҙәр ниндәйҙер үҙҙәре аңлаған ғына телдә һөйләшә. Башҡортса ғына түгел, русса ла матур итеп һөйләй белгәндәр һирәгәйә. Йәш атай-әсәйҙәрҙең дә туған телгә ҡарашына бәйлелер был күренеш. Шуға башҡорт теле дәрестәрендә аралашыу күберәк булырға тейеш, тигән фекерҙәмен", - ти Гүзәл Сәғит ҡыҙы.**

Шулай уҡ педагог үҙе эшләгән Нефтекама Башҡорт гимназияһында балаларға туған һәм дәүләт башҡорт теле дәрестәрен уҡытыу, башҡорт мөхитенә йәлеп итеү йәһәтенән тупланған тәжрибәһе менән дә уртаҡлашты. Хәҙер ул сентябрҙә Ҡарасай-Черкес республикаһында үтәсәк "Иң яҡшы туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы" Бөтә Рәсәй һөнәри конкурсында Башҡортостан намыҫын яҡлауға әҙерләнәсәк.

Ә инде "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы - 2023" конкурсында Өфө ҡалаһы Ә.Ш. Фәйзуллин исемендәге 39-сы гимназияһының математика уҡытыусыһы Артем Баянов абсолют еңеүсе булды. Ул конкурста ҡатнашҡан 150 коллегаһын һөнәри оҫталыҡта уҙып китте. Педагог уҡыусыларҙа тәнҡитле фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә өҫтөнлөклө иғтибар бүлеү кәрәк, тип иҫәпләй һәм конкурс барышында тап шул йәһәттән тәжрибә уртаҡлашҡан. Әйткәндәй, Артем Рауил улы көҙ көнө Мәскәү өлкәһендә ойошторолаcаҡ "Йыл уҡытыусыһы" Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашасаҡ.

Һөнәри ярыштар барышында шулай уҡ республиканың иң яҡшы рус теле уҡытыусыһы тип Өфөнөң 45-се мәктәбенән Эмиль Сәғитов, татар теле уҡытыусылары араһында Бүздәк районы Ҡаран ауылы мәктәбенән Зөлфиә Мансурова, "Йәш йыл уҡытыусыһы" тип Дыуан ауылының Советтар Союзы Геройы Михалев исемендәге мәктәбенең тарих уҡытыусыһы Валерий Швалев танылды. Ә бына быйыл беренсе тапҡыр республика кимәлендә ойошторолған "Дистанцион белем биреү уҡытыусыһы" конкурсында 44 педагог араһынан Баҡалының һаулыҡ мөмкинлектәре сикле уҡыусылар өсөн коррекцион мәктәп-интернаты башланғыс кластар уҡытыусыһы Сажиҙә Залилова еңде.

Барлыҡ конкурсанттарҙы тәбрикләп, БР мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин уҡытыусыларҙың ил өҫтөнә ябырылған һынауҙарҙы лайыҡлы үтеүҙәре, эшмәкәрлектәренең баһалап бөткөһөҙ булыуын телгә алды: "Коронавирус ваҡытында тиҙ арала дистанцияла уҡытыуға күсеп, миллионлаған онлайн дәрестәр әҙерләнегеҙ. Хәҙер һеҙҙең индәргә тағы бер еңел булмаған бурыс - үҫеп килгән быуынға патриотик тәрбиә биреү, граждандар итеп үҫтереү һалына. Был Педагог һәм остаз йылы үҫешкә илткән этәргес бирәсәк йыл булыр, тип ышанам", - тине сығышында министр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостан уҡытыусыларын тәбрикләп, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев үткән быуаттың 90-сы йылдары эҙһеҙ үтмәүен, күп яралар ҡалдырыуын һәм шуларҙың береһе - белем биреү һәм тәрбиә эштәренең айырып ҡаралыуын телгә алды. Тиҙҙән патриотик тәрбиә биреүгә ҡағылышлы яңы закон ҡабул ителәсәген әйтте. Уның телмәренән һуң зал көслө алҡыштарға күмелде. Сөнки өс тиҫтә йыл тирәһе үткәрелгән ошо конкурстарҙа Башҡортостан уҡытыусылары даими рәүештә был мәсьәләне күтәрә килде, улар һәр ваҡыт уҡытыу системаһында тәрбиәгә ҙур урын бүленергә тейеш, тигән ҡараштa булды. Ошо һынылышлы осорҙа ла беҙҙең педагогтар һынатмаҫ, ҙур уңыштарға өлгәшеп, баһалап бөткөһөҙ мөһим эшмәкәрлектәрен дауам итер, моғайын. Тик уларға иғтибар һәм ихтирам айырым тантаналы сараларҙа, исемле йылдарҙа ғына түгел, ә көндәлек тормошта булһын, коллектив араларҙа йәшәһен.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*✓ Ағиҙел йылғаһы бассейнында бер нисә тиҫтә ананьин ҡәлғә-ҡаласыҡтары араһында йылға тамағында төҙөлгән, биш ур һәм оҙон соҡор менән ҡурсаланған Торатау ҡаласығы (Краснокама районы) барыһынан да яҡшыраҡ өйрәнелгән.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы

Урманда йәшәү шарттары ананьин ҡәбиләләренең йәшәү рәүешенә һәм мәҙәниәтенә көслө йоғонто яһаған. Мәҫәлән, күскенсе дала кешеләренән айырмалы, уларҙың күл һәм йылға ярҙарында даими йәшәй торған торлаҡтары булған. Ҡомартҡыларының иң оригиналь булғандарынан йырындар һәм йылға үҙәндәре бөгөлдәре араһындағы тар морондарҙа төҙөлгән ҡәлғә-ҡаласыҡтарҙы атарға була. Ҡағиҙә булараҡ, бындай морондарҙың вертикаль битләүе була, кәрәк булғанда битләүҙәр, дошмандар ҡәлғәгә үтеп инә алмаһын өсөн, махсус рәүештә 4-6 метрға тиклем йә иһә унан да бейегерәк итеп ҡаҙылып-ҡырҡып алынған. Ялан яғынан ҡәлғә бер йә иһә ике-өс бейек ур менән ҡурсаланған, бының өсөн киң һәм тәрән оҙон соҡорҙар ҡаҙылған. Ур емерелмәһен өсөн уның нигеҙе ситән йә иһә ағас бура менән нығытылған. Ур өҫтөнә тағы ла бейек ҡойма рәте ҡоролған. Әлеге ваҡытта Ағиҙел йылғаһы бассейнында ошондай бер нисә тиҫтә ананьин ҡәлғә-ҡаласыҡтары булыуы асыҡланды, әммә улар араһында йылға тамағында төҙөлгән, биш ур һәм оҙон соҡор менән ҡурсаланған Торатау ҡаласығы (Краснокама районы) барыһынан да яҡшыраҡ өйрәнелгән. Унда майҙандары уртаса 30-40 кв.м булған дүрт мөйөшлө 7 торлаҡ - ярым ер өй ҡаҙып асылған. Күрәһең, улар бер йә иһә ике яҡлы ҡыйығы булған ағас бураларҙан һалынған. Улар иҙәндә яғылған усаҡтар менән йылытылған. Ошондай монументаль ҡаласыҡтарҙың харабалары Ағиҙел йылғаһының барса яр буйҙарында табылған. Улар араһында бигерәк тә ҙур күләмле булыуҙары менән Петртау тауындағы (Дүртөйлө районы), Бөрө, Костарев (Бөрө районы), Өфө (Чертово), III Өфө (Өфө ҡалаһы территорияһында), Шипово, Охлебинино (Иглин районы) һәм башҡа ҡаласыҡтар айырылып тора. Уларҙың ҡәлғәне дошмандарҙан ҡурсалаусы бейек ер урҙары һәм тәрән соҡорҙары әлегә тиклем асыҡ күренеп тора. Ананьин ҡәбиләрендә ағас буранан ер өҫтөнә өй һала белеүҙең киң билдәле булыуы хаҡында археологтарҙың нигеҙле фекере бар. Ҡаласыҡтарҙы һәм торлаҡтарҙы ҡаҙып асҡанда бар урындарҙа ла йорт һәм ҡырағай хайуандарҙың һөйәктәре табыла. Уларҙы тикшереү ҡәбиләләр хужалыҡтарында ултыраҡ тормошта йәшәгән халыҡтар өсөн ғәҙәти булған барса йорт хайуандары: һыйыр, ат, ваҡ мөгөҙлө малдар һәм сусҡа үрсетелеүен күрһәтә. Ашлыҡ тартыу өсөн ҡулланылған таш ҡул тирмәндәре, уны һаҡлау өсөн ҡаҙылған күп һанлы соҡорҙар халыҡтың игенселек менән шөғөлләнеүенә дәлил булып тора.

Ағиҙел йылғаһының Стәрлетамаҡтан Өфө ҡалаһына тиклемге ағышында ананьин ҡәбиләләренең урынлашыуының бер үҙенсәлеге күҙгә бәрелеп тора. Бында ананьинсыларҙың иң көньяҡ төркөмө йәшәгән, әммә улар уң яҡ яр буйҙарын, йәғни, урманлыраҡ булған тау алды зонаһын биләй. Күсмә малсылыҡ өсөн уңайлыраҡ булған иркен һул яр буйы дах-массагет ҡәбиләләренеке була, быны ананьин ҡаласыҡтары менән бер үк ваҡытта барлыҡҡа килгән ҡурғандар раҫлап тора.

Ананьин ҡәбиләләре мәҙәниәтенең этнографик үҙенсәлектәре балсыҡ һауыт-һабаның формаларында һәм орнаменттарында бигерәк тә яҡшы сағыла. Улар ваҡ итеп онталған ҡабырсаҡ ҡушылған балсыҡты ҡул менән иҙепәүәләп яһалған. Һауыттар тәпәш, киң муйынлы, түңәрәк төплө: муйынының ҡырыйы буйлап улар нәҙек бау эҙе һәм түңәрәк уймаҡтар менән биҙәлгән.





*16-сы һүрәт. Ананьин мәҙәниәте ҡомартҡылары материалдарынан: 1,2 - втулкалы балталар; 3-6 - уҡ башаҡтары; 7 - һөңгө баштары*



*17-се һүрәт. Ананьин мәҙәниәте ҡомартҡылары материалдарынан: 1-5 - пластинкалы биҙәүестәр; 6 - беләҙек; 7 - быяла мәрйен бөртөгө; 8,9 - балсыҡ һауыт-һаба*

Ананьин ҡаласыҡтарындағы ҡаҙыныу эштәре уларҙа табылған материалдар араһында формаһы буйынса дах-массагеттарҙыҡынан бер ниндәй ҙә айырмаһы булмаған балсыҡ һауыт-һаба ярсыҡтарының күп булыуын күрһәтте. Быны ваҡыты-ваҡыты менән, яҙғы-йәйге сезонға (йәйләүгә) далаларҙан Урал тауҙары итәктәренә килеп йөрөүсе дах-массагеттар менән ананьин ҡәбиләләренең даими аралашып йәшәүенең бәхәсһеҙ дәлиле итеп ҡарау фарыз. Әммә малсыларҙың ниндәйҙер бер өлөшө урындағы мөхит йоғонтоһонда аҡрынлап ошонда тороп ҡала башлай, быға ананьин ҡәбиләләре тирәләй оҙайлы ваҡыт арауығында күп һанлы ҡурған ҡәберлектәренең ҡулланылышта булыуы дәлил. Ошондай үҙ-ара аралашыу, б.э. тиклем V-IV быуаттар сигенән башлап, урындағы ултыраҡ тормошта йәшәгән халыҡ мәҙәниәтендә уны Кама буйындағы ананьин ҡәбиләләренең төп массаһы мәҙәниәтенән айырып торған күп кенә яңы элементтар хасил булыуына алып килә.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1861 йылдың март-апрель айҙары -** халыҡҡа крепостнойлыҡты бөтөрөү тураһында иғлан ителә.

➔ **1861 - 1918 йылдар -** башҡорт шағиры һәм тарихсыһы Ғәрифулла Кейековтың ғүмер йылдары.

➔ **1861 йылдың май-июнь айҙары -** Белорет, Тирлән, Ҡатау һәм Ырымбур губернаһының башҡа заводтарында эш хаҡын күтәреү һәм ял, байрам көндәрендә эшләүҙе ғәмәлдән сығарыу талабы менән забастовкалар үткәрелә.

➔ **1861 йыл -** "Ҡаҙан университетының ғилми хеҙмәттәре" йыйынтығында Мирсәлих Биксуриндың башҡорт телендә "Өс ул" тигән хикәйәһе баҫыла.

➔ **1862 -** Ырымбур, Орск һәм Соль-Илецк ҡалалары хәрби ведомствонан граждандыҡ тәртибенә күсерелә.

➔ **1862 -** Бөйөк рус яҙыусыһы Лев Толстой Һамар губернаһына, Кәрәлек йылғаһы буйында йәшәүсе башҡорттарға ҡымыҙ эсергә килә. 1862- 1883 йылдар эсендә ул башҡорттар янына ун тапҡыр була.

➔ **1862 - 1942 йылдар -** билдәле рәссам М.В. Нестеровтың ғүмер йылдары. 1913 йылда ул үҙенең тыуған ҡалаһы Өфөгә картиналарын бүләк итә, һәм шул нигеҙҙә 1919 йылда Өфөлә пролетар художество музейы (әлеге М.В. Нестеров исемендәге художество музейы) асыла.

➔ **1862 йылдың 11 июле -** "Ырымбур ҡәлғәһен бөтөрөү тураһында" указ сыға (ҡәлғә нығытмалары һәм ҡапҡалар юҡҡа сығарыла).

➔ **1862 - 1863 йылдар -** Урал губерналарында 49 тапҡыр крәҫтиәндәр болаһы була, тау заводтары эшселәре 55 тапҡыр баш күтәрә.

➔ **1864 йыл 1 ғинуар -** губерна һәм өйәҙ земстволары ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителә.

➔ **1864 йыл -** башҡорттар һәм улар еренә килеп ултырған ерһеҙ килмешәктәр (припущенниктар) хаҡында ҡарар ҡабул ителә. Башҡорт һәм мишәр ғәскәрҙәре таратыла. Башҡорт ерҙәрен бүлеү һәм килмешәктәр мәсьәләһе буйынса Ырымбур комиссияһы бөтөрөлә, уның бурыстары крәҫтиәндәр эштәре буйынса губерна ойошмаһына йөкмәтелә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

148-се гвардия артиллерия-миномет полкы командиры бойороғо менән 1943 йылдың 10 октябрендә "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнәләр: гв. рядовойы Ғәйнетдинов Ғабдрахман Ғәйнетдин улы - боеприпастар взводы автомашинаһы водителе (Балтас районы, Һәйтәк ауылынан); гв. рядовойы, 4-се батареяның өлкән телефонисы Ирназаров Ниғмәт Ғиләж улы (Баймаҡ районы, Темәс ауылынан); гв. рядовойы Кондратьева Нина Степановна, батарея штабы телефонискаһы (Куйбышев ҡалаһынан); гв. старшинаһы, 5-се батарея санинструкторы Кадикова Леля Борисовна (Өфө ҡалаһынан); гв. рядовойы Сәмситов Талип Зыя улы, батарея штабының өлкән разведчигы (Балаҡатай районы, Кәркәй ауылынан); гв. рядовойы Ҡунафин Ғариф Хафиз улы - 3-сө батареяның орудие расчеты номеры (Стәрлебаш районы, Айтуған ауылынан).

Дивизияның тарихи формулярында күрһәтелгәнсә, Чернигов өлкәһендә һәм Днепрҙа барған алыштар ваҡытында ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләнгән рядовой, сержант һәм офицерҙар составынан: Ҡыҙыл Байраҡ орденына - 22 кеше, Александр Невский орденына - 8 кеше, I дәрәжәләге Ватан һуғышы орденына - 38 кеше, 2 дәрәжәләгеһенә - 7 кеше, Ҡыҙыл Йондоҙ орденына - 344 кеше, "Батырлыҡ өсөн"миҙалына - 569 кеше, "Боевой хеҙмәттәре өсөн" миҙалына - 420 кеше, барлығы 1408 кеше лайыҡ була.

Днепрҙағы алыштар барышында, 25 сентябрҙән 30 сентябргә тиклем, 7-се гв. кавкорпусы частары дошманды ҙур юғалтыуҙарға дусар итә: уның 2 меңләп һалдаттары һәм офицерҙары үлтерелә һәм яралана, 12 танкыһы, 4 штурм орудиеһы сафтан сығарыла, 8 артиллерия һәм миномет батареяларының уты баҫтырыла, 15 орудиеһы емертелә. Әлбиттә, Днепрҙың уң яҡ ярында немецтар бик ҡеүәтле оборона системаһын төҙөгән була, шуға күрә 7-се гв. кавкорпусы ла юғалтыуҙар кисерә, әммә ул фронт кимәлендәге стратегик бурысын теүәл үтәй, дүрт тәүлек арауығында Днепр аша сығып, яуланған плацдармды киңәйтеү маҡсатында дошмандың фронт һыҙығына яңы ғына килеп еткән 20-се армия корпусына ҡаршы ҡан ҡойошло һөжүм алып бара.

Корпустың киң һәм тәрән йылға аша сығыу өсөн махсус ҡоролмалары булмай, армия резервынан понтондар бик һуңлап килтерелә. Шулай ҙа беҙҙең 61-се армия һәм 7-се гв. кавкорпусы частары плацдармда немец оборонаһын емереп, Речица ҡалаһы йүнәлешендә хәрәкәт итергә ниәтләй. Шул уҡ ваҡытта оборона тотоусы немец ғәскәрҙәренә ярҙам килеп өлгөрә - дошман үҙ резервынан тере көстәрен, техникаһын, танк частарын килтерә. Беҙҙең ғәскәрҙәргә һөжүмде дауам итеүҙе кисектереп торорға тура килә.

1943 йылдың октябрь баштарында 7-се кавкорпус армия резервына сығарыла. 2 октябрҙә 16-сы гв. атлы дивизияһы үҙе биләгән оборона һыҙығын 181-се уҡсы дивизияһына тапшыра, корпус частары Днепрҙың һул яғына сығып туплана. 16-сы атлы дивизия Пакуль ауылы янындағы урманда урынлаша.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Бала ун йәшкә тиклем туған телендә яҡшы һөйләшһә, артабан тел онотолмай. "Беҙҙең тел - хазина, белгән нәмәне онотмағыҙ. Утыҙҙан ашыу төрки теле бар, ҡайҙа ғына барһағыҙ ҙа, һеҙ унда үҙ кеше булаһығыҙ.*

# АТАЙЫМ МЕНӘН ӘСӘЙЕМДЕҢ

## ауылдаштарым араһында

**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, күренекле прозаик Гөлсирә ҒАЙСАРОВА-ҒИЗЗӘТУЛЛИНАның тормошсан, тәрән психологизмға ҡоролған ижадын күптәр үҙ итә. Былтыр әҙибә үҙенең тағы ла бер түңәрәк юбилей датаһын билдәләне, һәм ул уҡыусыларын әленән-әле яңы әҫәрҙәре менән ҡыуандырып тора. Әҙәм балаһының рухи донъяһын оҫта сағылдырған Гөлсирә Мирза ҡыҙы менән тормош, ысынбарлыҡ, ижад тураһында әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**Яҙыусының һәр даим уңыш-ҡаҙаныштарға өлгәшеүе тәбиғи. Гөлсирә, был турала һүҙ барғанда һеҙ үҙегеҙҙең телгә алырлыҡ уңышығыҙ тип нимәне атар инегеҙ?**

- Ҡырҡ йәшемдән һуң ике телде: боронғо йәһүд һәм инглиз телдәрен өйрәнеүемде иң ҙур ҡаҙанышым тип һанайым. Уңыштың сере, әлбиттә, яратҡан эшең менән шөғөлләнеү. Йәһүд телен өйрәнгәнемдә хәтерләйем: китап нәшриәтендә эшләйем, йыш ҡына эшемде өйгә алып ҡайтырға тура килә. Балалар бәләкәй, иренә лә иғтибар кәрәк. Эшемде бөтөп, барыһы ла йоҡлап киткәнсе төнгө ун икеләр етә. Шунда күңелде йылытып торған ниндәйҙер бер "тәмле" нәмә барлығын иҫемә төшөрөп, "Ниндәй ҡыуанысым бар һуң әле?" тип барлағанда: "Ә, йәһүд теленән контроль эш ебәргәйнеләр бит әле", - тип һөйөнгәнем хәтеремдә.

Тыуған ауылым Иҙәштә пекарня асып, дүрт йыл буйы ауырыуға һабышыу сигенә етеп ыҙаланғандан һуң, ябырға мәжбүр булыуымды еңелеүем тип һанайым. Хәйер, был еңелеү минең өсөн иң ҙур ҡаҙаныштарыма ҡарағанда ла күберәк нәмә аңлатты. Тормошомда ошо еңелеүҙең булғанына ҡыуанып бөтә алмайым. Ә бизнесҡа килгәндә, ул, нисек кенә булмаһын, аҡса эшләүгә ҡайтып ҡала, сөнки аҡса эшләй алмайһың икән, ябылаһың. Беҙҙең икебеҙ өсөн дә, улым Ренатҡа ла, миңә лә аҡса ул тиклем тәүлек әйләнәһенә уйларға кәрәк булған мөһим нәмә булмай сыҡты. Беҙҙең өсөн эш-аҡса - ләззәт түгел, ә эш-ләззәт - аҡса.

**Байтаҡ йылдар инде Иҙәштә мал-тыуар тотоп, боронғо йолаларға тоғролоҡ һаҡлап донъя көтәһегеҙ. Ниндәй ризыҡтарҙы үҙ итәһегеҙ?**

- Үҙебеҙҙең милли ризыҡтарҙы. Диңгеҙ йәнлектәренән әҙерләнгән аш-һыуҙы, япон һәм ҡытай кухняһын яратмайым. Донъя буйлап күп йөрөлдө, Санкт-Петербург, Мәскәү, Амстердам, Бонн, Дюссельдорф, Париждарҙа ресторан-кафеларҙа тамаҡландым. Хатта Швейцария, Америка миллионерҙары менән табындаш булырға насип итте. Әсәйемдән дә тәмлерәк бешергән кеше юҡлығына инандым. Әсәйем булғанға түгел, ул ысынлап та ныҡ оҫта ине. Уның тоҙлаған йәшелсәләрен ауыҙ иткәндәр 30-40 йылдан һуң да һағынып һөйләй. Аш-һыу тигәндән: күптән түгел АҠШ-тан ҡыҙым Ләйләнең дуҫының атаһы менән әсәһе килеп китте. Бик бай, шул уҡ ваҡытта ифрат ябай кешеләр (Һүҙ ыңғайында: атайым менән әсәйем ябайлыҡты кешенең аҡыл күрһәткесе һымаҡ баһалай ине). Килеүҙәренә аш һалдыҡ. Шул тиклем яратып, ҡат-ҡат өҫтәтеп ашанылар. Шунан: "Ниндәй тәмле һурпа, беҙҙең улай килеп сыҡмай", - тиҙәр. Ҡыҙым: "Улай тәмле булһын өсөн кәмендә өс төрлө ит һалырға кәрәк шул. Хатта был ғына ла түгел: ул кәзәне, бройлерҙы, ҡаҙҙы үҙең тәрбиәләп үҫтерергә тейешһең", - тип әйтеп ҡуйҙы.

**Бер нисә йыл элек шуға иғтибар иткәйнем: ейәнсәреңдең, ейәнеңдең һеҙҙе ихтирам итеүҙәре уларҙың һеҙҙең менән башҡорт телендә һөйләшеүендә сағыла ине. Ваҡыт үтеү менән ошо мөнәсәбәт үҙгәрмәнеме?**

- Ейәнем, ейәнсәрем - икеһе лә Өфөлә, минең территорияла тыуҙылар. Беҙ электән - башҡортса һөйләшкән ғаилә. Кейәүебеҙ рус телле ине, ул да бер ай эсендә башҡортса өйрәнеп алды. Камилә рус телен мультиктар аша өйрәнде, тиергә була. Артабан Дорогино ауылында үҙҙәренең өйөнә күсеп сыҡтылар, Камилә мәктәпкә бармағайны әле. Атаһы менән әсәһенең русса һөйләшкәнен ишеткән дә: "Был нимә, өләсәйемде ихтирам итмәүме? Нишләп башҡортса һөйләшмәйһегеҙ?" - тигән. Өләсәләрен дә, башҡаларҙы ла ихтирам итәләр, шөкөр. Камилә лә, Данияр ҙа таҙа әҙәби телдә һөйләшәләр. Әле йәшәгән мөхиттәре күберәк русса аралашыу булғас, телгә бәйле ҡайһы бер ҡатмарлыҡтар ҙа килеп сыға, әлбиттә. Йәй көнө ҡайтып, ике ай ауылда булалар. Был ярҙам итә. Былтыр "Һаумы, әкиәт!" конкурсында ҡатнашып, Данияр - беренсе, Камилә икенсе урын алды. Икеһе лә - башҡорт теле уҡытыусыһының терәге.

Ғалимдар әйтеүенсә, бала ун йәшкә тиклем туған телендә яҡшы һөйләшһә, артабан тел онотолмай. "Беҙҙең тел - хазина, белгән нәмәне онотмағыҙ. Утыҙҙан ашыу төрки теле бар, ҡайҙа ғына барһағыҙ ҙа, һеҙ унда үҙ кеше булаһығыҙ. Ер шарында төркиҙәр күп, улар һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер", - тип әйтәм. Минең дә ярҙам итеп ебәргән мәлдәрем булды. Санкт-Петербург аэропортында тикшереү аша үткәндә, күрәм, бер үзбәк ҡатынын эскә индермәйҙәр. Сөнки ул күп итеп төрлө шампунь алған, ул тиклем шыйыҡсаны самолет эсенә алырға ярамай. Таможенник әйтеп ҡарай, теге ҡатын бер нәмә лә аңламай. Мин үҙебеҙсә өндәшеп, теге ҡатынға хәлде аңлаттым. Поста торған урыҫ егете ҡыуанысынан хатта көлөп ебәрҙе.

Күп тел белеүҙең файҙаһы ҙур. Ә беҙҙең башҡорт теле шул мөмкинлекте бирә. Артикуляцион аппаратыбыҙ ни тиклем һәйбәт ҡулайлаштырылған, беҙҙең башҡорт теле бөтөн ауыҙ ҡыуышлығында йөрөй. Татар теле теш алдында әйтелә: "талларда сайрый сандугач..." Башҡорт нисек әйтә: "Ай, Уралым, Уралым!" Тел көмбәҙҙә тора. Эйе, һәр телдең үҙ урыны бар. Мәҫәлән, аңҡауҙың иң төпкө урынына тел тейһә, ул инглиз теленең урыны, саҡ ҡына артҡараҡ китһә, француздыҡы. Ә беҙҙең тотош ауыҙ ҡыуышлығының мөмкинлеген файҙаланған башҡорт телен өйрәнгән саҡта был сит халыҡтарға ауырлыҡ та тыуҙыралыр. Ә беҙҙең балалар туған тел менән формалашһа, улар бөтә телдәрҙә лә акцентһыҙ һөйләшә ала. Хәтер менән беҙҙең артикуляцион аппарат туранан-тура тоташҡан. Тимәк, үҙебеҙгә бирелгән хазина менән файҙаланырға ла файҙаланырға! Балаларға ла шуны аңлатырға кәрәк. Американан килгән бер иптәшебеҙгә "Эмми" тип өндәшәбеҙ. Шунан мин: "Инглизса исемегеҙ нисек яңғырай?" - тип һорайым. "Әми," тип яуап бирҙе. Беҙҙә булған өн, беҙ иһә ҡатмарлаштырып, урыҫ теле аша әйтеп бер булабыҙ.

Беҙҙә кәмһенеү комплексы көслө әле. Үҙемдең телемде, милләтемде инҡар итһәм, мин шәп кеше булам, тигәндәр ҙә бар. Бөтә нәмә комплексҡа бәйле. Элек журналист булып эшләгән саҡта интервью алырға йөрөй торғайным. Академик, профессор, оло кеше булғас, өйөнә барам. Матур итеп интервью бирә. Балаһы килеп инһә, үҙгәреп китә, үҙен түбәнерәк итеп ҡуя. "Ул ҡала балаһы, минән шәберәк",- тигән мөнәсәбәт һиҙелә. Бала быны һүҙһеҙ ҙә тойомлай. Шуға иғтибар иткәнем бар, ҡатнаш ғаиләләрҙә кем көслөрәк, бала шул милләтте һайлай. Башҡорт атай йүнһеҙ икән, бала әсәһе яғын ала.

**Тимәк, һиҙемләү-тойомлау бәғзеләрҙе һүҙһеҙ генә ниндәйҙер аҙым яһарға этәрә...**

- Тойомлау, һиҙемләү малтыуарҙа, ҡош-ҡортта ла бар бит ул. Улар һүҙҙе аңламай, ә хужаһының нимә теләгәнен күҙҙән ҡарап белеп торалар. Минең кәзәләрем шулай. Хатта өйрәк бәпкәләре лә. Был үҙе бер мөғжизә. Башта улар менән аңлашыуы ауыр булды. Сөнки кәзә алһам да, башта уларға ҡурҡыбыраҡ ҡарай инем. Миңә күрше ауылдан ике туған апайым килде. Игелектең үҙе инде ул апайым, мал йәнле кеше. Кәзәләрем араһында торғанда береһен шапылдатып һөйә, икенсеһенә хәбәр һөйләй. Кәзәләр апайымды уратып торғандар, ситкә китмәйҙәр, ә миңә улай итмәйҙәр ине. Ни өсөн? Сөнки апайым малды ихлас ярата, ә мал быны шундуҡ аңлай. Минең ҡурҡҡанымды белгәс, мөнәсәбәттәре икенсе төрлө булды. Һин уларға ихлас булған һайын, улар ҙа үҙҙәренең бөтөн характерын аса, һиңә ышаныс белдерә. Бына шулай бөтәһенә лә әкренләп өйрәнергә тура килде.

Кәзәләрҙе һауырға кәрәк. Һарайға улар ингәндә ашарға һалам, шуға улар талаша-талаша инергә тырышалар. Минең бер нисә һөтлө кәзәм бар, уларға айырыуса икенсе мөнәсәбәт. Улар сиратҡа һуғышып инеп тормайҙар, ситтән генә ҡарап торалар. Уларға ҡарап ымлауым була, тып-тып итеп, иң алға килеп баҫалар. Мине ҡарашымдан уҡ аңлайҙар. Өйрәк бәпкәләре менән дә шул уҡ хәл. Береһе ауырыны, өйәнәге сыҡты, һыуға ебәрһәң генә рәтләнеп китә ине. Был бәпкәне ҡарап ҡына үҫтерҙек. Шул хәтлем ҡулға өйрәнде, беҙгә ышана. Бер көндө кис өйрәктәрҙе һарайға индерергә кәрәк ине, мин арығанмын, ә тегеләр инмәй ҙә ҡуялар. Һарайҙы әллә нисә ҡат уратып йөрөнөк, эскә инмәнеләр, тышта миңә ҡарап яталар. Теге өйрәк тә миңә ҡарап ятты, беҙ ҡараштыҡ, шунан ул торҙо ла һарайға инеп китте, уның артынса бөтөн төркөм дә һарайға йүнәлде. Ҡулда тиерлек ҡарап үҫтергән өйрәктең миңә булған ышанысы шул тиклем көслө, нимә теләгәнеңде күҙҙән уҡый.



*Күп тел белеүҙең файҙаһы ҙур. Ә беҙҙең башҡорт теле шул мөмкинлекте бирә. Артикуляцион аппаратыбыҙ ни тиклем һәйбәт ҡулайлаштырылған, беҙҙең башҡорт теле бөтөн ауыҙ ҡыуышлығында йөрөй. Татар теле теш алдында әйтелә: "талларда сайрый сандугач..." Башҡорт нисек әйтә: "Ай, Уралым, Уралым!" Тел көмбәҙҙә тора. Эйе, һәр телдең үҙ урыны бар. Мәҫәлән, аңҡауҙың иң төпкө урынына тел тейһә, ул инглиз теленең урыны, саҡ ҡына артҡараҡ китһә, француздыҡы. Ә беҙҙең тотош ауыҙ ҡыуышлығының мөмкинлеген файҙаланған башҡорт телен өйрәнгән саҡта был сит халыҡтарға ауырлыҡ та тыуҙыралыр.*

**Гөлсирә, һеҙ "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем" тигән хикәйәгеҙ менән "Ағиҙел" журналының лауреаты булдығыҙ. Был мауыҡтырғыс әҫәрҙең яҙылыу тарихын да белергә ине.**

- Хикәйәне мин һигеҙ йыл элек яҙа башлағайным. Нисек яҙыла башланы? Минең Сыуаштанда Ева Николаевна тигән бик яҡын әхирәтем бар. Өлкән йәштәге апай, уға хәҙер һикһән йәш. Әсәһенең бер ту-

✓ *Бәлки, был тәү ҡарашҡа матур образ ғына булып күренәләр. Тик атайым менән әсәйемдең вафатына өс тиҫтәнән ашыу йылдар уҙҙы, ә уларҙың ауылдаштарыма эшләгән яҡшылығы миңә бөгөн йәшәргә ярҙам итә.*



ған ҡустыһы хәбәрһеҙ юғала. Хәҙер эҙәрмәндәр төркөмдәре күп бит. Табып биргәндәр. Концлагерҙа булыу тураһында ҡағыҙ алалар. Ева Николаевна: "Интернеттан шул лагерь тураһында материал табып бирә алмаҫһыңмы, очерк яҙырға теләйем", - тине. Эҙләнеп, һикһән туғыҙ битлек материал ебәрҙем. Шул эҙләнгән мәлдә Удмуртиянан бер әбейҙең тарихына иғтибар иттем. Ул да 90-сы йылдарҙа атаһы тураһында шундай мәғлүмәт ала, Германияға барып күрмәксе була, ауылдаштары уға өс мең тирәһе аҡса йыйып бирә. Ул саҡта ауыр йылдар ине бит. Ҡайҙа йәйәү, ҡайҙа автобус менән, эләгепһағып, Мәскәүгә виза үҙәгенә килеп етә. Уны йәлләп, билет алып бирәләр. Шул әбейҙең фотоһы әле лә күҙ алдымда. Аҡ йөн нәскиҙә, ҡуйы ҡыҙыл төҫтәге йорт тәпешкәһендә, оҙон ҡара күлдәктә туғандар ҡәберлегендә эйелеп, һамаҡлап-һамаҡлап атаһына ниҙер һөйләй. Немецтар нисек уны ҡаршы алғандары, ҡайҙарҙа йөрөткәндәре, матур итеп поезға ултырҙып оҙатып ебәргәндәре - барыһы ла ентекләп яҙылған. Стенала "Ударница" тигән маҡтау ҡағыҙы эленгән. Ризыҡ биргән был әбейҙең күңелендә иман барлығын күрҙем", һ.б. Ошонда тағы ла бер нәмәне әйтер инем. Беҙ ҙә бит атайҙар быуынын атеистар, динһеҙҙәр булдылар, тип, аҙмы-күпме, ғәйепләгән һымаҡ та булабыҙ. Ләкин улар бит Аллаһы Тәғәлә ҡабул итерлек эштәрҙе эшләнеләр. Улар беҙҙе: "Кеше кешегә - дуҫ һәм туған" тип үҫтерҙеләр, донъяла тыныслыҡ булһын, тип көрәштеләр, шуның өсөн дә Советтар Союзының уңыштары күп булды. Беҙ шуны онотмаҫҡа тейешбеҙ. Миңә әле дөрөҫлөк етмәй. Шәхсән кимәлдә түгел, донъя кимәлендә.

Атайым йәне-тәне менән иленә бирелгән ысын коммунист ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, мин үҫмер саҡта уҡ беҙ икәүләшеп "Голос Америки", "Азатлыҡ" радиоларын тыңлай инек. Тыңлайбыҙ ҙа, һөйләшәбеҙ. Хәҙер аңлайым, ул мине үҙаллы фекер йөрөтөргә, дөрөҫтө ялғандан айырырға өйрәтергә теләгән. Хәтеремдә, "Америка тауышы"нан Солженицындың "Теленок бодал дуб" тигән әҫәрен тыңланыҡ. Бала ғына күңелем менән дә шул яҙыусының хыянатсыллығын, ялғанлағанын, намыҫы таҙа булмағанын тойоп екһенгәнем хәтеремдә. Әлеге заманда мәғлүмәт шул тиклем күп, хатта нимә дөрөҫ, нимә ялған икәнен белеүе мөмкин түгел дәрәжәһендә.

# ЯҠШЫЛЫҒЫ...

## йәшәргә ярҙам итә

Беҙ, бөгөнгөләр, доғалар ҡыла беләбеҙ, шул уҡ ваҡытта берберебеҙгә аяуһыҙлыҡ та күрһәтәбеҙ. Ә беҙ ниндәй сабыр, иманлы, тәүфиҡлы инәйҙәрҙе күреп үҫтек. Ауыл клубында илле йәшемде үткәргәндә залда ике рәт булып ошо матур әбейҙәр ултыралар ине. Ағайымдар рауза гөлләмәләре алып килгәйнеләр. Шул затлы сәскәләрҙе ошо инәйҙәргә таратып сыҡтым. Йөҙҙәре балҡып: "Уй, бындай сәскәләрҙе тотоп та ҡарағаныбыҙ юҡ ине!" - тип шул хәтлем ҡыуанып ҡайтып киткәйнеләр. Был матур әбейҙәр быуыны китеп бөтөп бара. Ауылда алтмыш биш йәшемде үткәргәндә ошо оло быуын да булды. Тик матур әбейҙәрҙең ике-өс бөртөгө генә ҡалғайны... Уларҙың инде янда булмауҙарына һағышланып, илап ултырҙым.

▸ **Һеҙ бер юлы ике хикәйә яҙам, тигәйнегеҙ. Икенсе хикәйәгеҙҙең исемен белергә ине.**

- "Кешеләр йондоҙҙар һымаҡ" тип атала. Ҡайһы бер йондоҙҙарҙың миллион йыл элек балҡыған яҡтыһы әле саҡ килеп баш осондағы көмбәҙебеҙҙе нурландырған һымаҡ, әллә ҡасан вафат булған кешеләрҙең яҡшылығы һаман да тормошобоҙҙо йәмләй. Хикәйә шул турала. Бәлки, был тәү ҡарашҡа матур образ ғына булып күренәләр. Тик бының раҫ икәненә иманым камил: атайым менән әсәйемдең вафатына өс тиҫтәнән ашыу йылдар уҙҙы, ә уларҙың ауылдаштарыма эшләгән яҡшылығы миңә бөгөн йәшәргә ярҙам итә.

▸ **Гөлсирә, үҙегеҙҙең фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашыуығыҙ өсөн ҙур рәхмәт! Ижад тигән серле донъя һеҙгә тағы ла яңы асыштар бүләк итер, улар тураһында ла һүҙ алып барырбыҙ әле...**

- Ижадтың мистикаға тартым мәлдәре лә бар ул. Элек-электән уны ижадсылар "илһам", "муза" тип атап йөрөткән. Һуңғы йылдарҙа ғына мейе эшмәкәрлеген тикшереүҙәр, шулай уҡ квант физикаһындағы асыштар ул серле өлкәне ҡаплап торған ҡорғанды асыңҡырапасыңҡырап ала. Илһам ул үҙ һүҙле, талапсан, мыжыҡ ҡунаҡ. Көтмәгәндә килә, кәрәк саҡта килмәүе лә ихтимал.

Шунан беҙ яҙыусыларҙың "түл йыйыу" тигән һүҙе бар. Уның да оҙаҡҡа һуҙылыуы бар. Шундай ваҡыттарҙа мин уҡыйым, хәҙер бит икһеҙ-сикһеҙ мөмкинлектәр бар: интернеттан уҡыйым. Уҡырға ине, тигән китаптарҙың оҙон исемлеге бар. Илһам шулай уҡ беҙҙең мейенең тулҡын әүҙемлеге тигән нәмә менән бәйләнгән һәм тета-һаләтенә (тета-состояние) ингәндә бик ҡыҙыҡ асыштарға юлыға алаһың.

Шулай уҡ мейенең "доға халәте" тигән мәле була. Аллаһы Тәғәләгә ихлас ышанып, онотолоп доға ҡылғанда кеше шул хәлдә була һәм ошондай мәлдә теләктәр ҡабул була икән. Быға ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла мөмкин. Әммә ышанһаң яҡшыраҡ, сөнки бер бик ҡыҙыҡ һәм мөһим әтнәкәһе бар: ышанһаң - була, ышанмаһаң - булмай. Был тәүге ҡарашҡа башҡа һыймаҫлыҡ булып күренһә лә, шулай икәнен үҙемдең һынап ҡарағаным бар. Һәр кемдең быны үҙ башынан үткәргәне бар, тик, ғәҙәттә, беҙ быға иғтибар итмәйбеҙ, осраҡлылыҡҡа япһарабыҙ. Сөнки үҙ яҙмышың өсөн үҙеңдең уйҙарың яуаплы икәнен ҡабул итеү бик ауыр нәмә. Үҙ бәләләрең өсөн башҡаларҙы ғәйепләү еңел бит.

Хәйер, был бик киң, ҡатмарлы тема һәм ул турала айырым китап яҙырға булыр ине. Кешелектең тарихы бай, еңеле лә булған - тик яҡшылыҡ ҡына мәңгелек. "Утта ла янмаҫ яҡшылыҡ, һыуҙа ла батмаҫ яҡшылыҡ" тиелә "Урал батыр" эпосында. Үлемһеҙ булыр өсөн Йәншишмәнең һыуын уртлаған урында уны үҙе йотоп ебәрмәйенсә, бар тәбиғәт йәшәһен өсөн кире бөркҡән Урал батыр балалары булыуыбыҙҙы иҫтә тотоп йәшәйек.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

▸ **Хикәйәнең исеме иғтибарҙы йәлеп итә: "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем". Әҫәрҙең башынан аҙағына тиклем алып барып еткерелгән был көслө идея шундуҡ тыуҙымы?**

- Юҡ. Уның ҡайҙан тыуғанын үҙең дә белмәйһең бит. Бараһың-бараһың, томан әкренләп кенә тарала бара. Хикәйәнең тәүге вариантында Германиялағы осрашыуҙар юҡ ине. Һуғыш тураһында яҙғанда беҙ үҙебеҙҙең ҡараштан сығып ҡына уйлайбыҙ. Ә "Беҙҙең менән Алла" тип совет балаларын үлтерергә килгән немецтар нимә тип уйлаған? Ошо һорау башҡа килгәс, инглиз тарихсыһының эҙләнеүҙәрен уҡый башланым. Әсиргә алынған һалдаттар тураһында йөҙгә яҡын видео ҡараным. Улар инде ҡарттар, үҙҙәренең башындағы үҙгәрештәр тураһында илай-илай һөйләйҙәр. "Сталинград тамуғында минең дуҫым ятып ҡалды. Үлгән иптәшемдең шинелен систереп кейеп, тере ҡалдым. Үҙемде шул тиклем ғәйепле тоям, һаман ғәфү итә алмайым". Йәки "Атеистарҙы, большевиктарҙы үлтерергә тип килдек. Бер әбей миңә ашарға һалды.

Был булған хәл. Минең хикәйә шулар тәьҫирендә тыуҙы. Бер деталь дә уйлап сығарылмаған. Мин бары мозаика ғына эшләнем. "Томас" тип яҙам бит, ул минең дуҫым. Мин уның өйөндә лә булдым. Атаһы фельдшер булараҡ, Сталинград һуғышында ҡатнашҡан. Яраланғас, һуңғы самолетта Германияға алып сыҡҡандар. Ул 54 йәштә яраларҙан үлеп ҡалған. Ғүмере буйы антифашист булған.

# ҺЫНМАҪ ҺЫН ҠАЛДЫРЫРҒА!

*АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ*




**Яҙыусы, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, "Тормош һабаҡтары" программаһы, "Йәйләү" балалар ял итеү үҙәге, "Башҡортостан ынйылары", "Урал батыр мәктәбе" проекттары авторы, Салауат Юлаев ордены кавалеры Мәрйәм Бураҡаева ошо көндәрҙә 80 йәшлек юбилейын билдәләне. Ошо уңайҙан Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылында ике көн дауамында "Бураҡаева уҡыуҙары" тип аталған төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференция үтте.**

"Ейәнсура районы хакимиәте башлығы юбилейымды районда уҙғарырға тәҡдим иткәс, йырлап-бейеп кенә байрам уҙғарғым килмәне. "Бураҡаева уҡыуҙары" ойошторайыҡ, тинем. "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге, мәғариф бүлектәре, Иҫәнғол башҡорт гимназияһының ҙур тырышлығы менән үткән был саранан ҡәнәғәтмен", - Мәрйәм Сабирйән ҡыҙының ошо һүҙҙәре уның булмышын тулыһынса аса ла ҡуя. Ғәҙәти юбилей сараһына ғына ҡайтарып ҡалдырмай, уҡытыусыларға фәһем алырлыҡ конференция ойоштороуҙа ла уның киләсәк быуынға тәрбиә бирәсәк уҡытыусылар аша тотош милләт хаҡында уйлауы сағыла. Мәрйәм апайҙы һәр беребеҙ, һис шикһеҙ, тап ошолай итеп беләбеҙ: һәр һүҙе тәрән аҡыл, һәр әйткәне - тәрбиә һабаҡтары.

Этнопедагогикаға арналған бындай сара тәүге тапҡыр 1993 йылда уҙа һәм уның ҡарары буйынса башҡорт мәктәптәрендә "Тормош һабаҡтары" фәне уҡытыла башлай. Был юлы уҙғаны ла белем усаҡтарына халыҡ педагогикаһы нигеҙендә уҡытыу һәм тәрбиә биреүҙе яңынан ҡайтарыу, уҡыусыларҙа туған телгә, тарихҡа, фольклорға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыуҙы, уларҙы ижади эшмәкәрлеккә йәлеп итеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙы һәм үҙ ҡорона Башҡортостандан тыш, Ырымбур, Силәбе өлкәләренән, Саха (Яҡут) республикаһынан барлығы 100-гә яҡын ҡатнашыусыны йыйҙы. Фәнни-ғәмәли конференцияның тәүге өлөшө юҡҡа ғына М. Бураҡаева исемендәге башҡорт гимназия-интернатында булманы. 1990-1991 йылдарҙа илдә инновацион уҡыу йорттарына юл асылғас, Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы "Тормош һабаҡтары" программаһын булдырыу уйы менән эшкә тотона. 1992 йылда тыуған яғына ҡайтып, 1-се Иҫәнғол мәктәбендә гимназия кластары астырыуға өлгәшә алған Мәрйәм апайҙың тырышлығы, ныҡышмалылығы менән 1993 йылдың 1 сентябрендә Ейәнсура башҡорт гимназия-интернаты үҙ ишектәрен аса. Исеме аҙаҡтан Иҫәнғол башҡорт гимназия-интернаты тип үҙгәртелһә лә, маҡсаты үҙ асылында ҡала - халыҡ педагогикаһы нигеҙендә белем, тәрбиә биреү, балаларҙың тәбиғи һәләтен үҫтереү уның төп йүнәлешенә әйләнә. Мәрйәм апай директор вазифаһында ла эшләп ала бында.

2021-2022 уҡыу йылын иһә белем усағы Мәрйәм Бураҡаева исемендәге башҡорт гимназия-интернаты тигән исем менән башлап ебәргән. Гимназия директоры Эльвира Садиҡова билдәләүенсә, бөгөн бында балаларын уҡырға алып килергә теләк белдереүселәрҙе үҙенсәлекле мөхит, белем биреү һәм тәрбиә алымдары ҡыҙыҡһындыра. Илен һөйә белгән, туған телендә һөйләшкән шәхестәр тәрбиәләнә бында. Һәм, әлбиттә, Мәрйәм Бураҡаеваға ихтирамлы мөнәсәбәт һиҙелеп тора был уҡыу йортонда, тип билдәләне сарала ҡатнашыусылар ҙа.

Сараның пленар ултырышы Мәрйәм Бураҡаеваның ижадына, мәғариф мәсьәләләренә арналды. Уның үҙенең сығышы ла ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланды.Ҡала шарттарында ла балаларының туған телен, йолаларын, тамырҙарын белеп үҫеүен, тормошта уңышҡа өлгәшеүенең серен дә ябай итеп аңлатты Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы. "Мин уларҙы үҙ ҡалыбында тәрбиәләнем. Уларҙың ҡалыбы - башҡорт булыу", - тине ул. Ғөмүмән, ултырыштағы һәр сығыш үҙенсәлекле фекерҙәр менән айырылып торҙо. Тәҡдимдәр ҙә күп булды. Башҡорт әҙәбиәте дәреслегенә Мәрйәм Бураҡаеваның балалар өсөн яҙған әҫәрҙәрен индерергә, халыҡ педагогикаһын өйрәнергә, тергеҙергә, "Бураҡаева уҡыуҙары"н йыл һайын уҙғарырға һ.б. "Һәр халыҡтың үҙенең үҫеш ҡалыбы бар. Балаларҙы шул үҫеш ҡалыбында үҫтерһәң, халыҡ тәрбиәле була. "Урал батыр" эпосында "һын" тигән төшөнсәгә ҙур урын бирелгән. Һын - ул арҡа һөйәге. Кешенең һыны арҡа һөйәгенә бәйләнгән. Арҡа һөйәге ныҡ икән, ул кеше сәләмәт була, ауырымай. Балаларҙа һынмаҫ һын ҡалдырырға кәрәк", - Мәрйәм Бураҡаеваның был теләге ошо сарала ҡатнашыусының һәр береһенең күңеленә һеңеп, уҡыусыларының булмышында сағылыш табырына ышанайыҡ.

**Резеда ШӘҢГӘРӘЕВА.**

✓ *Ҡайтыу яғына йүнәлгәйне генә ҡый һауытының эсенән сыйнау ҡабатланды. Бына ҡайҙа ырғытҡандар икән! Кире килде лә, ҡабаланып, ҡый пакеттарын уңлы-һуллы ян яғына ырғытып соҡона башланы.*





Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# ТАБЫЛДЫҠ

хикәйә

Дауытҡа килгәндә, ҡиммәттән һалдырып бер айҙан ашыуға һуҙылған ремонт үткәргәндән һуң, фатирға күсенгән мәлдә "КаМаз" автомобиле кузовының осло мөйөшө баш мейеһенең сикә өлөшөнә бәреп, шунда ятып йән биргән. Шулай итеп, алдыҡ менән алған торлағында бер көн дә йәшәй алманы, тар, һалҡын ҡәбергә күсте. Фажиғә хаҡында ишетеп, уның ҡайҙа йәшәгәнлеге хаҡында әйтһәләр ҙә, ерләшергә барманы, аяҡтары тартманы. Дауытҡа үпкәләһә лә рәнйемәне. Ни тиһәң дә, баҙар шарттарына көйләнгән замана кешеһе ине бит ул. Әйләнә-тирәһенә әҙәмсә мөнәсәбәт күрһәтеп өйрәнмәгән мәрхәмәтһеҙ быуындан. Уларҙың бит төп тереклек итеү принцибы: "Кеше кешегә бүре, әгәр һин уны тамаҡламаһаң, иртәгәме, әллә һуңғараҡмы ул һине быуасаҡ!" Ә уның ишеләрҙе нисек бар, шулай ҡабул итергә кәрәк. Алдапһолдап, эләккәнен ялмап, эләкмәгәнен үҙ яғына ҡайырырға тырышып йәрөп ятыуҙары! Дауыт юғары белемле, ҡайһылыр кимәлдә мәҙәниәтте, әҙәбиәтте белһә лә, тыуған телен һанға һуҡмаған, күк менән ер араһында аҫылынып ҡалған, милләтһеҙ, ерһеҙ, рухһыҙ әҙәм ине, ундайҙар аҙым һайын хәҙер, ундайҙар менән донъя тулған!

Тағы бер килке ятҡас, фуражка эсенә йәшергән "тейеп булмай торған" һуңғы сигаретын ауыҙына ҡабып, балкон яғына ҡарай йүнәлде. Таң бите яйлап асыла башлағайны, һәр хәлдә, ылғый ҡараш ташлап алырға күнеккән тау киртләстәренә яҡтылыҡ осмото ҡунған. Тыңланды. Һирәк-һаяҡ унда-бында елеп үткән машиналарҙың фаралары таң бишегендә ойоған эреле-ваҡлы ҡала ҡаралтыларының шәүләләрен яҡтыртып ебәрә. Тиҙҙән ҡаршы яҡ йорт тәҙрәләрендә лә берәмләп уттар ҡабына башлаясаҡ. Иң тәүҙә уларҙың участковыйы Валерий Леонтьевтарҙың тәҙрәләре ҡабып китәсәк. Иртәселдәр улар. Ҡатыны уҡытыусы, институтты тамамлағас, Зәбирәһе эшләгән мәктәпкә барғайны, әле лә шунда. Берҙәм ғаилә, әҙәпле кешеләр. Һәр хәлдә, Валерий ҙа, ҡатыны ла уны шәйләп ҡалһалар, үҙҙәре башлап сәләмләп уҙалар. Татыу йәшәйҙәр ҙә ул, әммә уларҙың да балалары юҡ. Ҡайҙа барһалар ҙа гел икәүһе генә. Ә икәү генә йәшәү бәхет килтермәй. Ҡартайырҙар бер килеп, кемеһелер беренсе булып күҙҙәрен йомор. Ары нимә? Уның асы яҙмышын ҡабатларҙармы? Төптән төшөп уйлай башлаһаң, ҡурҡыныс, бик ҡурҡыныс. Ошо хәлдә ҡалыу аяныслы булһа ла иң йәнгә тейгәне яңғыҙлыҡ, үҙеңде сүплеккә сығарып ырғытылған кәрәге ҡалмаған әйбер итеп тойоу!

Ана, ысынлап та Леонтьевтарҙың ғаиләһе уянды. Бөгөн шәмбе көн, икеһе лә эшкә бармайҙарҙыр, моғайын, ял итһәләрсе, йоҡоларын туйҙырһаларсы...

Сүп-сар һауыты яғынан килгән тызылдау тағы ҡабатланды. Һиҫкәнеп китте, сөнки ауаз бер ҙә генә эт көсөгөнөң шыңшыуына, йә бесәй балаһының мыяулауына тартмағайны. Тороп тор, ни булһа ла булыр, барып ҡарарға кәрәк. Әгәр тере йәндәргә, йортһоҙ ҡалған бесәйгә, йә берәй берәҙәк эткә тап булһа, үҙе менән алып ҡайтыр. Нисек тә йәшәрҙәр әле. Уларҙы асыҡтырмаҫ, һәр хәлдә асыҡтырмаҫҡа тырышыр. Яңғыҙлығы бер аҙ сигенә лә төшөр, бәлки, ни тиһәң дә өйгә тере йән инә бит.

Яурынына курткаһын һалды, аяҡтарына иҫкерһә лә әле ныҡлығын юғалтмаған туфлиҙарын кейҙе. Ошо туфлиҙарҙы Валерийҙың ҡатыны Нина, кейеп ҡарағыҙ, оҡшамаһа ташларһығыҙ, тип килтергәйне. Башҡаларҙан кейем-һалым ҡабул итергә яратмаһа ла, ихтирам иткән кешеһе килтергәс, алды. Размеры ла уға таптаман ғына икән дә баһа! Тышта апрель аҙағы. Көндәр йылы тора. Шулай булһа ла ҡояш нурҙары һирәк иркәләгән уларҙың ишек алды бик һуңға ҡалып ирей. Әле лә ялтырап ятҡан һуҡмаҡта бер нисә таптҡыр тайып китеп, саҡ йығылмай ҡалды.

Һаҡ ҡына баҫып, теге тауыш биреүсене өркөтөп ҡуйыуҙан һипһенеп, ҡый һауытына яҡынланы. Ян-тирәлә тере йән барлығы тойолмай, бары ашыҡ-бошоҡ, ҡайҙа етте шунда ырғытылған сүп пакеттары ғына вайран килеп сәселеп ята. Пластиктан эшләнгән дүрт тәгәрмәсле апаруҡ ҙур һауытты урап сыҡты, асыҡ күренмәһә лә, эйелеп, аҫ яҡҡа күҙ һалды хатта. Хаталанған. Өн янылыштан ғына ҡолағына салынғандыр, күрәһең. Үртәлгәндәй ҙә итте, бына бит олоғайыу нишләтә: күрмәгәнде күрәһең ҡайһы саҡ, башҡалар иттибар итмәгән ҡолағына яғыла.

Ҡайтыу яғына йүнәлгәйне генә ҡый һауытының эсенән сыйнау ҡабатланды. Бына ҡайҙа ырғытҡандар икән! Кире килде лә, ҡабаланып, ҡый пакеттарын уңлы-һуллы ян яғына ырғытып соҡона башланы. Апаруҡ мөшәкәтләнде. Ярты һауытты бушаттым ғына тигәндә иҫке юрғанға төрөлгән төргәкте тартып сығарҙы һауыттан. Ул тыш яҡтан скотч менән ашыҡ-бошоҡ бер нисә тапҡыр уратылғайны, шуға күрә тағатылмағандыр ҙа. Юрғандың япмалы ерен ҡайырҙы ла, яңы тыуған баланың сей йөҙөн шәйләгәс, һиҫкәнеп артҡа ҡарай тартылды, нимәгә юлыҡтым әле, тигәндәй, янтирәһенә ҡурҡыулы ҡарашын атты. "Бына бит нисек, бүлмәмдә генә ултырһам ни булған, был хәлгә тарымаҫ та инем..."

Ҡулындағын ҡарһаланып кире ҡый һауытына һалды ла, хәүефтән өрккән кейектәй, артҡа сигенеп китә башланы, мейеһен: "Миңә тимәһә, теләһә нимә ҡыланһындар, бәләһенән баш-аяҡ!" - тигән уй ярып үтте. Подъезд ауыҙына килде. Икеләнеп урынында тапанды. Нишләп ҡалдырҙың мине, тигәндәй, арт яҡтан саҡырыу йәнә ҡабатланды. "Үлә бит был бала ошо урында ҡалһа... Быға саҡлы ла әллә күпме ятҡандыр әле... Алып та ҡайтты икән ти, көтмәгәндә бүлмәһендә йән бирһә, уны гәйепләйәсәктәр... Әгәр ҡышҡы ғына ишетеп тә ҡалмаһа, ни булыр ине! Ни генә булһа ла бөпесен тыуҙырған да артыҡ әйберҙәй сығарып ырғытҡан әсәне түгел, уны гәйепләйәсәктәр... Әгәр хәҙер ҡул һелтәп инеп китһә, ҡасһа, һуңынан йәнде талаған выжданды ҡалайтырға, гүмере буйы үҙ йәнен үҙе ашаясаҡ! Юҡ, былай ярамай, ул да бит тере йән, ярҙамға мохтаж..." Ҡәтғи ҡарарға килеп әләгәйығыла кире йүгерҙе, ыңғай бер тайып йығылып та китте. Туң ергә бәрелгән тубығын ыуа-ыуа ары туйтанланы, төргәкте эләктереп, ҡәҙерләп ҡосағына алып, подъездға инде, һалҡын стенаға башын терәп, онотолоп торҙо биниһая ваҡыт. Төймәләре эленмәгән куртка салғыйҙары менән юрғанды өҫтәп ябырға итkәндә унан йәнен албырғатҡан яҡынлыҡ, йылылыҡ килгәнлеген һиҙемләне, әллә үҙенә генә шулай тойолдо инде?

Инде. Бүлмәһендә утты ҡабыҙҙы. Төргәкте карауатына һалды. Тағатты. Юрған эсендәге бәпес тағы өҫтөп һиҙерәгән таҫтамалға төрөлгәйне. Туҡта, балкон ишеге асыҡ ҡалған бит. Уны япҡас, кире килеп төргәкте һаҡ ҡына тулыһы менән асып йәйеп ебәрҙе. Уға төбәлгән аҡыллы, иғтибарлы сабый күҙҙәрен күреп, тертләп китте. "Һаумы!" үҙе лә абайламаҫтан ҡутырлы ирендәренән сәләмләү ауазы һығылып сыҡты. Эргәһендә тере кеше барлығын тойған бала ла тызылдамай хәҙер, ептәй ике ҡулын, сей аяҡтарын тырпыратып ята бирә. "Һе, малайһың да баһа һин, шуға ла үҙеңде тыныс тотаһың, ҡыҙ балалай сарғаланып бармайһың!.. Күҙҙәрең асылғас, кисә генә лә тыумағанһың, шулай булғас, әсә иҫәпләнгән ҡатын йораты һине аңлы рәүештә, төплө ҡарарға килеп сығарып ырғытҡан, йәшенһә-йәшенер, боҫһа боҫор, әммә хоҡуҡ һаҡлау ойошмаларына ғариза яҙып, эҙләү һалып мәшәкәтләнмәйәсәк. Эҙләмәһен, кәрәге лә юҡ!"

Баланы һаҡ ҡына итеп кире төрҙө лә алдына алып бәүелткән хәрәкәттәр яһаны. Ары хәүеф янамауын тойған бала әүелйеп тә китте щикелле. Уны карауаттың уртаһына һалды, өҫтөп юрғаны менән япты. "Ятып тор ошолай, йылыраҡ та булыр..." Килеп тыуған көтөлмәгән хәлдән иҫен йыя алмай биниһая ваҡыт һеңгәҙәп ултырҙы карауаты ҡырында, мәгәр баланы уятып ҡуймайым, тип, тамағын да ҡырманы, екһенгәнен белгертеп, ауыр итеп көрһөнмәне лә. Хәҙер йоҡоһо туйғас, бала уяныр. Ары ни эшләр? Һуң ни эшләһен, ашарға таптырыр бит, былай ҙа астыр әле. Ошо уйҙан ҡубып ҡалҡынып, карауаты аҫтына ҡуйылған сумаҙанды һөйрәп сығарып, документтары араһындағы пенсия аҡсаһын килтереп сығарҙы. Кисә квартплата түләй торған көн ине. Ярай әле түләмәгән. Эргәләге "Красное-Белое"нан һатып алған бер ярты суррогатты иҫәпкә алмағанда, аҡсаһы теүәл. Быныһы яҡшы. Сумаҙан төбөнән эшлектән сыҡҡанға иҫәпләнгән төймәле телефонын, зарядкаға ҡуя торған шнурҙы килтереп сығарҙы ла уны ҡаршы яҡ стенаға беркетелгән розеткаға тоташтырҙы, яңғыҙ түгелмен бит, шылтыратыуҙары бар, тигән уй үтте башынан.

Хәҙер магазинға барып, кисекмәҫтән балалар аҙығы һатып алырға кәрәк. Тәҙрәгә күҙ атты. Көн яҡтыра төшкән, әммә һатыу нөктәләре сәғәт 9-ҙан ғына эшләй башлаясаҡ. Ул ашыға тип кем генә өлтөрәп торһон тағы! Бәй, тәүлек әйләнәһенә эшләгән аптека бар ҙа баһа ҡаршылағы йорттоң беренсе ҡатында.

Кейенеп алып, шунда китте. Аптеканың тышҡы ишеге бикле ине. Ишеккә уйылған тәҙрәне оҙаҡ ҡына сиртергә тура килде. Бына тәҙрә асылып, йоҡонан йөҙө шешенгән йәш кенә ҡыҙҙың ризаһыҙ йөҙө күренде.

- Здравствуйте!

Сәләм алынманы, уның урынына ризаһыҙ һөйләнеү ишетелде:

- С утра спиртосодержащих препаратов не продаем, вообще то их нет в продаже!

- Мне бы детского питания!

- Что? - Көтөлмәгән һорау аптыратты шикелле фармацевты, ул күҙҙәрен шаҡмаҡландырҙы.

- Что-нибудь дорогое, качественное у вас есть?

- У нас все качественное. Порошок "Нан" хотите?

- Порошок? А он съедобен?

- Конечно. Это же самое качественное детское питание.

- А как его разводить?

- В горячей воде. Ложите чайную ложку порошка на стакан кипяченной воды, чтобы не образовались комочки, постоянно смешиваете. Как только остынет, смесь считайте готов. Его берут для недоношенных детей. Препарат без добавления сахара, без консервантов, близок к материнской молоке...

- Материнское молоко бывает только у матерей. Дайте банку... Как кормить ребенка?

- А сколько ребенку дней?

Юғалығыраҡ ҡалды:

- Примерно месяц. Не больше.

- Не поняла, сколько?

- Месяц. Сегодня с утра ровно тридцать дней!

- Вообще-то "Нан" предназначен для двух-трехмесячного ребенка.

- Может такое ограничение для девочек, а у меня здоровый пацан, весом более трех килограммов!

- Тогда можно.

- Еще детские штанишки, как они называются не знаю...

- Памперс. Вы меня удивляете, почему ваша жена или дочь не подошли, с раннего утра вы ходите? Зачем вам детский подгрузник?

- Много будешь знать, скоро станешь старухой.

- Мне еще нет и двадцати пяти! - Ҡыҙый, үпкәләгәндәй, ирендәрен турһайтты.

- Ладно, не обижайся, это я для связки слов, добавьте сюда еще баночку и соску помягче...

**(Дауамы. Башы 10-сы һанда).**

***✓ Төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, урындар ала башланым. Мин дә шул уҡ кешемен, тик башҡалар һымаҡ жюриҙарҙы күрмәйем, маҡсат ҡуям да, нисек бар, шулай сығам да йырлайым.***



ИЖАДХАНА

**Сибай концерт-театр берекмәһенең музыканты, автор-башҡарыусыһы Азат Исҡужинды Сибай ҡалаһында, Урал аръяғында, республика киңлектәрендә яҡшы беләләр. Уның башҡарыуындағы йырҙар бер ҡаршылыҡһыҙ күңелгә уйыла ла ҡуя, йырсы менән тыңлаусы араһында илаһи бәйләнеш барлыҡҡа килә. Башҡа телдәргә тулы мәғәнәһендә тәржемә итеп булмаған моң төшөнсәһе киң булғанда ғына шулай булалыр, моғайын, тәңгә йондоҙло йыһан киңлегенә баҡҡандағы һымаҡ...**

**Тыумыштан күреү һәләтенән мәхрүм булған Азат ун бер йәшенә тиклем тыуған ауылы Йәнтештә (Хәйбулла районы) йәшәй. Атай-әсәһе, туғандары, күрше-тирәһе, тиҫтерҙәре, ғөмүмән, Тыуған яҡ тип аталған күңел ҡәләһе ҡурсауында үтә уның гәмһеҙ бала сағы. Мөмкинлектәре сикләнгән, тиған ярлыҡ бар икәнен дә тоймағандыр ул йылы мөғәмәләр ҡурсауында. Әммә ир булыр кеше ғүмер буйы итәккә йәбешеп йөрөмәҫ, яҙмышы буласаҡ сәнғәт әһелен Өфө ҡалаһының 28-се махсус мәктәбенә йүнәлтә. Тәүге тапҡыр көҙгө каникулдарға бер үҙен Өфөнән тыуған ауылы Йәнтешкә маршрут автобусына ултыртып ҡайтарыуҙарын тулҡынланып иҫкә ала ул. Район үҙәгенә килеп еткәс, әсәһенең "Есть тут маленький человек?" тип, водителгә өндәшкән тауышын ишеткәс, илап ебәрә ул. Артабанғы һүҙҙе Азаттың үҙенә бирәйек:**

# МӨМКИНЛЕКТӘРЕ СИКЛӘНМӘГӘН АЗАТ



## Махсус мәктәп

Интернатта уҡып йөрөгәндә сығышы менән Учалы районы Таңғатар ауылынан булған уҡытыусым Рима Раил ҡыҙы Бикҡужина, үҙҙәренең диалектында, һин йырҙай беләһең бит, тине. Ул ваҡытта хәҙерге кеүек тыйнаҡлыҡ булмағандыр инде, эйе, йырлайым, тип, бик ҡыйыу яуап бирҙем. Бер аудиторияға алып барҙылар, тәүҙә ритм тикшерҙеләр. Әйҙә, ниндәй йырҙар йырлай алаһың, тигәс, өс куплеттын яттан белгән "Саңҡ-саңҡ итә Ирәндек бөркөтө"н йырлап күрһәттем. Оҡшаттылар. Апрель айында отчет концерты була, шунда ошо йырҙы йырларһың, тигәс кенә шаңҡып ҡалдым. Ауыл клубында ғына йырлаған кеше Өфөнөң үҙендә йырлаһын әле! Шулай башланып китте йырсылыҡ башы.

## Музыка мәктәбе

Музыка мәктәбе интернат бинаһының эсендәге өс-дүрт бүлмәнән торған айырым блокта урынлашҡайны. Фортепьяно, баян кластары айырым эшләнгән. Унда уҡыуға теләктәре көслө булғандарҙы, һәләттелләрҙе генә йәлеп итәләр. Беҙҙең менән күреү һәләте булғандар ҙа уҡыны. Уҡыу алты йыл дауам итә, аҙаҡ танытма бирәләр. Башта йырлап ҡына йөрөнөм, шунан баянда уйнарға өйрәндем. Һәр бер музыкант тәүҙә үҙе яратҡан көйҙө уйнарға өйрәнеүҙән башлай. Миңә "Хәтирә" көйө оҡшап торғайны. Уны ауылда саҡта олатайҙың баянында, уның күрһәтеүе буйынса, тысҡылдата торғайным. Шулай баянда ла өйрәнәм, яңы йырҙар ҙа йырлай башланым. Ул саҡта баянға өйрәнгәндәр бүлмәләр өсөн талашып та ала инек, сөнки ике баянсы бер бүлмәлә шөғөлләнә алмай бит инде. Өлгөрһәң, бүлмәлә уйнайһың, өлгөрмәһәң, икенсе ҡатҡа йоҡо бүлмәһенә менергә мәжбүр булаһың.

Тәүге йыл шулай үтеп тә китте. Икенсе-дүртенсеһе лә музыка мәктәбе менән ҡуша барҙы, алтынсы класты бөтөүгә баян буйынса ҡулға ҡағыҙ алдым. Бер мәл йәйге каникулға хатта баянды ауылға ла биреп ҡайтарҙылар. Ауыр ғына "Рубин" баянын йөкмәп ҡайттым. Тырышҡанмындыр инде, каникулдан килгәс, һинән һәйбәт баянсы сыға, тип ҡыуанып киттеләр. Шулай алтынсы класта баян курсын тамамланым. Музыка мәктәбен тамамлағас та баянсылар ансамблен күтәрмәләп йөрөнөк. Күстәнәскә шоколад биргәндәре хәтерҙә. Шулай эшләргә өйрәттеләр, сәм барлыҡҡа килде.

## Салауат ағай

Унынсы класта уҡығанда, кемдәр ноталар өйрәнергә теләй, шуларға сольфеджио буйынса дәрестәр була, тинеләр. Минән һорап та торманылар, һинә мәжбүри, тинеләр ҙә ҡуйҙылар. Салауат Әхмәҙи улы Низаметдинов директор урынбаҫары булып эшкә килгән икән. Ун бишләп уҡыусыны уның кабинетына алып барҙылар. Салауат ағай мәрхүм беҙҙең менән танышып сыҡты, кемдең ниндәй музыка ҡоралында уйнауын белеште. Арабыҙҙа күргәндәр ҙә бар ине. Һәр беребеҙҙе айырым тикшереп сыҡтылар. Һайлап алған ун кеше араһында мин дә бар инем. Йәйләп ҡына ноталар, музыкаль диктанттар (уйнағанды нотаға күсереү) яҙа башланыҡ. Аҙнаһына ике тапҡыр сольфеджиоға йөрөйбөҙ, йырлайбыҙ, Салауат ағай биргән махсус китаптарҙы өйрәнәбеҙ. Ҡыҙғаныс, Салауат ағайҙа мин йыл ярым ғына уҡып ҡалдым. Ул беҙҙе күберәк музыка буйынса әҙерләне. Тырыштарға ваҡытын күберәк бүлә ине, ун кешенән һигеҙ тороп ҡалдыҡ. Һәйбәт, көслө уҡытыусы булды Салауат ағай. Музыка серҙәрен тәрәнерәк аңлай башлағас, үҙенең студияһына саҡырып, өҫтәмә дәрестәр бирә ине. Һин артабан уҡыр өсөн ошоларҙы белергә тейеш, тип өйрәтә торғайны. Йәне йәннәттә булһын, арабыҙҙан бик иртә китте.

## Сәнғәт колледжы

Уҡып бөтөп, Хәйбуллаға ҡайттым. Көҙ еткәс, бәләкәй һеңлем мине Сибай сәнғәт колледжына уҡырға барырға өндәй башланы. Минең Сибай институтындағы музыка факультетына уҡырға инергә уйым бар ине, әммә күргәндәр араһында уҡыуы ҡыйын булыр тип унайһыҙланып йөрөй инем. Һеңлемдең тәҡдименә күндем шулай ҙа. Бәхеткә күрә, колледжға барып, директорҙың ҡабул итеү бүлмәһе эргәһендә тапанғанда вокал буйынса уҡытыусы Динар Мират улы Ласынов тап булды. Ул мине директор Азат Ғәйнитдин улы Ҡамбулатовҡа алып инде. Директор Ҡудашева Гөлсинә Ғәйнислам ҡыҙын саҡырҙы һәм улар бергәләп тыңлап ҡарағас, мине уҡырға алырға тип ҡарар иттеләр. Беренсе сентябрҙә уҡырға килдем. Илһам Мөхәмәтшин исемле егет менән танышып, дуҫлашып киттем, уға мәңге рәхмәтлемен - ул мине һәр саҡ етәкләп оҙатып йөрөнө. Уҡыуҙа артыҡ проблемалар булманы тиерлек. Төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, урындар ала башланым, сөнки ундай сараларҙа сығыш яһар алдынан миндә артыҡ уйланыуҙар булмай торғайны. Мин дә шул уҡ кешемен, тик башҡалар һымаҡ жюриҙарҙы күрмәйем, маҡсат ҡуям да, нисек бар, шулай сығам да йырлайым. Ҡай саҡ уңышлы килеп сыға, ҡай саҡ - юҡ, сөнки һин күрһәһеңме, күрмәйһеңме, артыҡ роль уйнамай, һин дә бер үк программа буйынса уҡығанһың бит...

## Аҡъярҙан Сибайға

Диплом алғас, Аҡъяр мәҙәниәт йортона эшкә саҡырҙылар. Һигеҙенсе август көнө эш башлап, төрлө тамашаларҙа ҡатнаша башланым. Илһам дуҫым Сибай филармонияһында эшләй башлағайны. Бында эшләүе ҡыҙыҡ, гастролдәргә йөрөйбөҙ, ти ҡыҙыҡһындыра. Йыл ярым эшләгәндән һуң миндә лә шундай хыял уяна башланы. Берҙән-бер көндө бәхетте һынап ҡарарға тип Сибайға сыҡтым да киттем. Филармония директоры Ҡотошов Айбулат Миңлеғәли улына ингәйнем, ярай, йырҙарыңды ебәр, тыңлап ҡарарбыҙ, алырғамы-юҡмы, яуап бирербеҙ, тине. Икеле уйҙар менән сыҡтым. Сығып барғанда Рәмил ағай Туйсин тап булды. Минең директорҙа булыуымды, уның көтөргә ҡушыуын ишеткәс, Рәмил ағай: "Ярай, мин уның ҡолағына үҙем өрөп ҡарайым әле", - тип директорға инеп китте. Ун биш-егерме минуттан Рәмил Париж улы шылтырата: "Һине эшкә алабыҙ, беренсе февралдән беҙҙә эш башларға тейешһең". Шулай итеп, унда эш башланым. Шунда уҡ "Сулпан" балалар театры ҡуйған бер спектаклгә көйҙәр яҙырға ҡуштылар. Аллаһҡа шөкөр, яҙған көйҙәремде ҡабул иттеләр, спектакль уңышлы ғына килеп сыҡты, маҡтағастары, дәртләнеп киттем.

## Филармонияла

Колледждың беренсе курсында уҡып йөрөгәндә үк йырҙар яҙа башланым, әле йөҙләп йырым барҙыр. Үҙемде әҙерәк музыкант та, йырсы ла тип һанайым, әммә икеһен дә бергә алып барғы килә. Сибай концерт-театр берекмәһендә эшләүемә өс йыл да булып китте. Илһам дөрөҫ хыялланған, гастролдәргә йөрөү - иң яратҡан шөғөлөм. Дөрөҫөн әйткәндә, уңайһыҙлыҡтар тураһында уйларға бында хут бирмәйҙәр, коллектив менән бергә йөрөһәң, эш менән тәьмин итеп торһалар - иң мөһиме шул. Күп уҡырға, күп белергә тейешбеҙ, тип уйлайым, шуға музыканың һәр төрлө жанрын да өйрәнәм, тыңлайым. Музыкаль инструменттарға килгәндә, фортепьяно өсөн яҙылған әйберҙәрҙе тыңларға яратам. Ҡурайҙы яратам! Үҙемдең мөйөш, ҡыйыҡ аҫты булырға тейеш, тип, оҙаҡ уйландым һәм фатир һатып алдым. Бешеренергә яратам. Ашамлыҡтар һатып алырға коллегаларым ярҙам итә. Үҙ фатирың булыуы шәп. Нимә эшләгем килә, шуны эшләп ҡарайым, тип, беренсе тапҡыр бешеренеп йөрөүем иҫтә. Башта тоҙо артығыраҡ, икенсеһендә - әҙерәк, өсөнсөһөндә таман булды. Белмәгәндә һорашам, белешәм, ҡасан да булһа өйрәнергә тейешмен бит. Әлбиттә, ғаилә ҡороу, өйләнеү - минең дә хыялым.

Аллаһы Тәғәләнән йорт-ил тыныс булһын, тип һорайым, күпме ғүмер бирелгән, шуны ахырынаса матур итеп йәшәргә яҙһын. Мөмкинлектәр бар бит, тәшөнкөлөккә бирелергә, үҙенде йәлләтергә ярамай. Һәр бер атҡан таңға рәхмәтлемен, дуҫтарым, ижадым, музыка, туғандарым йәшәтә мине был донъяла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Азат йор һүҙле, юморға бай кеше. Бер мәл филармония автобусында Баймаҡ районы ауылдары буйлап йөрөп ҡайттыҡ. Асфальт бөтөп, соҡор-саҡырлы юлға төшкәс, Азат водителгә әйтеп ҡуйҙы: "Соҡорҙарҙы күрмәйһеңме әллә, ҡана, алға ултырып, юлды күрһәтеп барайым". Икенсе бер лаҡабы ла хәтерҙә. Бер коллегаһы: "Ҡайҙа юғалдың, бер ҙә күренмәйһең", - тигән. "Мин дә һине күрмәйем", - тип яуап биргән ул. Ҡай саҡ аптыратып та ҡуя ул. Бер көндө: "Дим дә эшкә килгән", - ти уның машинаһына ымлап. Машинаның мауышынан танайҙыр, тиер инең, моторы һүнгән ине... Ә замана телефоны менән нисек оҫта ҡулланыуын белһәгеҙ, бөтөнләй иҫегеҙ китер. Шундай ул мөмкинлектәре сикләнмәгән Азат!**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨН ЯҠ - АҘЫҠ АҘ

■ Яҙ миҙгеле етеп, көндәр йылытҡас та, физик һәм психологик торошҡарына зарланыусылар күбәйә. Әммә табиптар билдәләүенсә, быныҙ фәнни нигеҙе юҡ. Кемдеңдер хәле юҡ, кемдер, киреһенсә, нык әүҙемгә әйләнә, кәйефе шәп була, кемдер күңел төшөнкөлөгө кисерә. Былар кешенең тормошон ҡатмарландыра, әлбиттә, тик яҙға, шулай уҡ ҡышҡа, йәйгә, көҙгә тура бәйләнеше юҡ. XVIII быуатта яҙғы биҙгәк тип зәңге ауырыуын атағандар, сөнки ул тап яҙ башланған. Арыу, хәл булмауы, һәйәктәр һыҙлауы, яраларҙың оҙаҡ бөтәшмәүе уның төп билдәләре булып торған һәм организмға С витамины етешмәүҙән барлыҡҡа килгән. Бөгөнгө рационда йәшелсә-емештәр йыл әйләнәһенә була, шуға ла бындай ҡурҡыныс сир ҙә осрамай тиерлек. Борон ғына көн яҙ булһа, аҙыҡ аҙ булыр, тигәндәр ҙә, бөгөн бындай ҡытлыҡ юҡ. Шуға ла үҙегеҙгә диагноз ҡуйып, күңелһеҙләнеп йөрөмәгеҙ. Миҙгелдәр алышынғанда саҡ ҡына арыу тойоу, кәйеф булмауы ғәҙәти, ә организм үҙен-үҙе көйләй алған система. Шуға ла йыл әйләнәһенә сәләмәтлегегеҙгә, туҡланыуығыҙға иғтибарлы булып, ваҡытында йоҡларға ятып, мөләндә ял итергә өйрәнегеҙ, тип кәңәш итә белгестәр.

■ Март-апрелдә авитаминоз ваҡыты тип тә атарға күнеккәнбеҙ. Әммә был йәһәттән дә бәхәстәр тынмай, медицина фәне раҫлауынса, был мөлдә организм витаминдарға ҡытлыҡ кисерә тип уйлау дөрөҫ түгел. С витамининың роле тураһында ла күп һөйләнелә. Бер яҡтан ҡарағанда, уның етешмәүе төрлө сирҙәрҙә алып килеүе ихтимал, әммә аскорбин кислотаһын бер туҡтауһыҙ ашап йөрөүҙең организм өсөн бер файҙаһы ла юҡ, күп күләмдә ҡабул иткәндә иһә зыян ла. Үҙен яҡшы тойһон өсөн кешегә ике төрлө файҙалы матдәләр кәрәк. Тәүгеһе - макронутриенттар, уларға аҡһым, майҙар, углеводтар инә. Икенсеһе - микронутриенттар - витаминдар һәм минералдар. Аҡһым, майҙар, углеводтарҙы күпме ашарға, быныһын инде кеше үҙе көйләй ала. Әммә минералдар һәм витаминдарға килгәндә, уларҙың күләмен контролдә тотоу ауырыраҡ. Мультивитаминдарҙы оҙайлы эсеү иһә нык зарарлы. Уларҙы ябай ғына ризыҡтар менән алыштырыу иң дөрөҫө, ти белгестәр. Мәҫәлән, кәбеҫтә файҙалы компоненттарға бай булған йәшелсә, унда К һәм С, башҡа төрлө витаминдар, марганец, калий, тимер күп. Һыйыр итендә В2, В3, В6 витаминдары күп. В12 витамининың тәүлек нормаһының 70 проценты иттә, ул булмаһа, анемия, неврологик тайпылыштар башлана. Йод ҡытлығы булмаһын өсөн диңгеҙ ылымыҡтарын ашағыҙ. Бала яҡшы үҫһен өсөн уға бауыр ашатырға кәрәк. А витамины ҡытлығы төнгө күреү һәләтен түбәнәйтә. Шулай уҡ брокколи, шпинат витаминдарға бай.

■ Пекин университеты ғалимдары 8 йыл дауамында 240 мең кешенең ҡан баҫымын күҙәткән. Шау-шыулы трассаға яҡын йәшәүселәрҙә ҡан баҫмы йышыраҡ күтәрелә икән. Быға тиклем автомобилдәр бүлеп сығарған зарарлы матдәләрҙең ҡан баҫымын күтәреүен асыҡлағайнылар. Яңы асыш күрһәтеүенсә, тимәк, юлда була торған тауыш үҙе генә лә гипертонияға килтерә. Ғалимдар ҡала дизайнын, юлдарҙың торошон үҙгәртеү кәрәклеген белдерә, тауышһыҙ транспорт сараларын уйлап табыу ҙа кәрәк, ти улар. Былар барыһы ла йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртеүгә булышлыҡ итәсәк.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# КҮМӘКЛӘП ҺАҒЫНДЫҠ БӨРЙӘНДЕ...

**"Ишеттеңме әле, теге төрөктөң ҡыҙы Бөрйәнгә ҡунаҡҡа килгән бит". Был хәбәрҙе ишеткәс, мин әллә ни аптырамаҡым. Аптырарлыҡ нимәһе бар инде? Элек кенә ул беҙ сит ил кешеһенә Айҙан килгән кешегә ҡараған кеүек ҡарай инек. Ә хәҙерге заманда... Хәҙер беҙ үҙебеҙ ҡайҙа ғына бармайбыҙ ҙа, кем генә беҙгә килмәй. Бына мин дә әлеге яңылыҡты ишеткәс, әй, килгәндер шунда бергәүҙең туғаны, тигән кеүегерәк ҡабул иттем...**

Баҡтиһәң, элегерәк, һуғыш заманында, урман төпкөлөндәге ауылда бер төрөк йәшәгән, имеш. Бына бөгөн шул төрөктөң ҡыҙы Бөрйәнгә ҡунаҡҡа килгән. Мәйтәм, туҡта әле, үҙ күҙҙәрем менән күрәйем әле ул төрөк ҡунағын. Һәм мин Рөстәм ағай Яубаҫаровҡа юл тоттом. Сөнки төрөк ҡунағы тап ошо ағайҙарҙа туҡтаған икән. Әллә кемде күрерҙәй булып, Рөстәм ағайҙарға барып ингәйнем, төп ҡунаҡты күргәс, көләмһөрәп ҡуйҙым. Сөнки түр төбөндә ултырған оло йәштәрҙәге апай һис кенә лә төрөк кешеһенә оҡшамағайны. Бер ҙә төрөксә түгел, ә һин дә мин урыҫса һөйләшеп ултыра. Әллә шаярттылар микән, тигән уй ҙа үтеп китте башымдан. Бер аҙ һөйләшеп-танышып ултырғандан һуң ҡунаҡ ҡатын ихлас йылмайып, хәтирәләргә төшөп китте.



- Бына мин тыуған ерем, тыуған төбәгем, тыуған ауылым булғанына ҡыуанып бөтә алмай ултырам. Ологайған көндә бала саҡта йүгереп йөрөгән урам буйлап атлап үтеү - үҙе бер бәхет. Бөгөн минә һәм минең ғаиләмә һәр ваҡыт ишеге асыҡ булған, беҙгә хәләнән килгәнсе хөрмәт күрһәткән Рөстәмгә сикһеҙ рәхмәтлемен. Башҡорт халҡы шундай эскерһеҙ, шундай ихлас, шундай ҡунаҡсыл бит ул. Ваҡытында атайымды, уның ғаиләһен һыйындырған башҡорттарға ниндәй генә рәхмәт һүҙҙәре әйтһәм дә аҙ булыр ине...

Бер аҙға тынып ҡалабыҙ. Шунан инәй ауыр көрһөнөп ҡуя.

- Шуныһы үкенесле. Атайымдың тыуған Төркиәһенә, тыуған еренә ҡайтыу, үҙ туғандарын күреү мөмкинлеге булманы. Бик һағынды атайым үҙ илен. Был һағыныу өлкәнәйә төшкәс бигерәк көсәйә төштө. Атайым ваҡыты менән тәрән уйҙарға батып, ҡатып ҡалыр ине лә, беҙгә таныш булмаған көнсығыш көйҙәрен көйләп, апаруҡ яңғыҙы ғына ултырыр ине. Был мәлдә ниндәй генә уйҙар үткәндер ине уның башынан... Ярай әле, беҙҙең бәхеткә Бөрйәнебеҙ булды. Атайым бына ошондай күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп киткән мәлдәрендә бар эшен һырҡ яҡҡа ташлап, Бөрйәнгә сығыр ҙа китер ине. Ә юл алыҫ. Ике мең саҡырым самаһы. Әммә атайым ошо араның алыҫлығы тураһында уйлап та бирмәне. Ихлас йыйынын сығып китер ине лә, Бөрйәндән бөтөнләйе менән икенсе кешегә әйләнеп ҡайтып инер ине. Яурындары турайған, күҙҙәре яна, аҙымдары ныҡлы, иң мөһиме, күңеле тыныс. Әйтерһең дә, ул тыуған ауылына барып ҡайтҡан! Әйтерһең дә, туғандарын күргән, улар менән һөйләшеп-серләшеп ултырған! Бөрйәндә ул барыһы менән дә дуҫ булды. Бигерәк тә Ғәни ағай Сәләймәновты яҡын күрҙе.

Ул һөйләгән арала апайҙың үҙе менән таныштырып үтәйем. Ул Алефтина Билаловна Калаидже була. Хәҙер уға 72 йәш. Аңлауығыҙса, уның атаһы төрөк, ә әсәһе урыҫ милләтенән. Апай һүҙен дауам итә:

- Атайымдың тулы исеме Калаидже Оглы Билал Мемиш. Ул 1909 йылда Төркиәлә тауҙар араһына һыйынып ҡына ултырған ауылда күп балалы ғаиләлә тыуа. Төпкөл ауылда йәшәгән балаларҙың күбеһенә уҡыу бәхете эләкмәгән. Минең атайым да мәктәптә ни бары өс йыл ғына уҡыған. Үҫеп еткән йәш егеткә үҙ илендә йәшәргә һәм тормош көтөргә насип булмай. Уның һөйләүе буйынса, үткән быуаттың башында Төркиә иҡтисади яҡтан ҙур ауырлыҡтар кисерә. Һеҙөмтәлә ил башлығы үҙ ғаиләләрен аҫрау өсөн ирҙәргә сит илгә эшкә сығырға рөхсәт бирә. Бына шулай төрлө илдәргә таралыша төрөктәр. Күп ирҙәр ҙур өмөт менән Рәсәйгә табан юллана. Ошо төрөктәр араһында егерме йәшлек атайым да була. Ул 1931 йылда Мәскәүҙәге Төрөк консуллығы аша милли паспорт һәм Рәсәйҙә йәшәргә, иң мөһиме, эшләргә мөмкин тигән рәсми рөхсәт ала. Мәскәүҙә урынлашҡан "Төрөк яҡташтары" тигән ойошма үҙ милләттәштәрен ҡаршы алыу, милли паспорт юллау, уларҙы рәсми рәүештә эшкә урынлаштырыу һәм хеҙмәт хаҡтарының ниндәйҙер бер өлөшөн кире туғандарына ебәреү буйынса эштәрҙе алып барған. Ошо ойошма атайымды икмәк бешереү комбинатына икмәк бешереүсе (пекарь) итеп эшкә урынлаштыра. Шуныһы һәйбәт, Рәсәйгә эшкә килеп урынлашҡан төрөктәрҙең өмөттәре тулыһынса аҡлана. Уларҙың эш хаҡтары һәйбәт була, илдә эш ҡағиҙәләре теүәл үтәлә, урындағы халыҡ яғынан ҡыйырһытылыу-кәмһетелеү осраҡтары булмай. Шуға, эшкә килгән төрөктәр үҙ илендә ҡалған туғандарына ярҙам итә алыуына ҡыуанып, ихлас эшләйҙәр. Атайым һөйләүе буйынса, ул ебәргән аҡсаға Төркиәләге туғандары арыу ғына көн итә алған.

Атайым да эштә үҙен һәйбәт яҡтан ғына күрһәтә. 1934 йылда "Төрөк яҡташтары" ойошмаһы атайыма Ярославль өлкәһендә урынлашҡан Рыбинск ҡалаһына күсергә тәҡдим итә. Атайым риза була. Ул бында күпселеген төрөктәр тәшкил иткән "Пищевик"

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!



# УРАҘА СЕРҘӘРЕ

**Ураҙаның тәүге көндәрендә ҡандан күпләп ацетон бүленә, был кислород етмәүе, хәлһеҙлек, ауыҙҙан ацетон еҫе килеүендә, температура күтәрелеүендә сағыла. Һуңыраҡ был билдәләр юҡҡа сыға, организм тулыһынса үҙгәреш кисерә, аҙыҡҡа битарафлыҡ, эске азатлыҡ һәм эйфория тойғоһо барлыҡҡа килә.**

Организм ауырыған һәм кәрәкмәгән бөтә нәмәне йота башлай. Был - ауырыу күҙәнәктәр, артыҡ углеводтар, май ҡатламдары. Организм энергияны бөтә ағзаларға тигеҙ бүлә, мейегә һәм йөрәккә өҫтөнлөк бирә. Һығылмалылыҡ барлыҡҡа килә, хәрәкәтсәнлек арта.

Ураҙа тотҡан ваҡыт (яҡынса 12-14 сәғәт) аҙыҡтың ауыҙҙан йыуан эсәккә күсеү ваҡыты менән тап килә. Шулай итеп, ашҡаҙан да, аш һеңдереү юлдары ла ял итә, организмдың тотороҡлого һаҡлана.

Ураҙа бөтә ағзаларҙы таҙарта, шул иҫәптән шеш эмбриондары юҡҡа сыға, ҡан тамырҙары таҙара. Шулай итеп, ураҙа ҡарт кешене - йәш, ауырыу кешене һау-сәләмәткә әйләндереү мөмкинлеге тыуҙыра.

Кеше организмын станок менән сағыштырырға мөмкин: ғалимдар әйтеүенсә, 24 сәғәт эсендә ул энергия ҡиммәте буйынса 360 г майға тиң булған "ягыулыҡ" миҡдарын яндыра. Әгәр ҙә һеҙ бындай "ягыулыҡ" менән тәьмин итеүҙе туҡтатһағыҙ, организм шунда уҡ уны тәьмин итеү процесын үҙгәртә: организм эсендә запастар (эндоген туҡланыу) барлыҡҡа килә башлай.

Был запастар нимәнән тора? Был, беренсенән, бөтөнләй кәрәкмәгән туҡымалар, дөрөҫ булмаған йәшәү рәүеше алып барғанда барлыҡҡа килгән һәм организмдың тейешле эшмәкәрлегенә ҡамасаулаған структуралар. Ураҙала бындай патологияһар "үлә" башлай, сөнки артабан туҡлана алмай.

Ҡан, микро кимәлдә ҡатмарлы операциялар яһаусы иң яҡшы хирург һымаҡ, бөтә ағзаларға үтеп инеп, тәнебеҙҙең һәр күҙәнәгендә таҙартыу эштәре алып бара. Ҡалдыҡтарҙы ҡан таҙартыу ағзаларына күсерә. Ураҙа ваҡытында бауыр сүп-сар эшкәртеү заводы кеүек эшләй һәм иң яуаплы йөктө үҙ өҫтөнә ала.

Шулай итеп, сәхәр ваҡытында тәүҙә һыу (50-60° 300-400 мл) эсәбеҙ, финик ашайбыҙ. 15-20 минуттан ашыҡмай ғына ашайбыҙ. Ураҙалар ҡабул булһын!

исемле артелдең етәксеһе итеп тәғәйенләнә. Яңы урында атайым үҙ йәрен таба. Ул Мария исемле урыҫ ҡыҙы менән яҙмышын бәйләй. Йәш ғаилә матур итеп донъя көтөп алып китә. 1936 йылды атайымды Карелияның Петрозаводск ҡалаһына оҙайлы командировкаға ебәрәләр. Уға "Төрөк яҡташтары" артеленың яңы бүлеген ойоштороу эше йөкмәтелә. Әммә көтмәгәндә бәлә килә - атайымды ҡулға алалар. Был хәл 1938 йылдың июль айында була. "Халыҡ дошмандарын фашлау" исеме менән билдәле булған осорҙа нисек итеп сит ил кешеһен ҡулға алмайһың! Ул бит беҙгә сит илдән махсус ебәрелгән "шпион".

Атайымдың ҡулға алыныуы тураһында бер кемгә лә, хатта уның ауырлы ҡатынына ла хәбәр итмәйҙәр. Ғаилә билдәһеҙлектә ҡала. Атайым әллә тере, әллә юҡ, тигәндәй. Ә шулай ҙа әсәйем атайымды дүрт ай буйына эҙләй - унан һораша, бында хат яҙа, төрлө етәкселәрҙең тупһаһын тапай, иренең тиктомалдан юғалыуы тураһында таныш-тоноштарына хәбәр итә. Дүрт ай үткәс кенә әсәйемә иренең ҡулға алыныуы тураһында хәбәр килә. Атайымды биш йылға хөкөм иткән булалар. Ул уның ике йылын Петрозаводск ҡалаһы төрмәһендә үткәрә. 1940 йылдың февралендә "Башҡорт АССР-ына һөргөнгә ебәрергә" тигән ҡарар сығарыла. Ике ай ваҡыт эсендә атайымды Бөрйәнгә алып килеп еткерәләр.

Атайым Бөрйәнгә теренән бигерәк үле хәлдә килеп етә. Ҡалдырып киткән кешеләре "Үлер ул, күпкә бармаҫ", тип әйтеп китәләр. Ҡаҡ һөйәккә ҡалған "халыҡ дошманының" аяҡтары үтә ныҡ боҙолған була. Атайымдың, төрмәлә булған саҡта эттән талаттылар, тигән һүҙҙәре ара-тирә иҫкә төшөп ҡуйғылай. Бына ошо үлер хәлгә еткән кешене Бөрйән башҡорто терелтеп ала. Уны кәзә һөтө менән шәбәйтә! Шәмсиә Ҡолдәүләтова (сама менән минең йылға ул) һөйләүенсә, атайымды уның атаәсәһе ҡарауға ала. Ошо башҡорт ғаиләһе "халыҡ дошманын" йәш баланы ҡараған һымаҡ ҡарай-тәрбиәләй. Һәм уны үлемдән йолҡоп алып ҡала.

Шуныһы шатлыҡлы - бер йыл үтеүгә атайым янына тып итеп әсәйем килеп тә төшә. Етмәһә, ике йәшлек ҡыҙын етәкләп алған бит әле! "Башҡорттарға рәхмәт", тип әйтер ине һәр саҡ әсәйем. "Ниндәй генә ауыл аша үтһәм дә мине ситкә типмәнеләр, халыҡ дошманы ҡатыны тип рәнйетмәнеләр. Ашаттылар, эсерҙеләр, йоҡларға урын бирҙеләр, юлға аҙыҡ биреп оҙатып ҡалдылар. Юлдың бик аҙ генә өлөшө йәйәү арбала, йә машина башында үтте. Күп өлөшө йәйәү инде", - тип һөйләр ине әсәйем. Ҡыҫҡаһы, мең михнәттәр аша үтә әсәйем, әммә, бәлки, кире боролорғалыр, тигән уй башына ла инеп сыҡмай. Уйлай китһәң, иҫ китмәле инде. Ә бына нисә ай килде икән ул Рыбинск ҡалаһынан Өфөгә, аҙаҡ Өфөнән Бөрйәнгә, бына шуны һорашырға баш етмәгән. Ғаиләлә иң бәләкәй бала булғас, был турала уйлап та бирмәгәнмендер инде.

Бына ошолай беҙҙең ғаилә Бөрйәндә йәшәй башлай. Урындағы халыҡ уларға бар яҡтан ярҙам итә. 1943 йылға беҙҙең ғаилә тормошон апаруҡ яйға һалып алған була. Ошо йылды "Билал Калаидженең һөргөндә йөрөү ваҡыты тамамланды", тигән хәбәр килә. Атайым ғаиләһе менән оҙаҡ көнәшләшкәндән һуң Төркиәгә ҡайтып китмәй, Бөрйәндә ҡалырға ҡарар итә. Нимә менән быны аңлатып була икән? Атайым һөйләүе буйынса, Бөрйән тауҙары бер аҙ Төркиә тауҙарына тартым. Бәлки, шуға ла ул был яҡтарҙы яҡын күргәндер. Бәлки, һүгыш барған мәлдә ҡапылғара ҡайтып китеүе лә еңел булмағандыр. Ней булһа ла, ғаилә Бөрйәндә ҡалырға ҡарар итә. Тормош был ҡарарҙың дөрөҫлөгөн аҙаҡ иҫбатлай. Атайым ун биш йыл үткәс кенә тулыһынса аҡлана. Был хәл 1958 йылдың август айында билдәле була. Һәм ошо мәлдән башлап ҡына атайыма кире элекке йәшәгән еренә ҡайтырға рәсми рөхсәт була. Беҙ Бөрйәндә 1961 йылдың июнендә хәтлем йәшәнек. Шунан Рыбинск ҡалаһына күсеп ҡайттыҡ.

Бөрйәндә һәйбәт йәшәнек. Әсәйем магазинда һатыусы булып эшләне. Башҡорт теленә тиҙ өйрәнеп алды. Атайым бар яҡтан оҫта булды. Алағуян йылғаһы буйында эҙбиз яндырҙы. Кирбес һарайында кирбес һуҡты. Ағас эшенә оҫта булды. Бөрйәндә өй һалды. Үҙе мейес сығарҙы. Заманында ул һуҡҡан кирбесте бик маҡтайҙар ине. Атайым эшләгән кирбес һарайы бөгөн юҡ. Урыны ғына һаҡланған. Кирбес тыҡрығы исеме алған урам бөгөн дә үҙ исемен һаҡлап килә. Бөрйән үҙенең бал ҡорттары менән билдәле бит инде. Атайым тиҙ арала ошо шөғөлгә өйрәнеп алды. Ул заманда барлыҡ кеше бал ҡорттарын түмәр-умарталарҙа тота ине. Бөрйәндә дадан умартаһы 60-сы йылдарҙа барлыҡҡа килде. Бына ошо умарталар өсөн атайым балауыҙ (вощина) эшләр ине. Урындағы халыҡ атайымдан уны күп итеп эшләтеп ала торғайны. Ҡорамалын нисек һәм ҡайҙан алғандыр инде, уныһын белмәйем. Әммә уның балауыҙ эшләй торған ҡорамалы булды. Бөгөн мин уны атайымдың ҡомартҡыһы тип ҡәҙерләп һаҡлайым. Атайым ҡортсолоҡ буйынса китаптар яҙҙыртып алыр ине. Уларын да ҡәҙерләп һаҡлайым.

Үҙемә килгәндә, мин ғаиләлә кинйә баламын. Бөрйәндә 1950 йылда тыуғанмын. Ғаиләлә ете бала булғанбыҙ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, булғанбыҙ, тип яҙырға тура килә. Минең Бөрйән ерлегендә тыуған дүрт ағайым һәм бер апайым була. Әммә, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ағайымдар бер-бер артлы ғына аҙна-ун көн эсендә тигәндәй мәрхүм булалар. Апайым нисектер тере ҡала. Ул заманда ҡыҙылса тигән ауырыу бик таралған булған. Шул ауырыу алып киткәндер инде ағайымдарҙы. Мәрхүм ағайымдар Бөрйән зыяратында бер ҡәберлектә ятала. Бөрйәндәргә рәхмәт. Зыяратты таҙалыҡта тоталар. Шуға мәрхүм туғандарым өсөн күңелем тыныс.

Мин Бөрйән мәктәбендә дүртенсе синыфҡа хәтлем уҡыным. Күңелле була торғайны. Һәр синыфта уҡыусы балалар күп булды. Төрлө саралар гөрләп торҙо. Ҡыҫҡаһы, ҡайнап-гөрләп йәшәнек беҙ Бөрйәндә. Һәм бына беҙ Рыбинск ҡалаһына күсеп ҡайттыҡ. Сәбәбе, моғайын да, әсәйемдең туғандары ошо яҡта булыуындалыр. Һағынғандыр инде әсәйем үҙ яғын, үҙ туғандарын. Ней тиһәң дә, егерме йыл самаһы йәшәй бит ул сит ерҙә.

Күсеп ҡайттыҡ, ә күңелдә бушлыҡ. Сөнки күңел Бөрйәндә ҡалды. Иртәнсәк ҡыуанып килеп торһаң, аяҡҡа нимә етте, шуны эләктереп өйҙән йүгереп сығаһың... Ә унда бөтөнләй икенсе күренеш. Һинең ишек алды, һинең урам, һинең менән бергә уйнап үҫкән иптәштәр юҡ. Ағиҙел юҡ. Текә тауҙар юҡ. Ҡуйы урман юҡ. Иркенләп һөйләшкән башҡорт теле юҡ. Был юҡлыҡтарҙы, был һағыныуҙы бик ауыр кисерҙем мин. Мин генә түгел, барыбыҙ ҙа күмәкләп һағындыҡ Бөрйәнде.

Йылдар үтте. Атайым ологайҙы. Бик ҡайтҡыһы килде үҙ иленә. Әммә заманында рөхсәт булманы. Замана үҙгәрҙе, рөхсәт булды. Әммә был ваҡытҡа атайым ҡартайып-бирешеп киткәйне, уның туғандарын күреү теләге тормошҡа ашманы. Бөгөн минә: "Ә нинә үҙең Төркиәгә барып ҡайтмайһың?"- тигән һорау биреүселәр бар. Бик барыр инем дә, тик төбөп барыр кешем юҡ. Атайымдың туғандарын табып булмай. Шуға күрә әйтке килә: туғандарығыҙҙы һаҡлағыҙ, уларҙың ҡәҙерҙәрен белегеҙ, ҡатышып йәшәгеҙ. Туғаның булыу, уның менән күрешеп йәшәү - ул үҙе оло бәхет!

Беҙҙең ғаиләне һыйындырған башҡорттарға рәхмәтлемен. Бөгөн улар минә яҡын туғандарым һымаҡ. Атайым мәрхүм булғас, беҙҙең Бөрйәндәге күршебеҙ Фәниә Йосопованан ошондай хат килеп төштө: "Билал бабайҙың мәрхүм булыуы билдәле булды. Бик оло юғалтыу. Шәхсән минең өсөн Билал бабай егәрле, эшсән кеше булып хәтерҙә ҡаласаҡ. Уның ҡулдары алтын ине. Уның ҡабаланып-өтәләнеп барғанын һис бер ҡасан күрмәнем. Олпат баҫып йөрөгән Билал бабай һәр эшен еренә еткереп башҡарыр ине. Әгәр миндә яҙыусылыҡ оҫталығы булһа, мин мотлаҡ уның тормошо тураһында берәй китап яҙыр инем. Ябай, шул уҡ ваҡытта бөйөк кешеләрҙе халыҡ белергә тейеш!" Әлбиттә, бындай һүҙҙәр минең өсөн оло бүләк.

**Әғләм ШӘРИПОВ**
**яҙып алды.**

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ*

# ӨҪТӘМӘЛӘР ФАЙҘАЛЫМЫ?

**Донъяла әллә күпме кеше кальцийлы өҫтәмәләр ҡабул итә. Әммә яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, кальцийҙы даими ҡулланыу йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре барлыҡҡа килеү хәүефен ике тапҡырға арттыра икән.**

Белгестәр әйтеүенсә, бөгөн бер Бөйөк Британияла ғына бындай өҫтәмәләрҙе яҡынса 5 миллион кеше ҡабул итә. Сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау һәм ауырыуҙарҙы иҫкәртеү һөҙөмтәһендә атеросклероз, гипертония, остеопороз һәм башҡа сирҙәрҙе булдырмаҫҡа тырышыусылар һаны көндән-көн арта. Шуға ла АҠШ һәм Европа илдәрендә организмды тонуста тоторға ярҙам итеүсе өҫтәмәләр ҡабул итеү гәҙәти хәл иҫәпләнә. Тик улар ысынлап та хәүефһеҙме һуң? Германия һәм Швейцария ғалимдарының 11 йыл дауамында үткәргән тикшеренеүҙәрендә урта һәм оло йәштәге 24 мең кеше ҡатнашҡан. Эш төрлө яҡлап алып барылған, әммә шул да асыҡланған: даими рәүештә кальций ҡулланыусыларҙа йөрәк өйәнәге хәүефе ике тапҡырға юғарыраҡ булып сыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта рәсми медицина кальцийҙың бер тәүлеклек нормаһы (700 мг) бер зыян да итмәүен, ә уны артығыраҡ ҡулланыу эс ауыртыуына һәм диареяға ғына килтереүен раҫлай.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

## Байығыуҙың беренсе ысулы: "Көшөләктәге ун һумдың туғыҙ һумын ғына тотонорға өйрән".

Ике аҙнанан һуң батша бойороғо менән Белем һарайында 100 кеше йыйыла.

- Мин үҙемдең байлығыма тиклем бик ярлы инем, - тип башлай үҙенең тәүге дәресен Аркад. - Туҙып бөткән буш көшөләгөм генә бар ине. Мин уны тултырыу тураһында хыялландым, байығыу ысулдарын эҙләнем һәм шундай ете ысул таптым. Шулар хаҡында һөйләргә теләйем һеҙгә. Улар байлыҡҡа илтеүсе иң ябай алымдар. Беренсе ысул: көшөләгөмдө тултыра башла.

- Уҡыусыларым минең, - тип дауам итә Аркад, - һеҙҙең барығыҙ ҙа аҙмы-күпме аҡса эшләргә мөмкинлек биргән бер һөнәргә эйә. Тапҡан аҡсағыҙҙың бер өлөшөн һеҙ үҙегеҙҙең көшөләктә туплаһарға тейешһегеҙ. Ул шулай эшләнә: ихтыяждарығыҙ өсөн эшләп тапҡан ун һумдың бары тик туғыҙ һумын ғына тотонорға өйрәнегеҙ, бер һумы көшөләктә ҡалһын. Һәр тапҡырҙа шулай эшләһәгеҙ, көшөләктәге теге бер һум янына башҡалары өҫтәләр, көшөләк йәйләп ҡалыная барыр. Был һеҙҙең күңелегеҙгә ҡәнәғәтләнеү килтерер. Ошо ябай ғына һүҙҙәремдән көлмәгеҙ, берүк. Хәҡиҡәт һәр ваҡыт ябай була. Мин үҙем байлыҡ туплауҙы шулай башланым.

Ә хәҙер мин һеҙгә тағы бер ғәжәп хәҡиҡәт асам. Мин үҙ ихтыяждарым өсөн эшләп тапҡан бөтә ун һумымды ла түгел, ә туғыҙ һумды ғына тотона башлағас та тормошом шулай уҡ дауам итте, аш-һыуым да кәмемәне, ниндәйҙер мохтажлыҡ та өҫтәлмәне. Уның ҡарауы, көшөләгөм ҡалынайғандан ҡалыная барҙы. Бына Хоҙай Тәғәлә законы тиҙәр: кем эшләп тапҡан аҡсаһының бер өлөшөн генә тотоноп, ҡалғанын запаста тота, уның байлығы ишәйә. Ә кем аҡса тота белмәй, уны байлыҡ урап үтә.

Һеҙ күберәк нимә теләйһегеҙ? Үҙегеҙҙең көндәлек ихтыяжды тулыһынса ҡәнәғәтләндереү, төрлө биҙәүестәр, ҡиммәтле кейем һатып алыу, мул табыныму? Бәлки, һеҙҙең хыял алтын, ер, көтөүлек, сауҙа, төшөмлө инвестицияларҙыр? Көшөләгегеҙҙән алған аҡса һеҙҙең тәүге теләгегеҙҙе ҡандырыр. Көшөләгегеҙҙә ҡалдырған аҡса һеҙгә икенсеһенә өлгәшеү мөмкинлеге бирер. Үҙегеҙ һайлағыҙ. Ә минең байлыҡ ошонан башланды: "Көшөләктәге ун һумдың туғыҙ һумын ғына тотондом".

## Байығыуҙың икенсе ысулы: "Үҙеңдең ихтыяжыңды контролдә тоторға өйрән"

Икенсе дәресте Аркад ошо һорауҙан башлай:

- Кисә һеҙҙең кемегеҙҙең көшөләгө буш ине?

- Барыбыҙҙыҡы ла, - тип яуаплай класс.

- Ә барығыҙ ҙа төрлөсә аҡса эшләй. Берәүҙәр - аҙыраҡ, икенселәр - күберәк. Ҡайһы берәүҙәрҙең ярҙамға мохтаж ғаиләләре бар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һеҙҙең көшөләктәр бер төрлө буш булған. Ә хәҙер мин һеҙгә шундай хәҡиҡәт әйтәм: әгәр ҙә һеҙ быға ҡаршылыҡ күрһәтмәһәгеҙ, сығымдарығыҙ һәр ваҡыт һеҙҙең тотоноуҙар менән ярышып үҫәсәк.

Ике төшөнсәне бутамағыҙ: һеҙҙең тейешле тотоноуҙарығыҙ һәм һеҙҙең теләгегеҙ. Һәр берегеҙҙә эш хаҡығыҙ ғына ҡәнәғәтләндерә алмаған теләктәр күп. Шуға ла һеҙ уларҙы ҡандырыуға барлыҡ аҡсағыҙҙы тотонаһығыҙ. Унда ла әле ҡандырылмаған әллә күпме теләгегеҙ тороп ҡала.

**Джорж С. КЛЕЙСОН.**
**(Дауамы бар).**



## 3 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Заполярный вальс". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз).
11.45, 14.45, 16.00, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Спортивная история. [12+]
12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 Преград. Net. [6+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 История одного села. [12+]
18.00 "Бай". [12+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Пофутболим? [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Д/ф "Культурный фронт". [16+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.15 Спектакль "Среда, среда". [12+]
3.15 Счастливый час. [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 Следопыт. [12+]

## 4 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Заполярный вальс". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Бала-саға". [12+]
10.45 Надо знать. [12+]
11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Детей много не бывает. [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]
17.00 Автограф. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Елкән. [6+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
23.45 Бәхетнамә. [12+]
1.00 Спектакль "Молодые сердца". [12+]
3.00 История одного села. [12+]
3.15 Счастливый час. [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]

## 5 АПРЕЛЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Заполярный вальс". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
10.30, 17.45 История одного села. [12+]
10.45 Әлләсе... [6+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [12+]
12.15 Пофутболим? [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 МузКәрәҙ. [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 "КультУра". [6+]
16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Дорогой мужества и славы". [12+]
23.45 Бәхетнамә. [12+]
1.00 "Муж и жена одна сатана". [12+]
2.45 Үткән ғүмер. [12+]
3.15 Счастливый час. [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [0+]

## 6 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Заполярный вальс". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Алтын тирмә". [0+]
10.45 Надо знать. [12+]
11.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.45 Счастливый час.
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).
13.45 Бәхетнамә.
15.00 Сулпылар. [0+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 Городок АЮЯ. [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Специальный репортаж. [12+]
17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Башҡорттар. [6+]
19.00, 20.30 Вечерний телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.15 Спектакль "Таштуғай". [12+]
3.00 "Ҡурай даны". [12+]
3.15 Счастливый час. [12+]
4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]
6.00 "Это моя профессия". [12+]

## 7 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Моя Мелодия. [12+]
23.35 Улыбка на ночь. [16+]
0.40 Х/ф "Сон как жизнь". [12+]
3.50 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.39 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]
10.30, 18.00 "Йома". [0+]
11.00 "Дорогой мужества и славы". [12+]
11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 14.45, 16.45, 22.00, 6.00 Интервью. [12+]
12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]
12.45, 5.00 Үткән ғүмер. [12+]
13.15 Ҡурай даны. [12+]
13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).
13.45, 5.30 Автограф. [12+]
14.15, 19.45 История одного села. [12+]
15.00 "АйТекә!" [6+]
15.15 "КультУра". [6+]
15.30 Гора новостей. [6+]
15.45 Формула меда. [12+]
16.00 "Аль-Фатиха". [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 "Ҡурай даны". [12+]
19.00, 3.00 Честно говоря. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
21.15 Специальный репортаж. [12+]
23.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 "Мелодии весны". [12+]
2.15 Алтын тирмә. [0+]
3.45 "Ете егет". [12+]
4.30 "Бай". [12+]

## 8 АПРЕЛЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Т/с "Золотая клетка". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Последний шанс". [12+]
0.35 Х/ф "Через беды и печали". [12+]
3.50 Х/ф "Ищу тебя". [16+]
5.27 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Ете егет". [12+]
8.30 Это моя профессия. [12+]
9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).
10.00 Елкән. [6+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 Преград. Net. [6+]
11.00 МузКәрәҙ. [0+]
11.30 "Не игрушка". Репортаж с презентации подросткового сериала. [6+]
12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]
12.30 Новости (на баш. яз). [12+]
13.00 Үткән ғүмер. [12+]
13.30 Башҡорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Автограф. [12+]
17.30 Д/ф "СВОи". [16+]
19.00 Формула меда. [12+]
19.15, 4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәңгелдәк. [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 2.15 Новости недели (на баш. яз).
23.15 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
0.00 Концерт Радика Вальмухаметова. [12+]
3.00 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]
5.15 "Млечный путь". [12+]
6.00 Мистический Башкортостан. [12+]

## 9 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1
6.10, 1.30 Х/ф "Поцелуев мост". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.05 Т/с "Золотая клетка". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.22 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Йома". [12+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Ҡурай даны". [12+]
9.00 "Бай". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз).
10.00 "Книга сказок". [0+]
10.15 "Городок АЮЯ". [0+]
10.30 "Гора новостей". [6+]
10.45 "Сулпылар". [0+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз).
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.30 "Дорога к храму". [0+]
16.00, 4.30 Историческая среда. [12+]
16.30 "Честно говоря". [12+]
17.15 Концерт Иделя Нургалина. [12+]
19.00 Әлләсе... [6+]
19.45 Патриот РФ. [12+]
20.00, 2.45 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
20.30 Полезные новости. [12+]
20.45, 3.15 Спортивная история. [12+]
21.15 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).
22.15, 2.15 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 "Яманташ". [16+]
23.45 Спектакль "Великий обольститель". [12+]
3.45 Честно говоря. [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]
6.45 Специальный репортаж. [12+]

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры
**6 апрель "Урал батыр"** башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 12+
**7 апрель "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина инсц.). 12+
**8 апрель "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 18.00 12+
**9 апрель "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры
**5-6 апрель Премьера! "Силсәүит, Алдар һәм Адвокат"** (М. Кәрим повесы буйынса), драма. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры
*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**7 апрель Премьера! "Вечно эта 345-ая!"** (Ж. Кусаинова), өлкәндәр өсөн фәлсәфәүи хикәйәт. 12+
**8 апрель "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 12.00, 14.00 0+
**9 апрель "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 14.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры
**5 апрель** - *Туймазы ҡалаһында,* **6 апрель** - *Миәкә районы Ҡырғыҙ-Миәкә ауылында гастролдәрҙә:* **"Аладдиндың тылсымлы лампаһы"** (Л. Нигмәтуллина инсц.), әкиәт 0+; **"Тыуған ил нимәнән башлана?"** музыкаль-әҙәби лекторий 6+; **"Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов, Г. Саламатова инсц.), шиғри драма. 12+
**7 апрель** - *Ғафури районы Красноусол ҡасабаһында* **"Хазина"** (С. Әбүзәр), комедия. 12+
**8 апрель "Сказка о царе Салтане"** (А.С. Пушкин), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе
**5 апрель "Мир ОТКРЫТиЯ"** музыкаль-әҙәби лекторий. 18.00 6+
**7 апрель Премьера! "Әсәй, бына һиңә килен…дәр!"** (И. Зәйниев), комедия. 12+
**8 апрель "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 18.00 12+
**9 апрель "Как Баба Яга Соловья-разбойника женила"** (Ю. Боганов), әкиәт. 12.00 0+
**"Ҡарауыл! Атай өйләнә!?"** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры
**3 апрель** - *Магнитогорск ҡалаһында* **"Һинән фатир, минән ир"** (Н. Ғәйетбай), гротекс-комедия. 12+
**4 апрель** - *Баймаҡ ҡалаһында* **"Таңбатыр"** (М. Ғиләжев), әкиәт. 0+; **"Һинән фатир, минән ир"** (Н. Ғәйетбай), гротеск-комедия. 12+
**5, 6, 7 апрель "Ай да, Репка"** ҡурсаҡ спектакле. 10.00, 12.00 0+

### БР Милли музейы
**5 апрель "Ҡарғатуй"** байрам. 12.00
**6 апрель "Таштың хикмәтле донъяһы"** сара. 15.00 6+
**8 апрель "Кинематографта Йыһан темаһы"** кинолекторий. 14.00 12+
**9 апрель "Таштың хикмәтле донъяһы"** сара. 13.00 6+
**"Панно в стиле этно"** оҫталыҡ дәресе. 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ
*1444 һижри йыл.*

| Апрель (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (12) дүшәмбе | 4:46 | 5:16 | 6:46 | 13:30 | 18:03 | 19:53 | 21:23 |
| 4 (13) шишәмбе | 4:43 | 5:13 | 6:43 | 13:30 | 18:04 | 19:55 | 21:25 |
| 5 (14) шаршамбы | 4:41 | 5:11 | 6:41 | 13:30 | 18:05 | 19:57 | 21:27 |
| 6 (15) кесе йома | 4:38 | 5:08 | 6:38 | 13:30 | 18:07 | 19:59 | 21:29 |
| 7 (16) йома | 4:36 | 5:06 | 6:36 | 13:30 | 18:08 | 20:01 | 21:31 |
| 8 (17) шәмбе | 4:33 | 5:03 | 6:33 | 13:30 | 18:09 | 20:03 | 21:33 |
| 9 (18) йәкшәмбе | 4:31 | 5:01 | 6:31 | 13:30 | 18:10 | 20:05 | 21:35 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# Проверенный способ борьбы с болью в суставах

## Почему опасно применять обезболивающее и чем укрепить хрящевые ткани, чтобы остаться на своих ногах



Процесс разрушения суставов неотделим от старения. Чем старше человек, тем меньше он имеет шансов на полноценную работу суставов и позвоночника. Множество людей страдают от неприятных ощущений в коленях, спине, и их движения становятся ограниченными. Но не все так печально. Об этом мы сегодня поговорим с **региональным куратором Центра передовых технологий Борисом Серджинским.**

■ **Почему же в XXI веке, когда медицина научилась творить чудеса, проблемы суставов часто заканчиваются инвалидностью, костылями или операциями?**

■ Потому что большинство больных по старинке бросаются за помощью к обезболивающим препаратам. А проблема в том, что мы не видим огромной разницы между болью, которая нас беспокоит, и ее причиной. Всегда нужно помнить, что боль - это всего лишь признак того, что в суставе начались проблемы. И они от обезболивающих таблеток и средств, поверьте, никуда не уходят! Более того, мы оказываем себе медвежью услугу, потому что, заглушая боль, до следующего обострения не вспоминаем о суставах. А причины остались! Разрушения продолжаются! И так раз за разом, пока не обнаружим, что ходить сами уже не можем. А к болям в суставах уже прибавились и проблемы с желудочно-кишечным трактом, повысилось давление, начали барахлить почки, - объясняет Борис Аркадьевич.

■ **Что же тогда делать?**

■ Увы, проблемы суставов сами не проходят. Поэтому, если хотите до последних дней оставаться на ногах и не быть обузой для своих близких, бороться за свои суставы нужно обязательно! Делать это надо грамотно, опираясь на новейшие научные методики.

■ **Какие же?**

■ Мы уже выяснили, что боль - это только признак недуга.

Корень проблемы - это возрастные изменения суставов, разрушение хряща, отложение солей на суставах и позвоночнике и нарушение выработки внутрисуставной смазки, так называемой синовиальной жидкости. Ее количество уменьшается, она густеет, становится вязкой и перестает выполнять свои смазочные функции. То есть фактически сустав пересыхает. При частичном или полном разрушении хряща уменьшается подвижность сустава, что вызывает крайне болезненное ощущение. Все эти изменения приводят к тому, что движения затрудняются, появляются хруст, треск, отек, боли. А в более поздних стадиях суставы даже изменяют свою форму, появляются шишки и бугры. Если вы хотите оставаться на ногах, то бороться нужно не столько с симптомами, сколько с причинами. Тогда и неприятные ощущения уйдут, и ходить будет легче. Вот для этого необходимы эффективные средства, стимулирующие рост хрящевой ткани в пораженной зоне. И выход есть! Это современный и эффективный суставной комплекс.

■ **Как же нам быть? Как бороться с причинами суставной боли?**

■ Укрепляются хрящи и межпозвонковые диски, укрепляются мягкие ткани суставов, мышцы и связки, которые, как корсет, поддерживают суставы и позвоночник и уменьшают нагрузку на хрящ. Плюс увеличивается выработка внутрисуставной жидкости, а главное - улучшается ее качество, то есть снижается вязкость, она становится более жидкой, хорошо смазывает и пропитывает хрящ и восстанавливает его упругость и эластичность.

> Как раз для борьбы с причинами суставных проблем и нужен суставной комплекс. Его уникальная формула содержит компоненты, воздействующие сразу на все элементы суставов.

■ **И что же это нам дает?**

■ Во-первых, прекрасный противовоспалительный эффект и быстрое снятие боли. Во-вторых, очищение суставов и позвоночника от избытка солей, все это делает движения в спине и суставах более легкими и безболезненными. Усиливается восстановление поврежденных хрящей и дисков позвоночника, то есть препараты суставного комплекса содержат еще и строительные материалы для ремонтных работ, а вот это как раз и означает, что результат будет устойчивым.

■ **Кому прежде всего стоит обратить свое внимание на суставной комплекс?**

■ Думаю, не ошибусь, если скажу, что вряд ли найдется человек, у которого хотя бы раз не возникала проблема, связанная с неприятными ощущениями в суставах и опорно-двигательном аппарате. Любой из нас, независимо от возраста, в той или иной степени сталкивался с различными проявлениями этого грозного недуга, который порой может привести к самым тяжелым последствиям. Суставной комплекс будет полезен людям и с недавно начавшимися проблемами и старикам, которые уже не один год занимаются этим вопросом, главное - не ошибиться в тактике и правильно подобрать схему приема. А вот для этого обращайтесь в наш Центр, телефон которого можно найти далее.

■ **А стоит ли использовать суставной комплекс при проблемах с позвоночником?**

■ Ну разумеется, ведь разрушительный процесс идет во всем опорно-двигательном аппарате, а позвоночник как раз является его частью. Кстати, первым выходит из строя как раз позвоночник - это самая распространенная проблема опорно-двигательного аппарата в молодом и среднем возрасте, но чаще всего обращаем на него внимание, только когда начинают смещаться диски, образовываться грыжи, появляются нестерпимые боли и заклинивание в пояснице. А ведь именно проблемы с позвоночником часто виноваты в головных болях, снижении работоспособности, усталости, разбитости, потому что нервы, которые управляют работой всех внутренних органов, выходят именно с позвоночника, их защемление ведет к стойкому сбою в работе всех органов. Так вот препараты комплекса способны улучшить питание и увлажнение дисков, расправить их и освободить зажатые корешки.

### Не тяните, не ждите нестерпимых болей !

**- Что бы вы посоветовали нашим читателям?**

- Не тянуть, не дожидаться нестерпимых болей, потому что часто боли появляются, когда ситуация уже достаточно запущена и сустав сильно поврежден. Помните, чем раньше вы займетесь укреплением суставов, тем проще, дешевле и безболезненней можно будет решить вашу проблему. Ведь можно до последних дней в возрасте оставаться на ногах, быть деятельным и быть нужным, помогать детям, растить внуков, передвигаться самостоятельно и не быть обузой для своих близких. Если вы выбираете себе такое будущее, обратитесь к суставному комплексу, он поддержит ваши суставы и обеспечит достойное качество жизни и в самом преклонном возрасте.




Сроки проведения акции с 22 марта 2023 г. по 30 апреля 2023 г.

**Всем крепкого здоровья. Берегите себя, здоровье у нас одно.**

ООО «Центр передовых технологий «Вита Ли Кубань». Юр. адрес: г. Краснодар, ул. Красная, 118, 6-й этаж. ИНН 2310182650. ОГРН 1152310001491. Не является лекарственным средством и БАД. РЕКЛАМА.

**Звоните и заказывайте комплекс для себя и своих близких**

**8 (800) 777-89-40**

Vita Li

Бесплатные звонок, консультация специалистов, а также бесплатная адресная доставка.

*✓ Йырҙарыңдың үлеүен теләмәйһеңме? Ул саҡта кеше йөрәге тураһында йырла.*

*(Роберт Браунинг).*



АФАРИН!

# ЕГЕРМЕ БЕР ЙЫЛ РӘТТӘН...

## Өфө балалары "Шаяниум"да



(Башы 1-се биттә).

Финал уйыны "Сәләмләү" тигән бер һынауҙан ғына торҙо һәм бөтә командалар ҙа үҙҙәре менән таныштырғандан һуң, бер нисә көләмәс һөйләп, юморлы хәл-ваҡиғаны сәхнәләштереп күрһәтте. Улар араһында былтыр, "Шаяниум"-дың юбилей йылында, төп еңеүсе булған М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының "Кендектәр", күп йылдар уңышлы ғына сығыш яһап килгән М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейының "Һупайлы дәрүиштәре", Р. Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһының "Етегән+1" командалары бар ине. "5-се синыф уҡыусылары һәм 7-се кластан Искәндәр Рафиҡов ингән яңы состав менән беренсе тапҡыр ҡатнашабыҙ "Шаяниум"да. Баштараҡ сәхнәгә ҡурҡыбыраҡ күтәрелгәйнек, финалға еткәнсе өйрәнеп киттек. Беҙ шаяртыуҙарҙы үҙебеҙ әҙерләнек, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыбыҙ Рита Батырова ярҙам итте. Бында матур итеп башҡортса сығыш яһау, кубок яулау һәм, әлбиттә, гимназиябыҙҙың данын арттырырға теләп ҡатнашабыҙ", - тип, тәьҫораттары менән дә бүлеште уйындан бушаған арала "Етегән+1" шаяндары.

Әйткәндәй, күп командаларҙың составтары яңырғаны күҙгә ташланды, ә бәғзеләренең башҡорт телен белеү кимәле бер аҙ түбәнәйеүе лә һиҙелде. Ҡыҙғанысҡа күрә, элекке бәйгеләр менән сағыштырғанда, балалар нишләптер саф башҡорт әҙәби телендә көләмәстәр һөйләмәй башлаған. Бәлки, өлкәндәрҙән дә үрнәк алаларҙыр: һәр ике һүҙҙе башҡортса-русса ҡатнаштырып, "ярты-йорто" телмәр тотоусылар һирәк күренеш түгел бит хәҙер. Йәки конкурстың элекке талаптары йомшара төшкәндер, тип фараз ҡылырға ҡала. Шулай ҙа командалар араһында матур башҡорт телмәре, башҡорт юморына хас шаяртыуҙары менән Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатының "Рәссамдар" командаһы хәтерҙә ҡалды. Бигерәк тә уларҙың донъялағы һуңғы ваҡиғаларға бәйле илебеҙҙә эшен дауам иткән брендтарҙың тышҡы йөҙө үҙгәреүенә иғтибар итеп, үҙ варианттарын тәҡдим итеүҙәре мәҙәк булды.







"Етегән+1"ҙәр ҙә "Рәссамдар"ҙан ҡалышманы. Мәҫәлән, уларҙың, "Хәҙер "Авдон" ҡошсолоҡ фермаһы тауыҡтары, үҙебеҙҙә ҡала, ситкә китмәй, тип, йомортҡаны күберәк һала башлаған икән", - тигән, ә Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһынан "XX централ" командаһының ҡыҙ-егеттәр темаһы буйынса шаярыуҙары хәтерҙә ҡалды.

Бәйге булғас, ҡатнашыусыларҙан тыш, унда еңеүсе булараҡ билдәләнеүселәр ҙә, бүләктәр ҙә була. Шулай итеп, Ғ. Ибраһимов исемендәге 2-се Башҡорт лицейының Гран-при яулаған "Тағы ла "2" шаяндарына 10 меңлек сертификат һәм Өфөләге аквапаркка билеттар тапшырылды. Балалар бишенсе йыл ҡатнашып, ниһайәт, уйындың төп призына эйә булыуҙарына шул тиклем ныҡ ҡыуандылар. Етмәһә, был командалағы бер бөртөк кенә ҡыҙ - Юлиә Ғарифуллина "Иң шәп ҡыҙ роле" номинацияһында билдәләнде. Ә бына беренсе урын яулаған "Рәссамдар" командаһында "Иң шәп егет роле"н башҡарыусы табылды - ул Айҙар Зәйнуллин. Бынан тыш, икенсе урынға "Етегән+1" командаһы, өсөнсөгә "Кендектәр" сыҡты.

"Шаяниум" конкурсының финал уйынында иң шәп сығыштар күрһәткән рус мәктәптәре командалары ла бүләкләнде. Улар араһында беренсе урынды 45-се мәктәптең "15 минуттан" командаһы яуланы, икенсе урынды - 86-сы гимназияның "Алға" һәм 4-се мәктәптең "Затоноград" командалары, өсөнсөнө - 21-се лицейҙың "Берҙәм 21-ҙәр", 25-се Белем биреү үҙәгенең "Беҙ - 25-тәр" командалары бүлеште. Улар араһында иң үҙенсәлекле шаяртыу уйлап тапҡан 160-сы мәктәптең "Амантай бәпестәре" командаһы ла бүләкләнде: уҡыусылар беҙгә "Башҡорт хужабикәһе" исеме аҫтында билдәле блогер Миләүшәнең бала сағын күрһәтте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балалар - ғаилә көҙгөһө, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәрҙер. "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсы беҙгә быны йылдан-йыл иҫбат итеп килә: балаларҙың сығыштарын ҡарап, беҙ башҡорт ғаиләләрендәге туған телдең урыны, ир менән ҡатын мөнәсәбәттәре, донъяға ҡараш һәм башҡа бик күп нәмәләр тураһында яҡынса һығымта яһай алабыҙ. Быға тиклем һәр ваҡыт юғары кимәлдә үткән юмор бәйгеһенең бәҫе киләсәктә лә төшмәһен ине, тип теләге килә.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠЫЛЛЫ ЯНЫНА БАРҺАҢ...

## аңғыраны эйәртмә

Ағай-эненең ҡыҙығы - алыш-биреш, ҡоҙалыҡтың ҡыҙығы - барып килеш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һине яңылыш һүҙ менән рәнйеткән - дошман түгел, ә быны усал ниәт менән эшләгән - дошман.

**(Демокрит).**

Йырҙарыңдың үлеүен теләмәйһеңме? Ул саҡта кеше йөрәге тураһында йырла.

**(Роберт Браунинг).**

Алла һәм мин - беҙҙең арала бер кем дә юҡ. Шулай булырға тейеш.

**(Мейстер Экхарт).**

Кеше үҙенең тәбиғәте менән иң таҙа һәм күркәм хайуан.

**(Луций Сенека).**

Эштең бер ниндәй хурлыҡлыһы ла юҡ; эшләмәү, ялҡаулыҡ - хурлыҡтың да хурлығы.

**(Гесиод).**

**Шулай итеп, тағы бер фекер: "Йылға ситендә ятҡан бүрәнәлә дүрт тәлмәрйен ултыра. Бына бер мәл һыу тулҡынланып, ҡапыл ғына бүрәнәне ағыҙып алып китә. Быға саҡлы бер тапҡыр ҙа бүрәнәгә ултырып йөҙөргә тура килмәгән тәлмәрйендәр шатлыҡтан телһеҙ ҡала. "Ҡара әле, ҡалай шәп булып сыҡты был бүрәнә, - тип телгә килә уларҙың береһе.- Быға саҡлы һыуҙа йөҙгән бүрәнәне күргән юҡ ине әле..." "Юҡ, ул үҙе йөҙмәй,- тип ҡаршы төшә икенсе тәлмәрйен. - Уны бит һыу үҙ ыңғайына ағыҙып алып китеп бара, уның менән бергә беҙ ҙә ағып китеп барабыҙ, диңгеҙгә барып еткәнсе шулай ағырбыҙ, моғайын..." "Хәрәкәт итеүсе - ул йылға ла, бүрәнә лә түгел, - ти өсөнсө тәлмәрйен. - Хәрәкәт - беҙҙең уйыбыҙҙа. Уйһыҙ бер нимә лә хәрәкәтләнә алмай..." Шулай итеп, өс тәлмәрйен ысынында нимә хәрәкәтләнеүе тураһында бәхәсләшә, һәр кем ныҡышып, үҙенекен раҫлай башлай. Ләкин күпме генә ҡысҡырышһалар ҙа, бер фекергә килә алмайҙар. Шунан улар үҙ бәхәстәрен сисеүҙе һорап, быға тиклем бер һүҙ өндәшмәй генә ултырған тәлмәрйенгә мөрәжәғәт итәләр. "Һеҙҙең һәр берегеҙ үҙенсә хаҡлы , - ти дүртенсе тәлмәрйен. - Хәрәкәт - бүрәнәлә лә, һыуҙа ла, һеҙҙең уйҙарҙа ла..." Был һүҙҙәргә тәлмәрйендәрҙең шул тиклем асыуы килә: уларҙың береһе лә яртылаш ҡына хаҡлы булыуға ризалашмай. Шунан һуң... өс тәлмәрйен үҙ-ара һөйләшеп килешеп, дүртенсе тәлмәрйенде һыуға төртөп төшөрә..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 23012

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
31 март 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 418

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.